ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

8-14 август (урағай) 2015
№32 (658)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Башҡорттар элек-электән йәштәргә һүҙ оҫталығы - сәсәнлек тәрбиәләүгә ҙур иғтибар биргән. Башҡорт кешеһе үҙенең ырыуы менән нәҫеле тарихын ныҡлы белеүҙән тыш, риүәйәттәр, үләңдәр, йырҙар, батырҙар тураһында ҡиссалар өйрәнергә һәм һөйләй белергә тейеш булған.*
**М.В. Лоссиевский.**

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Тикшереүҙәр ҡаты 4



Башҡортто ерҙән һәм... аҫаба хоҡуғынан айырып ҡарау мөмкин түгел 8-9



Думбыра сыңы... тарихтан ауаз бирә 10-11



Йәшендән нисек һаҡланырға? 13



ТВ-программа 14

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Август кәңәшмәһендә һүҙ бирһәләр, ни тураһында һөйләр инегеҙ?

***Фирүзә АБДУЛЛИНА, Ҡырмыҫҡалы районы Иҫке Бәпес мәктәбе уҡытыусыһы:*** Мин иң элек бөтәбеҙҙе лә бик борсоған мәсьәлә - мәғариф өлкәһендә оптималләштереүҙең ҡайһы бер күңелһеҙ һөҙөмтәләре тураһында һөйләр инем. Мәҫәлән, беҙҙең Иҫке Бәпес ауыл биләмәһендә генә лә өс мәктәптең ябылыуы хаҡында нисек өндәшмәй ҡалырға мөмкин? Өсөһө лә башҡорт мәктәптәре: Яңы Бишауыл, Абдулла, Ҡарлыманбаш башланғыс мәктәптәре ябылды. Тағы бер башҡорт ауылы - Алайғырҙа урта мәктәп туғыҙ йыллыҡ итеп ҡыҫҡартылғайны, хәҙер уныһын да ябып ҡуйҙылар. Бөтәһе 40-лаған бала уҡый ине. Уларҙы икегә бүлеп, яртыһын - беҙгә, ҡалғандарын күрше Ефремкино мәктәбенә йөрөтөп уҡыталар. Йәғни башҡорт балалары хәҙер сыуаш мәктәбенә йөрөп белем аласаҡ - был һеҙгә аңлашыламы, йәмәғәт? Милләтебеҙ йөҙөнән көлөүме был, әллә әлеге ауылдар халҡы мәнфәғәтен һанға һуҡмаумы? Бындай миҫалдарҙы артабан дауам итергә була: Ҡарлыман дөйөм белем биреү мәктәбе тулы булмаған урта мәктәп итеп ҡыҫҡартылды. Өлкән класс уҡыусылары хәҙер 1-се Ҡырмыҫҡалы урта мәктәбенә йөрөп уҡырға мәжбүр.

Мине борсоған икенсе мәсьәлә - мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыуға мөнәсәбәт. Әсә теле һәм әҙәбиәте дәрестәре мәктәп расписаниеһынан төшөп ҡалып бөтә бара. Мәҫәлән, X-XI кластарҙа хәҙер башҡорт теле дәрестәре аҙнаһына ни бары бер сәғәт кенә тороп ҡалды. Шуның һөҙөмтәһе булараҡ, өс йыл рәттән башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән имтихандар ҙа бөтөрөлдө. Балалар мәктәп эскәмйәһенән башҡорт телен һәм әҙәби әҫәрҙәрҙе генә түгел, хатта күренекле яҙыусыларыбыҙҙы, шағирҙарыбыҙҙы, башҡа билдәле шәхестәребеҙ-ғалимдарҙы, мәҙәниәт һәм сәнғәт әһелдәрен белмәйенсә сығып китә, сөнки бөгөнгө мәғариф системаһы үҙе үк ошондай томаланлыҡҡа булышлыҡ итә.

***Фәнзил САНЪЯРОВ, Рәсәй һәм Башҡортостан мәғариф алдынғыһы, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Башҡортостан мәғарифты үҫтереү институтының башҡорт һәм башҡа туған телдәр һәм әҙәбиәттәр кафедраһы доценты:*** Быйыл 42-се уҡыу йылымды башларға ниәтләп торам. Һәр йылымды ла ҡанатланып, дәртләнеп ҡаршылайым. Әле бына һәйбәт йолаға әүерелгән август конференцияларына әҙерләнәбеҙ. Был сараға мин һәр ваҡытта ла етди ҡарайым. Сөнки, минең аңлауымса, район, ҡала, республика кимәлендә үткәреләме ул - уларҙың бөтәһендә лә мәғариф өлкәһендәге көнүҙәк мәсьәләләр ҡаралырға һәм уларҙы хәл итеү юлдары күрһәтелергә тейеш. Уҡытыусылар өсөн генә түгел, барлыҡ йәмғиәтебеҙ алдында ла оло трибуна бит ул. Шуға ла унда буш күңел менән килеүсе уҡытыусы, ғөмүмән, юҡтыр ул, тип ышанғы килә. Һеҙ әйтмешләй, әгәр конференцияла һүҙ бирһәләр, иң беренсе нәүбәттә әйтергә теләгән фекерем милли мәғарифҡа ҡағылышлы булыр ине, сөнки милли төбәктәрҙең мәғариф министрлыҡтары башкөллө Берҙәм дәүләт имтихандары менән генә шөғөлләнергә тейеш түгел, тип уйлайым. Күп милләтле республика булараҡ, беҙҙең ерлектә туған телдәрҙе уҡытыу һәм был эште йылдан-йыл яңы алымдар менән байытыу, үҫтереү, уҡыу әсбаптары, заман талабынан сығып төҙөлгән дәреслектәр менән тәьмин итеү - туранан-тура Мәғариф министрлығының бурысы ул. Был мәсьәләләрҙе хәл итеү буйынса беҙ юғарынан күрһәтмәләр көтөп ултыра алмайбыҙ, сөнки туған телдәрҙе уҡытыу төбәк законлары һәм положениелары нигеҙендә көйләнә икәнен беләбеҙ. Әйткәндәй, Рәсәй Мәғариф һәм фән министрлығы бер ваҡытта ла, әйтәйек, Башҡортостан мәктәптәрендә башҡорт теле уҡытыу эшенә ҡыҫылманы, уны тыйманы. Был эш урындағы компетенция тип ҡарала һәм уның яҙмышы тулыһынса урындағы мәғариф чиновниктары ҡулына ҡарап тора. Беҙҙә, киреһенсә, был мәсьәлә менән нигеҙҙә йәмәғәтселек күберәк шөғөлләнә кеүек. Министрлыҡ, бая әйткәнемсә, БДИ мәсьәләләре менән бер ҡатар, һәр төрлө конкурстар, олимпиадалар үткәреү менән генә мәшғүл булып, милли мәғариф проблемаларын ситкә ҡуйырға тейеш түгел. Бына шул хаҡта һөйләр инем мин.

(Дауамы 2-се биттә).

ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

# АВГУСТ КӘҢӘШМӘЛӘРЕ...

## милли мәғарифҡа бағышланһын

**"Киске Өфө" гәзите милли мәғарифҡа, башҡорт телен туған тел һәм дәүләт теле булараҡ уҡытыу проблемаларына әленән-әле мөрәжәғәт итеп тора. Быйыл 3-сө һанда "Ҡоролтай зыңғыры" рубрикаһында баҫылып сыҡҡан сығышында Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары Буранбай Күсәбаев милли мәғариф өлкәһендәге етешһеҙлектәргә, проблемаларға ентекле анализ яһағайны. 13-сө һанда Сибай ҡалаһы "Ирәндек" лицейының башҡорт теле уҡытыусыһы Назиә Бикбова ла мәғарифтағы бөгөндән хәл итергә кәрәкле мәсьәләләр хаҡында тос фекерҙәр әйткәйне. Мәғариф хеҙмәткәрҙәренең август кәңәшмәләре алдынан мин дә үҙемде борсоған бер нисә проблемаға туҡталып үтмәксе булдым.**

(Дауамы 3-сө биттә).



12+

УҠЫП СЫҠТЫМ...



# ТӘБИҒӘТЕБЕҘ ҮҘЕ ТАРИХ ҺӨЙЛӘЙ - тот та туризмда файҙалан!

**"Киске Өфө"нөң 29-сы һанында баҫылған "Шүлгәнташта төҙөләсәк музей... тарихыбыҙҙы киләсәккә илтер" тигән һөйләшеүҙә БР Мәҙәниәт министрлығының Тарихи ҡомартҡыларҙы һаҡлау буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге директоры Данир Ғәйнуллин һәм ошо үҙәктең архитекторы Рөстәм Әлибаев менән ҡоролған әңгәмәне бик кинәнеп уҡыным. Әгәр ҙә егеттәр республика ярҙамы менән ошо бик кәрәкле проектты осона сығара алһа, халҡыбыҙ өсөн оло эште генә түгел, ә иң мөһиме, тәбиғәтебеҙ алдындағы бурысыбыҙҙы үтәп ҡуйырҙар ине.**

Һуңғы ваҡытта Башҡортостанда туризмды булдырыу тәңгәлендә ҡыуандырырҙай эштәр күҙгә күренә башланы. Бәлки ул, беҙ теләгәнсә, бик үк етеҙ үҫешмәһә лә, ыңғай күренештәр бар. Әйтәйек, күптән түгел Мораҙым тарлауығына барып, күңел үҫеп ҡайтты: ял итеүселәр өсөн байтаҡ ҡына уңайлыҡтар эшләнгән, артабан да яҡшыртырға теләктәре бар. Эштәре яйлы барһа, "Мораҙым" халҡыбыҙ тарафынан ҡәҙерләп һаҡланасаҡ бер тәбиғәт һәйкәле булыр. Үкенескә күрә, эргәбеҙҙә ятҡан Талҡаҫ күле, Ғәҙелша шарлауығы тураһында бөгөн бындай ҡәнәғәтләнерлек баһалама биреп булмай әлегә. Бындағы ял итеү биләмәһендә үлән-сәскәләрҙе иҙгән автомобилдәрҙе, аяуһыҙ ҡыйланған яр буйҙарын, бәҙрәф таба алмай интеккән халыҡты күреү йәнде әсетә. Әлбиттә, кемдер, халыҡтың мәҙәниһеҙлеге, тәртипһеҙлеге, матурлыҡты аңлап етмәүе, тиер. Әммә уңайлыҡтар булдырылғанда, тейешле талаптар ҡуйылғанда, күптәр һаҡсыллыҡ яғында булыр ине.

Беҙҙең Башҡортостанда һәр таш, уба, йылға үҙе үк тарих һөйләй - тот та туризмда файҙалан! Шуға күрә лә әлеге мәлдә ер-һыуҙарыбыҙҙың легендаларына тағы бер тапҡыр күҙ һалыу, ныҡыраҡ өйрәнеү, һәр атамаға ҡарата иғтибарлы булыу һәм уны үҙгәртеүгә юл ҡуймау бурысы тора. Кипрҙа, мәҫәлән, бөтә туризм грек мифологияһына ҡоролған: был ярҙа Афродита һыуҙан сыҡҡан, диңгеҙ буйындаға ҙур таштарҙы бәһлеүән яугир дошман караптарына ташлаған... Милли аш-һыу әҙерләгән урындар ҙа (зәйтүн майы һығыу заводы, тәмлекәстәр цехы) туристик маршруттарға индерелгән. Шулай уҡ Кипрҙа археологик ҡаҙылмаларға бик һаҡсылдар, табылған боронғо мозаикалар махсус ҡыйыҡтар менән ябылған. Ә беҙҙәге Өфө-2 ҡаласығы яҙмышы нисәмә йылдар хәл ителмәй, юғалып юҡҡа сыҡҡанын көтәбеҙме?

Шүлгәнташ мәмерйәһенә килгәндә, әлеге әңгәмәләге егеттәр әйтеүенсә, республикабыҙ төптән уйланылған ҙур туристик эш алдында тора. Был башланғысты еренә еткереп ҡуйыу һәр кемдең мөҡәддәс бурысы. Кем булыуыбыҙға, ҡайҙа ултырыуыбыҙға ҡарамаҫтан, проектты бойомға ашырыуҙа мөмкин тиклем ярҙам итергә тейешбеҙҙер. Егеттәргә иһә изге эштәрендә еңеллек теләйек.

**Гөлсәриә ӘБИЛЕВА.**
**Сибай ҡалаһы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Август кәңәшмәһендә һүҙ бирһәләр, ни тураһында һөйләр инегеҙ?

**(Башы 1-се биттә).**

***Ринат СИТДИҠОВ, Салауат районы Лағыр урта мәктәбе директоры, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы:*** Тәҡдимдәр, фекерҙәр бар, әлбиттә. Мин бөгөнгө мәғариф системаһының көн тәртибенән төшөп ҡала барған тәрбиә мәсьәләләре тураһында һөйләр инем. Унан алда шулай ҙа уҡыу-уҡытыу өлкәһенә ҡағылышлы бер фекеремде лә әйтеп китеү урынлы булыр, тием. Ул да булһа, әйтер һүҙем Берҙәм дәүләт имтихандарына ҡағыла. БДИ-ны бөтә уҡыусылар ҙа түгел, ә ул киләсәктә вуздарға инеү өсөн кемдәргә кәрәк, шулар ғына тапшырһын ине, тигән теләк бар. Кемгә БДИ балдары кәрәкмәй, улар имтиханды элеккесә тапшырһын. Юғиһә, балаларҙың ҡайһы берҙәре шул БДИ-нан ҡурҡып, 9 класс бөтә лә, мәктәпте ташлап китергә мәжбүр була. Шул арҡала мәктәп бөтөүгә табан бара, ә мәктәп ябылһа, үҙегеҙгә мәғлүм, ауыл да бөтә. Бөгөн мәктәптәр күбеһенсә ана шул БДИ-ға әҙерлек менән ығы-зығы килеп, тәрбиә эшен онотоп бара.

Беҙ үҙебеҙ иһә белем биреү менән тәрбиә мәсьәләләрен бергә алып барырға тырышабыҙ. Балалар хеҙмәттә һәм спорт уйындарында күнекмәләр алып, сыныҡып үҫергә, тыуған яҡты, ватаныбыҙҙы яратып, тарихыбыҙҙы өйрәнеп, матурлыҡ һәм изгелек төшөнсәләренә, камиллыҡҡа ынтылып йәшәргә өйрәнергә тейештәр. Ошо маҡсаттарҙан сығып, мәктәбебеҙҙә бишенсе йыл инде "Салауат" хәрби-патриотик клубы, тыуған яҡты өйрәнеү һәм ауылыбыҙҙан сыҡҡан билдәле опера йырсыһы Хәбир Ғәлимов музейҙары эшләй. Спорт буйынса уңыштарыбыҙ бар. Һуғышта ятып ҡалған яугирҙарҙы, ветерандарыбыҙҙы ла онотмайбыҙ. 9 майҙа яу ҡырынан әйләнеп ҡайтмаған 100 яҡташыбыҙҙың фотопортретын тотоп, "Исемһеҙ полк" маршына беҙ ҙә ҡушылдыҡ. Балалар өсөн уның тәрбиәүи йоғонтоһо бик көслө булды. Спортты яратабыҙ. Ике уҡыусыбыҙ милли көрәш буйынса Рәсәй беренселегендә ҡатнашып, береһе - чемпион исемен, икенсеһе призлы урын яуланы. Көслө генә хоккейсыларыбыҙ, йәш буйынса ике хоккей командабыҙ бар. Ҡыҙҙарыбыҙ ҙа хоккей уйнай хатта, уларҙан айырым команда төҙөргә уйлайбыҙ. 2012 йылда ауыл мәктәптәре араһында республика конкурсында беренсе урын яуланыҡ, башҡа конкурстарҙа һәм олимпиадаларҙа ла һынатҡаныбыҙ юҡ.

Өлгәшелгәндәр күп, ләкин уларҙы теҙеп һанап сығыу үҙмаҡсаттан түгел. Төрлө яҡлы тәрбиә эше алып барылмаһа, белем генә кешене кеше итмәй, тимәксемен. Кешене гражданин, илһөйәр, эшһөйәр, хәстәрлекле ғаилә башлығы итеп тәрбиәләү бурысы ата-әсәләр менән берлектә мәктәптең дә төп эше булып ҡалыуҙан туҡтамаһын ине.

***Фирүзә Ишбирҙина, хеҙмәт ветераны:*** Ишетмәһәң - ишет, тигәндәй, ошо көндәрҙә ҡайһы бер аҡыллы баштар уҡыу йылын башлауҙы 15 сентябргә күсерергә тәҡдим яһап ята. Август кәңәшмәһендә тикшерә торған етди мәсьәләләр былай ҙа бик күп, ә бында каникулдарҙы һаман да һуҙырға теләүселәр килеп сыҡты. РФ Президенты ярҙамсыһы Игорь Левитин тигән чиновник ауыҙынан сыҡты тик торғанда был яңылыҡ. Шулай инде, мәғариф мәсьәләләренә кем генә ҡыҫылмай хәҙер! Элек транспорт министры булып эшләгән кеше хәҙер мәғариф өлкәһенә тотонмаҡсы. Әйткәндәй, транспорт өлкәһендә ниндәй эш ҡырҙы икән һуң әле ул? Был хаҡта интернет бер ни ҙә өндәшмәй. Бындай алабарман тәҡдиме менән чиновник илдә ҡайһы бер проблемаларҙы хәл итергә уйлай, тиҙәр. Мәҫәлән, көҙгө "бәрхәт" сезонда ял осорон оҙаҡҡараҡ һуҙыу һәм шуның менән илдә туризмды үҫтереү. Был йәһәттән ул көнбайыш Европа илдәрен миҫал итеп ҡуя, имеш. Рәсәйгә санкциялары менән тарихта булмағанса ҡырағай ҡыланыштар күрһәтеүсе ошо илдәрҙе ҡасан өлгө итеп алыуҙан туҡтарбыҙ? БДИ менән былай ҙа бик күп яҙмыштарҙы һындырабыҙ түгелме? Күпме бала шул арҡала үҙ-үҙенә ҡул һалды. Күпмеһе 9-ҙы бөтөрөп, мәктәптән тиҙерәк "тайыу" яғын ҡарай хәҙер, сөнки БДИ - имтихандарҙы түгел, ә тентеүҙәр, шымсылыҡ итеү һәм күҙәтеүҙәре менән балаларҙың ҡотон осормалы һорау алыуҙарҙы хәтерләтә бит. Бына ошо хаҡта һөйләшергә кәрәктер, бәлки, кәңәшмәлә?..

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

*ИҒТИБАР!*

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Республика ҡалалары һәм райондарының бөтә почта бүлексәләрендә лә "Киске Өфө" гәзитенә йыл әйләнәһенә яҙылып була. 31 августҡа тиклем 2016 йылдың беренсе ярты йыллығына быға тиклемге хаҡ менән, йәғни 539 һум 76 тингә (индексы 50665) яҙыла алаһығыҙ.**

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ:**

● Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға 402 һумға яҙылырға була.

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә: ярты йылға - 252 һум.

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - 252 һум.

● **Дәртләндереү сараһын дауам итәбеҙ.** Гәзитебеҙгә яҙҙырып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙ араһынан кемдәрҙер Мәрйәм Бураҡаеваның "Арғымаҡ", Гөлнур Яҡупованың "Ҡатындар", Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан йыры", Шәүрә Шәкүрованың "Өфө вокзалы", "Антология поэзии Башкортостана", Ә. Әсфәндийәровтың "История сел и деревень Башкортостана", 2016 йылға башҡортса "Дини календарь", 2016 йылға "Мәктәп календары", Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек" китаптарын алып ҡыуаныуы ихтимал. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ?

● Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru. Беҙҙең электрон почта: info@kiskeufa.ru. Беҙҙең блог: blog.kiskeufa.ru.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай Дәүләт Думаһы ҡабул иткән закон проекттарының һаны буйынса Волга буйы федераль округы төбәктәренең закон сығарыу органдары рейтингында беренсе урын алды. Республика парламенты индерелгән закон проекттарының һаны буйынса Һамар Губернаһы Думаһынан ҡала икенсе урынды биләй.

✓Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы 2016 йылға республика Башлығы гранттарын алыуға ғаризалар ҡабул итә башланы. Быйыл мәҙәниәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәре өсөн 90 мең һумлыҡ 25 грант, ә ижади коллективтар өсөн 270 мең һумлыҡ биш грант әҙерләнгән. "Гранттар музыка, театр, белем биреү, бейеү һәм һынлы сәнғәт, кинематография, архитектура һәм дизайн, музей һәм китапхана эше, художество кәсептәре һәм һөнәрҙәре, халыҡ ижады өлкәләрендә мәҙәни ҡиммәттәрҙе һаҡлау, арттырыу, таратыу һәм үҙләштереү буйынса ижади проекттарға ярҙам итеү, шулай уҡ республиканың мәҙәни ҡеүәтен һаҡлау һәм үҫтереү өсөн булдырылған", - тиелә Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығының белдереүендә.

✓Башҡортостанда "Башҡортостан халҡын социаль яҡлау" республика маҡсатлы программаһының бюджеты 4 миллиард һумға арттырылған. Республика Хөкүмәтенең ҡарарына ярашлы, программаны ғәмәлгә ашырыуға 79,4 миллиард һум урынына 83,6 миллиард тотоноласаҡ. Программаны тормошҡа ашырыуға республика бюджетынан 65,9 миллиард түгел, ә 66 миллиард һумдан ашыу йүнәлтеләсәк. Федераль бюджеттан 10,05 миллиард урынына 14,2 миллиард һум ҡаралған. Ошо маҡсатҡа бюджеттан тыш сығанаҡтарҙан 34,6 миллиард урынына 34,4 миллиард һум бүленәсәк.

✓Депутаттар Башҡортостан Дәүләт Йыйылышының көҙгө сессиялағы тәүге ултырышында республика автомобиль юлдарындағы хәл менән танышырға ниәтләй. Һуңғы мәғлүмәттәр балалар ҡатнашлығындағы һәм иҫерек водителдәрҙең ғәйебе буйынса юл-транспорт ваҡиғаларының артыуы хаҡында һөйләй. Ағымдағы йылдың тәүге ярты йыллығында республика юлдарында 11 бала һәләк булған, 179 сабый төрлө тән йәрәхәттәре алған. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы Рәйесе Константин Толкачев билдәләүенсә, депутаттар юл хәрәкәте өлкәһендәге кире күренештәрҙе кәметеү өсөн барлыҡ ресурстарҙы ла файҙаланырға ниәтләй.

ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

# АВГУСТ КӘҢӘШМӘЛӘРЕ...

## милли мәғарифҡа бағышланһын

(Башы 1-се биттә).

Үҙенең эш тәжрибәһенә таянып, 2011 йылда 141-се мәктәптә башҡорт телен уҡытып йөрөгән Фәүзиә Фәһим ҡыҙы Мортазина рус телле 1 класҡа тәғәйенләнгән, башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыу өсөн методик комплекты яҙғайны. Балаларҙың коммуникатив телмәрен үҫтереүгә күберәк иғтибар биреү маҡсатына хеҙмәт итерлек дәреслек ине ул. Ҡыҙғанысҡа күрә, ул комплект быйылғы 2014/2015 уҡыу йылы башланыр алдынан ғына донъя күрҙе һәм башҡорт туған телен өйрәнеүсе 1-селәр өсөн тәғәйенләнде. Сөнки, үкенескә ҡаршы, 1-се класта икенсе быуын стандарттары индерелгәндән бирле башҡорт дәүләт теле уҡытылмай. Үткән уҡыу йылы башланыр алдынан ошо комплекттың "Эш дәфтәре"н башҡорт дәүләт телен беренсе йыл өйрәнәсәк 2-се кластарҙың ата-әсәләренә, һатып алыуҙарын үтенеп, мөрәжәғәт иттек. Рәхмәт ата-әсәләргә, беҙҙең үтенесте күтәреп алдылар, хатта 2-се класта уҡыған Батталова Әҙилә исемле ҡыҙҙың әсәһе, барса уҡыусыға етерлек итеп төҫлө сканер аша үткәреп, "Эш дәфтәре" менән тәьмин итте. Рәхәтләнеп, яратып башҡаралар уҡыусыларым ундағы эштәрҙе. Ошоноң кеүегерәк тәжрибәнән сығып, йәғни дәреслектәр сығарыу эше ентекле ойошторолһон өсөн Милли мәғариф институтының филиалын тергеҙеү маҡсатҡа ярашлы булыр ине, тип хыялллана уҡытыусылар. Ваҡытында Башҡортостан Милли мәғариф институты Рәсәйҙәге көслө методик үҙәктәрҙең береһе ине. Тимәк, оптималләштереү алға ынтылышты тотҡарлай, регресҡа әйләнә, тип әйтергә генә ҡала. Эштәр көйләнеренә һаман ышанабыҙ, өмөттө өҙмәйбеҙ.

Милли мәғариф өлкәһендәге проблемалар бының менән генә тамамланмай шул, үкенескә күрә. Иғтибар итегеҙ әле, Өфө мәктәптәрендә уҡып йөрөгән һәр башҡорт балаһы башҡорт телен туған тел булараҡ өйрәнәме? Юҡ, өйрәнмәй. "Туған тел" дәрестәре, тип балаларыбыҙ күп осраҡта рус теленән төп йомғаҡлау аттестацияһына йә БДИ-ға әҙерләнә. Ата-әсәләр "Балам рус теленән көсһеҙ, имтиханды насар биреп ҡуймаҡайы", тип хафаланып, балаһын туған башҡорт теле дәресенә йөрөтөргә ризалыҡ бирмәй. Класс етәкселәре, мәктәп етәкселеге, ата-әсәләрҙе махсус йыйып, башҡорт теле белгестәрен, абруйлы, рухлы кешеләр менән осраштырып, туған тел өйрәнеүҙең кәрәклеге тураһында инандырырлыҡ йөнле әңгәмәләр ҡорамы? Юҡ инде, юҡ! Ошонан сығып, күптәрҙең телләгән, шулай уҡ Бөтөн донъя башҡорттары Башҡарма комитеты күтәреп сыҡҡан тәҡдимде тағы бер тапҡыр ҡабатлайым: 2015 йылғы август кәңәшмәһе Башҡортостан Республикаһындағы милли мәғариф торошона бағышланһын ине.




Былтырғы уҡыу йылы башланғас, Дим районы башҡорттары ҡоролтайы ағзалары менән Дим районы мәктәптәрендә "Башҡортостан Республикаһында дәүләт телдәре тураһында"ғы закондың үтәлешен тикшереп йөрөнөк. 103-сө һәм М. Шайморатов исемендәге 104-се мәктәптәр етәкселәренең башҡорт туған телен уҡытыу буйынса шәхсән позитив ҡарашы миңә бик оҡшаны. Улар (үҙҙәре рус милләтләр) моңһоҙ ата-әсәләр менән әңгәмәләр ҡороп, башҡорт милләтле уҡыусыларҙың башҡорт туған телен өйрәнеүенә булышлыҡ итәбеҙ, тинеләр. Ысынлап та, "тыңлауһыҙ" етәкселәргә күрһәтмә документтар ебәрергә, уларҙан РФ Конституцияһында һәм Балалар хоҡуҡтары Декларацияһында яҙылған "Һәр баланың туған телен өйрәнергә хоҡуғы бар" тигән пунктты мотлаҡ үтәүен талап итергә кәрәк ине ул.

Дөрөҫөн әйткәндә, тел булмаһа, илең дә юҡ. Минә академик Роберт Ниғмәтуллиндың Башҡортостан халыҡтары Ассамблеяһындағы сығышында (2000 йыл) әйткән һүҙҙәре иҫкәртеү кеүек яңғырай: "Әгәр беҙ Башҡортостанда башҡорт телен һаҡламаһаҡ, беҙҙә тарих ғәфү итмәйәсәк". Ә ғалим Вәкил Исмәғил улы Хажиндың "Туған телде белеү милли идеяға әйләнергә тейеш", тигән тәҡдиме һәр башҡорт кешеһе өсөн әйҙәүсе күрһәтмә булырға, телен хөрмәт иткән, уны популярлаштырыу өсөн әүҙем эшләгән һәр башҡорттоң тормош девизына әйләнергә тейеш. Теле өсөн янып йөрөгән һәр башҡорт кешеһе, ата-әсә булараҡ, Хөкүмәтебеҙҙән, исмаһам, альтернатив дәреслектәр талап итһә, хакимиәттәрҙәге дәүләт телдәре буйынса комиссиялар, Яҙыусылар союзы, мәҙәниәт әһелдәре (Башҡорт дәүләт филармонияһы артистарына рәхмәт, мәктәптәргә киләләр, башҡортса йырҙар яңғыраталар, милли бейеү башҡаралар), Башҡортостан телевидениеһы, матбуғат хеҙмәткәрҙәре мәктәптәргә барып, осрашыуҙар үткәрһә, башҡорт телен белгән балаларҙы, уларҙың ата-әсәһен хуплау һүҙҙәре менән дәртләндерһә, уларға ҡанат ҡуйһа, туған телгә ҡараш бермә-бер ыңғай яҡҡа үҙгәрер ине.

Методикаһын заманса алымдар менән байытып эшләп йөрөгән башҡорт теле уҡытыусыларына ла маҡтау, һәләттәрен тейешенсә баһалау бик тә кәрәк. Эрудициялы, Тыуған ил тарихын, мәҙәниәтен биш бармағы кеүек белгән, үҙенең балалары һәм ейәндәре сатнатып башҡортса һөйләшкән, үҙенең ғаилә шәжәрәһен генә түгел, ауылындағы нәҫелдәр шәжәрәләрен өйрәнгән, уҡыусыларын туған тел менән бәйле төрлө тикшеренеү эштәренә йәлеп иткән башҡорт теле уҡытыусыһы ғына туған теленә бар ҡеүәте менән хеҙмәт итә һәм башҡаларға өлгө була ала тип раҫларға мөмкин. Күрә һәм баһалай белергә кәрәк һәләтле уҡытыусыларҙы. "Йыл уҡытыусыһы" конкурсында ҡатнашыу - үҙе бер һынау, үҙенсәлекле бер БДИ. "Киске Өфө"-лә Фәүзиә Яхина апай уҡытыусыларға һынау үткәрергә, бар яҡлап үҫеш кимәлен, ижади мөмкинлектәрен үлсәргә тәҡдим итә, бәлки, был дә дөрөҫтөр. Һәр уҡытыусы аудитория алдында тотлоҡмайынса сығыш яһай белергә, һәр ваҡыт белемен арттырыу, ижади һәләттәрен үҫтереү өҫтөндә арымай-талмай эшләргә, үҙенең ҡыҙыҡһыныуҙарын уҡыусыларына ла "йоҡторорға" тейеш. Үҙен хөрмәт иткән һәр уҡытыусының "Йыл уҡытыусыһы" һәм башҡа профессиональ, мәҙәни-интеллектуаль конкурстарҙа, йәмәғәтселек ойошторған сараларҙа ҡатнашыуы, эрудициялы булыуы мотлаҡ. Башҡорт теле уҡытыусыһы, үҙе һайлаған йүнәлештә белеү генә түгел, донъя әҙәбиәтенең, мәҙәниәтенең тарихы, бөгөнгө үҫеше менән даими ҡыҙыҡһынырға, рус телендә иркен аралашырға тейеш. Шунда ғына ул ысын уҡытыусы була ала. Күптән түгел Үҙәк телевидениела ойошторолған бер тапшырыуҙа педуниверситет студенттарына, буласаҡ уҡытыусыларға, белем кимәлдәрен тикшереү маҡсатында, еңел генә һорауҙар бирҙеләр. Бер һорауға ла дөрөҫ яуап бирә алманы шул хәсрәт тоҡсайҙары.

Ләкин ябай уҡытыусы ғына хәл итә алмаған проблемалар бик күп. Әйтеп үттем бит: ябай башҡорт теле уҡытыусыһы үҙ инициативаһы менән дәреслек яҙған, "бишле" уға. Тик бындай башланғыстарҙы күтәреп алырға, шундай дәреслектәрҙе фәнни эшкәртеүсе методист-ғалимдарҙың ярҙамы кәрәк. Әгәр стандарттарға ярашлы дәреслектәр ваҡытында әҙер булһа, БР Мәғариф министрлығынан мәктәп етәкселәренә башҡорт телен дәүләт теле һәм туған тел булараҡ уҡытыу буйынса мотлаҡ үтәлерҙәй аныҡ ҡына күрһәтмәләр ебәрелһә, башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеү дәрестәре күләмен һаҡлап ҡалыр инек. Кәңәшмәләрҙә, түңәрәк өҫтәлдәрҙә осрашҡанда шул турала һораһаң: "Башҡорт телен дәүләт теле һәм туған тел булараҡ уҡытыуҙы һаҡлап ҡалыуҙы һеҙ үҙегеҙ талап итегеҙ, директорға инеп һөйләшегеҙ, төбәк компонент дәрестәренә шунсама процент сәғәт бүленергә тейешлеген аңғартығыҙ", - тип, уҡытыусыларҙың үҙҙәренә бурыс һала ла ҡуялар. Талап итергә тейеш урында ултырғандар нимә эшләргә тейеш һуң улайһа?

Һүҙемдең һуңында шуны әйткем килә: туған башҡорт телебеҙ, ни тиклем парадоксаль яңғырамаһын, Хөкүмәт яҡлауына мохтаж. Тиҙ арала Федераль стандарттар талаптарына тура килгән альтернатив дәреслектәр сығарылмаһа, БР Мәғариф министрлығы хәл иткес ҡарарҙар ҡабул итмәһә, республикаға исем биргән халыҡтың туған теле, Башҡортостан Республикаһындағы дәүләт телдәренең береһе тағы ла ауырыраҡ һынау алдына ҡуйыласаҡ. Мәсьәләне һуң булмағанда хәл итеп ҡалырға кәрәк. Ә милләттәштәргә шуны әйткем килә: туған телде һаҡлау бурысын милли идеяға әйләндерәйек, башҡа милләттәрҙе хөрмәт итеп, үҙебеҙҙе яратып йәшәйек!

**Миңһылыу АБДУЛЛИНА.**
**Өфөләге 123-сө лицейҙың башҡорт теле уҡытыусыһы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Июлдә Башҡортостанда мотлаҡ пенсия страховка системаһына эш биреүселәрҙән һәм халыҡтан килгән иғәнә аҡсаһы 6 миллиард 238 млн һум тәшкил иткән. Был былтырғы кимәлгә ҡарата 100,4 процент, тип хәбәр иттеләр республиканың пенсия ведомствоһынан.

✓Башҡортостандың тимер эше оҫталарын "Оҫталар ҡалаһы" V Халыҡ-ара тимерселәр фестивалендә ҡатнашырға саҡыралар. Сара 11 сентябрҙән 13-нә тиклем Силәбе өлкәһенең Златоуст ҡалаһы янындағы Красная Горка ҡасабаһында урынлашҡан П.П.Бажов исемендәге тау паркында ойошторола. Ҡатнашыу өсөн ғаризалар (3513) 62-10-32; 62-01-15; 65-25-04 телефондары буйынса, шулай уҡ muzeizlatoust@mail.ru электрон почтаһына ҡабул ителә.

✓2015 йылдың 1 авгусынан 2016 йылдың 1 авгусына тиклем Башҡортостанда һунарсыларға 1200-ҙән ашыу ҡырағай йөнлек ауларға рөхсәт ителде. Улар араһында мышылар, себер ҡоралайҙары, һоро айыуҙар һәм бурһыҡтар бар. Лимитҡа ярашлы, һунарсылар 510 мышы, 428 себер ҡоралайы, 158 һоро айыу һәм 187 бурһыҡ аулай ала.

✓Башҡортостандың юғары уҡыу йорттары мәғлүмәт стендтарында һәм сайттарҙа беренсе этаптағы студенттарҙы ҡабул итеү тураһында бойороҡ сығарҙы. Быйыл Өфө дәүләт авиация техник университетында бакалавриат, белгеслек һәм магистратура йүнәлештәре буйынса белем аласаҡ студенттар өсөн 1820 һәм 730 урын бүленгән. Был уҡыу йорто "иргеттәрҙең" уҡыу йорто булып ҡала: уҡырға инеүселәрҙең 70 % ашыуы - егеттәр.

✓Латвияла йәшәүсе башҡорттар Вентспилстың 725 йыллыҡ юбилейын байрам итеүҙә ҡатнашты. Башҡортостан исеменән байрам ҡунаҡтарын Башҡортостандың ЮНЕСКО эштәре буйынса комитетының Латвиялағы вәкиле Рина Хәмитова сәләмләне.

✓Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә 2016 йылға мәктәп календары нәшер ителде. Мәктәп календары - башҡорт телендәге энциклопедик характерҙағы үҙенсәлекле баҫма. Календарь уҡыу йылы дауамында уҡыусының тоғро юлдашы булыр тип ышана нәшерселәр.

✓Саҡмағош әлеге мәлдә Башҡортостанда иң юғары уңыш алыусы район тип иҫәпләнә. Республика Ауыл хужалығы министрлығы хәбәр итеүенсә, бында һәр гектарҙан 30,7 центнер уңыш алына. Шулай уҡ стәрлетамаҡтар ашлыҡ һуғып алыу буйынса алдынғылар рәтендә. Улар 34,03 мең тонна иген йыйып алған.

✓ Тикшереү һеҙмтәләре буйынса әйләнештән 1925 килограмм күләмендә 203 партия сифатһыҙ аҙыҡ-түлек продукты алынған. Уларҙың иң күп өлөшө емеш-еләккә, йәшелсәләргә, алкоголь эсемлектәренә тура килә.



...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ЕТЕМДӘРГӘ...

## ярҙам ит!

**Быйыл етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған, балалар йорттарында һәм ғаиләләрҙе алмаштырыусы ғаиләләрҙә тәрбиәләнгән 100 бала беренсе тапҡыр мәктәп тупһаһын аша атлаясаҡ. Был ғүмерлеккә хәтерҙә ҡала торған иҫтәлекле көн улар өсөн иң шатлыҡлы һәм тантаналы булһын, матур хис-тойғолар тыуҙырһын тигән маҡсаттан Өфө ҡала округы хакимиәтенең Опека һәм попечителлек буйынса идаралығы "Беренсе тапҡыр - беренсе синыфҡа. Етем балаларға ярҙам ит" тигән мәрхәмәтлек акцияһы уҙғара.**

Акция быйыл бишенсе тапҡыр ойошторола һәм ошо категорияға ҡараған беренсе синыфҡа барыусы балалар өсөн "мәктәп портфеле" туплауҙы күҙаллай. Уҙған йылдарҙа был социаль проектта айырым кешеләр ҙә, ойошмалар ҙа ҡатнашты һәм дөйөм көс менән мәктәпкә барыусы 400 етем балаға яңы формалар, портфелдәр алды һәм бүләктәр әҙерләнә. Был акцияла теләгән һәр кем ҡатнаша ала. Бының өсөн 15 августҡа тиклем махсус иҫәпкә аҡса күсереп, иҙге эшкә үҙегеҙҙең өлөшөгөҙҙө индерергә генә кәрәк. Өҫтәмә мәғлүмәтте(347) 241-42-25 телефоны буйынса ("Семья" үҙәге директоры урынбаҫарҙары Даниленко Ирина Александровна, Шахова Ольга Николаевна) алырға мөмкин.

Әйткәндәй, 1 июлдән 31 августҡа тиклем тотош республикала шулай уҡ "Мәктәпкә йыйынырға ярҙам ит" хәйриә акцияһы бара. "Мәктәп кәрәк-яраҡтарын республика ҡала һәм район халҡын социаль хеҙмәтләндереүсе комплексы үҙәктәрҙә эшмәкәрлек алып барған ғаиләгә һәм балаларға социаль ярҙам район-ара үҙәктәренә тапшырырға кәрәк", - тип аңлатма бирҙе Башҡортостандың Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының матбуғат секретары Роза Кузьменко.

Бындай үҙәктәр Балаҡатай, Тәтешле, Белорет, Дүртөйлө, Ишембай, Стәрлетамаҡ райондарында, шулай уҡ Октябрьский һәм Сибай ҡалаларында эшләй. Башҡа ҡалаларҙа һәм райондарҙа уларҙың филиалдары бар. Бөтөн адрестар Башҡортостандың Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының сайтында баҫылған. Канцелярия тауарҙары, дәфтәрҙәр, балалар ижады әйберҙәре яңы килеш ҡабул ителә. Портфелдәр, мәктәп формаһы, дәреслектәр, нәфис әҙәбиәт тотонолған булыуы ла мөмкин.

Былтыр дөйөм тырышлыҡ менән алты миллион һумдан ашыу суммаға мәктәп кәрәк-яраҡтары йыйылды. Ул ваҡытта Башҡортостан балаларына ғына түгел, Ҡырым Республикаһының Белогорск районы уҡыусыларына ла ярҙам күрһәтелде. Ошо көндәрҙә Башҡортостандың Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы ойошторған Донецк халыҡ республикаһы һәм Луганск халыҡ республикаһы балалары өсөн мәктәп кәрәк-яраҡтары йыйыу акцияһы тамамланды. Ике аҙна элек республикала йәшәүселәр халыҡты социаль хеҙмәтләндереүсе комплексы үҙәктәргә алты мең самаһы мәктәп кәрәк-яраҡтары тапшырҙы.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!



**Әлеге ваҡытта баш ҡаланың ҡулланыусылар баҙарында урындағы етештереүселәр килтергән, башҡа төбәктәрҙән һәм сит илдәрҙән индерелгән продукция тулып ята. Күпселек предприятиелар уларҙы ғәмәлдәге норматив-методик документтар талаптарына тап килтереп һата. Был хаҡта муниципалитеттағы сираттағы кәңәшмәлә Башҡортостан Республикаһы буйынса Роспотребнадзор идаралығы етәксеһе урынбаҫары Галина Пермина белдерҙе.**

# ТИКШЕРЕҮҘӘР ҠАТЫ

Аҙыҡ-түлек продукцияһы ҡәтғи тикшереү үтә. Йылдың алты айында идаралыҡ 3904 аҙыҡ-түлек сеймалын һәм продуктын, шуларҙың 2804-е - микробиологик күрһәткестәргә (14 импорт продукцияһына), 1100-ө - санитар-химик күрһәткестәргә (16 импорт продукцияһына) тикшергән. Улар араһында йәшелсә-емеш продукцияһы гигиена нормаларына, кулинар изделиелары, бигерәк тә традицион булмаған технология буйынса әҙерләнеүсе суши, роллдар - микробиологик нормаларға тап килмәгән. Аҙыҡ-түлек сеймалын һәм продукттарын лаборатор тикшереү һөҙөмтәләрен анализлау уларҙың сифаты етештереүсенән һатып алыусыға килеп еткәнсе юлда йәки һаҡлау процесында, бигерәк тә температура режимы боҙолғанда насарайыуын күрһәтә.

Шулай уҡ тикшереү һөҙөмтәләре буйынса әйләнештән 1925 килограмм күләмендә 203 партия сифатһыҙ аҙыҡ-түлек продукты алынған. Уларҙың иң күп өлөшө емеш-еләккә (821,14 кг), шул иҫәптән йәшелсәләргә (549,57 кг), алкоголь эсемлектәренә, шул иҫәптән һыраға (517,3 литр) тура килә. Аҙыҡ-түлек продукттарын бракка сығарыуға микробиологик һәм санитар-химик тикшереү һөҙөмтәләренең ҡәнәғәтләнерлек булмауы, ҡулланыусы өсөн тулы мәғлүмәт бирелмәүе, ҡулланыу ваҡыты үтеүе сәбәп була. Халыҡ тарафынан еткерелгән ялыуҙарҙы тикшереү һөҙөмтәләре буйынса административ яза биреү сараһы ҡулланыла.

Ярты йылда 2 миллион 532 мең һумлыҡ 467 штраф һалынған. 53 административ эш судҡа ебәрелгән, 10 материал буйынса судтар объекттарҙың эшмәкәрлеген туҡтатыу тураһында ҡарар ҡабул иткән.

Галина Пермина белдереүенсә, бигерәк тә етештереү технологияларына иғтибар бирергә, ҡәтғи етештереү контроле үткәрергә кәрәк. Автомашиналар һәм һыуытыу ҡорамалдары менән йыһазландырылған складтар булыуы ла ҙур әһәмиәткә эйә. Һатыуға сығарылған тауарҙарҙың сифатын яҡшыртыу өсөн Роспотребнадзор Сауҙа һәм хеҙмәттәрҙе координациялау, Мәғариф идаралыҡтары менән хеҙмәттәшлек итә һәм мәғариф ойошмаларын йылы аш менән тәьмин итеүсе предприятиелар, шәхси эшҡыуарҙар өсөн семинар-кәңәшмәләр, бәләкәй һәм урта бизнес вәкилдәренә ҡулланыусылар хоҡуҡын яҡлау өлкәһендә ҡануниәтте аңлатыу буйынса осрашыуҙар уҙғара.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ПАРК ЯҢЫРТЫЛА



**Башҡортостанда Урмансылар паркын төҙөкләндереүгә 55 миллион һум аҡса бүленде. Өфө биләмәһендә урынлашҡан парк зонаһын яңыртыу өсөн аҡсаны "Транснефть" акционерҙар компанияһы" асыҡ акционерҙар йәмғиәте бүлде, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Социаль маҡсатлы программалар фондынан.**

2013 йылда Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов һәм республика Хөкүмәте ярҙамында Социаль маҡсатлы программалар фонды "КИБА-проект" проектлаусылар төркөмө менән берлектә урман паркы биләмәһен реконструкциялау һәм төҙөкләндереү буйынса саралар проекты әҙерләнде. Бөгөнгө көнгә паркта 5,5 саҡрымдан ашыу асфальт юл һалынған, парковкалар булдырылған, футбол, мини-футбол, волейбол, баскетбол, бадминтон өсөн майҙансыҡтар әҙерләнгән. Балалар ҡаласығы төҙөлгән, ял итеү өсөн эскәмйәләр, яҡтыртҡыстар һәм видеокүҙәтеү ҡоролмалары ҡуйылған, йыл әйләнәһенә эшләүсе бәҙрәфтәр урынлаштырылған.

Урман паркын реконструкциялау былтыр яҙ башланғайны. Төбәк Башлығы Рөстәм Хәмитов фекеренсә, баш ҡаланың иң ҙур йәшел скверын тәртипкә килтереү мотлаҡ. Республика етәксеһе урман паркын төҙөкләндереү өмәләрендә лә ҡатнашты. Парк былтыр сентябрҙә асылды. Әле уны төҙөкләндереү эштәре дауам итә һәм 2016 йылға тамамланырға тейеш. Өфө урман техникумының уҡытыу-урман хужалығы мөдире Альберт Закиров әйтеүенсә, парк биләмәһендә башҡа үҙгәрештәр көтөлмәй, төп бурыс - уны таҙа тотоу. Яҡын арала Сәғит Агиш урамы яғынан парковкаға асфальт һалыу планлаштырыла.

# АСЫҠ МАРАФОН



**27 сентябрҙә Өфөлә һуңғы ете йыл эсендә беренсе тапҡыр 42,2 километрға Асыҡ ҡала марафоны үтәсәк. Бынан тыш, балалар өсөн 4,2 километр араға ярыш ойоштороласаҡ.**

Ойоштороусыларҙың береһе Владислав Литвинчук белдереүенсә, марафондың төп маҡсаты - икенсе йылға быйыл ҡатнашыусы һәр кеше үҙенең 10 дуҫын алып килһен өсөн спорт һәм мәҙәни сара үткәреү. Ярыш ҡаланың үҙәк өлөшөндә үтәсәк, старт Конгресс-холл алдынан биреләсәк. Маршруттың бер нисә өлөшөндә ярышыусыларҙы ди-джейҙар музыкаль программа менән дәртләндерәсәк.

Ярыштың дөйөм приз фонды 500 мең һум. Үҙ категорияһында еңеүселәр аҡсалата бүләкләнәсәк. Бынан тыш, һәр ҡатнашыусыға футболкалар, махсус дизайн менән эшләнгән миҙалдар биреләсәк. Ярышта ҡатнашыу түләүле. Старт номеры Өфө Асыҡ марафоны сайтында теркәлеү үткәндән һуң бирелә буласаҡ.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Чебоксарҙа еңел атлетика буйынса Рәсәй чемпионаты бара. 5 мең метр араға йүгереүҙә Башҡортостандан Гөлшат Фазлетдинова көмөш миҙал яуланы. Был турнир - 22-30 августа Пекинда үтәсәк донъя чемпионатына һайлап алыу туры. Фазлетдинованың донъя чемпионатына нормативы бар.

✓Өфөнөң Октябрь проспектында велосипед һыҙаты ремонтланасаҡ. Ҡала мәҙәниәт һарайынан алып Дежнев юл үткәргесенә тиклем биләмә төҙөкләндереләсәк. Проекттың заказсыһы - баш ҡала хакимиәтенең коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы. Велосипед һыҙатын реконструкциялау иҫке япманы алып, яңыһын һалыуҙы, бордюр ҡуйыуҙы, шулай уҡ билдә һалыуҙы күҙ уңында тота. Биләмәне йәшелләндереү һәм ер эштәре башҡарыласаҡ. Эштәрҙе ағымдағы йылдың ноябренә тамамлау планлаштырыла.

✓Ауырғазы районында суд эскән килеш транспорт менән идара итеүҙә ғәйепләнеүсе 69 йәшлек водителгә ҡарата асылған енәйәт эшен ҡараясаҡ. Былтыр март айында ул руль артына иҫерек көйөнсә ултырған өсөн таныҡлығынан мәхрүм ителә. Ағымдағы йылдың июлендә ул ошо хәлдә ҡабатлап эләгә. 2015 йылдың 1 июленән шундай уҡ хоҡуҡ боҙоу өсөн таныҡлыҡ тартып алынған килеш иҫерек көйөнсә автомобиль йөрөтөү ауыр енәйәт тип һанала. Бындай осраҡта ике йылға тиклем иректән мәхрүм итеү ҡаралған.

✓Республикала Әҙәбиәт йылына бағышланған "Әҙәби нағыш" марафоны дауам итә. 11 августа марафонда ҡатнашыусыларҙы Учалыла, 12-дә - Белорет, 18-дә - Әбйәлил, 22-дә - Бөрйән, 25-дә - Салауат, 29-да Ҡыйғы райондарында көтәләр. Был көндәрҙә йәш авторҙарҙың ҡулъяҙмалары тикшереләсәк, башҡорт яҙыусыларының китаптарынан күргәҙмә һәм матбуғатҡа яҙылыу ойоштороласаҡ.

✓Ырымбур өлкәһе Александровка районының Ҡаяпкол ауылында башҡорт мәҙәниәте байрамы үткәрелде. Байрамда өлкәнең Александровка, Красногвардейский, Новосергиевка, Переволоцк һәм Төйләгән районларының ижади коллективтары, Башҡортостандан Көйөргәҙе районының ижади делегацияһы, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзалары ҡатнашты. Сараны ойоштороусылар - Ырымбур өлкәһе Хөкүмәте һәм Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы булышлығында Александровка районы хакимиәте, "Карауанһарай" Ырымбур өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы.

✓ **_Рәсәй Торлаҡ кодексының 155-се статьяһына ярашлы, капиталь ремонтҡа түләүҙәрҙе тотҡарлаған йәки тулыһынса түләмәгән күп фатирлы йорттағы милекселәр капиталь ремонт фондына пеня түләргә тейеш._**



*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*



# ЯҢЫ ЮЛДАРҒА ШАТЛАНАБЫҘ ҘА УЛ...

**Белорет районында Стәрлетамаҡ - Белорет - Магнитогорск автомобиль юлы участкаһының икенсе сиратын төҙөү башланды, уны төҙөү тамамланғас, Белорет - Магнитогорск, Белорет - Учалы һәм Белорет - Өфө автомобиль юлдарын тоташтырыусы урау юл тулыһынса файҙаланыуға тапшырыласаҡ.**

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, Стәрлетамаҡ - Белорет - Магнитогорск автомобиль юлының урау участкаһы 2006 йылда төҙөлә башлағайны. Ошо осорҙа Ағиҙел йылғаһы аша 190 метрлыҡ күпер һалынды, Пугачев карьеры янындағы тимер юлы аша 59,2 метр оҙонлоғондағы юл үткәргес файҙаланыуға тапшырылды. Урау юлдың беренсе сираты 2011 йылдың октябрендә асылды. Бөтәһе 11,2 саҡрым юл сафҡа индерелде. Автомобиль юлының икенсе участкаһы төҙөлгән өлөштә Ҡаҙыш ауылы эргәһендәге Белорет - Өфө трассаһы менән тоташтыраcаҡ. Һөҙөмтәлә урау юлдың оҙонлоғо 21,2 километр тәшкил итәсәк. Бынан тыш, проектта Белорет - Учалы - Миәс автомобиль юлына һәм Ломовка ауылына инеү юлын төҙөү ҡаралған.

Башҡарылған эштәрҙең сифатын Белорет юл ремонт-төҙөлөш идаралығының асфальт-бетон заводы ҡарамағындағы һәм Өфө "Башкиравтодор" асыҡ акционерҙар йәмғиәте лабораториялары тикшерә.

Юлдарҙы төҙөкләндереү барышында йөҙҙән ашыу юл билдәләре, 3,5 мең метр барьер-ҡоймалар һәм Боғанаҡ ауылы халҡы өсөн автобус павильоны ҡуйыласаҡ. Эштәрҙе тамамлау ваҡыты - 2015 йылдың 24 октябре. Төҙөлөш эштәрен тамамлау өсөн республика бюджетынан 400 миллион һумдан ашыу аҡса бүленгән. Стәрлетамаҡ - Белорет - Магнитогорск автомобиль юлының урау участкаһын файҙаланыуға тапшырыу Белорет ҡалаһы урамдарына транзит транспортын кәметергә мөмкинлек бирәсәк. Был экологик хәлде яҡшыртасаҡ, юл-транспорт хәрәкәте хәүефһеҙлеге кимәлен күпкә арттырасаҡ. Бынан тыш, Белорет - Учалы - Миәс, Стәрлетамаҡ - Белорет - Магнитогорск юлдары буйлап йөрөгән транзит транспорты өсөн ара ҡыҫҡара, шуға ярашлы Белорет районында, республикала тораҡ пункттар араһында транспорт бәйләнеше яҡшырасаҡ, тип хәбәр итәләр Белорет районы хакимиәтенең мәғлүмәт-аналитика бүлегенән.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

Тиҙҙән РФ Транспорт министрлығы һәр субъекттың, шул иҫәптән Башҡортостан юлдарындағы етешһеҙлектәрҙе аныҡ ваҡытта күрһәтеп тороусы карта эшләйәсәк. Юлдарҙы һалыуға һәм уларҙы ремонтлауға күп миллиардлы бюджет аҡсалары тотонолоуға һәм йылдан-йыл юл төҙөлөшө өсөн яуаплы кешеләргә контроль көсәйеүгә ҡарамаҫтан, проблемалар һаман да бар. РФ Дәүләт Думаһының Транспорт буйынса комитеты ағзаһы Александр Васильев ("Берҙәм Рәсәй") төбәк власттарының бюджет средстволарын тотоноуҙы тейешле кимәлдә күҙәтмәүҙәрен белдерә һәм уларға аҡланыу эҙләмәскә, ә эштәрҙе ваҡытында сифатлы башҡарырға, дәүләт закупкаларында тәртип булдырырға тәҡдим итә.

Насар юлдар ҡалаларҙың йөҙөн боҙоп, автотранспорт сараларын ремонтлауға күп сығымдар тотонорға мәжбүр булған автомобиль хужаларына зыян килтереп кенә ҡалмай, бик йыш юл-транспорт ваҡиғаларына сәбәп була. Рәсәй Дәүләт автоинспекцияһының юл һәләкәттәре статистикаһына ярашлы, былтыр юлдарҙың насар торошо һөҙөмтәһендә 51,5 мең ваҡиға булған. Илдең барлыҡ төбәктәрендә лә интерактив карта булдырыу гәйепләләрҙе яуаплылыҡҡа тарттырыуҙы аныҡлаҡ башҡарырға ярҙам итәсәк. 2012 йылда Google эҙләү системаһы автоматик режимда юлдарҙың сифаты тураһында мәғлүмәт йыйыусы һәм уларҙы картала "насар", "уртаса", "яҡшы" тип күрһәтеүсе мобиль ҡушымта эшләгәйне. Бөгөнгә уның буйынса барлыҡ Рәсәй юлдарының ни бары 10-дан кәмерәк өлөшө генә баһаланған.

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# СУДҠА БИРМӘКСЕЛӘР

**Башҡортостанда капиталь ремонт өсөн бурыслыларҙы судҡа повестка көтә. Был хаҡта "Республиканың төбәк операторы" фондының генераль директоры Борис Герасимов "Башинформ" агентлығында үткән матбуғат конференцияһында белдерҙе.**

"Капиталь ремонт өсөн бурыстарҙы түләтеү торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн кеүек үк башҡарыласаҡ. Әлбиттә, түләмәүселәрҙе судҡа бирәсәкбеҙ. Был йәһәттән һөҙөмтәләр бар. Бөгөнгә көндә шәхси резервтар иҫәбенә туғыҙ дәғүә ебәрҙек. Ошо көндәрҙә улар буйынса ҡарар ҡабул ителәсәк. Суд приставтары суд ҡарарҙарын үтәйәсәк", - тип билдәләне Борис Герасимов.

Рәсәй Торлаҡ кодексының 155-се статьяһына ярашлы, капиталь ремонтҡа түләүҙәрҙе тотҡарлаған йәки тулыһынса түләмәгән күп фатирлы йорттағы милекселәр капиталь ремонт фондына пеня түләргә тейеш. 1 августан "Башҡортостандың төбәк операторы" был эште ғәмәлгә ашыра башланы. Пеня түбәндәгеcә иҫәпләнә: капиталь ремонт өсөн бурыс рефинанслау ставкаһының 0,003 өлөшөнә һәм түләүҙәр кисектерелгән көндәрҙең һанына ҡабатлана. Түләү ваҡыты билдәләнгәндән һуң икенсе көндән түләүҙәр кисектерелгән көндәргә һанау башлана. Рәсәй банкының 2012 йылдың 13 сентябрендәге 2873-сө күрһәтмәһенә ярашлы, рефинанслау ставкаһының күләме йылына 8,25 процент тәшкил итә.

"Милекселәр 10 августҡаса бурыстарын түләү хоҡуғына эйә. Шул көндән һуң бурыстар өсөн пеня һалына башлай. Улар дөйөм фондҡа индереләсәк һәм республиканың күп фатирлы йорттарын ремонтлауға йүнәлтеләсәк", - тип йомғаҡ яһаны фондтың генераль директоры

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, "Башҡортостандың төбәк операторы" фондының попечителдәр советы милекселәр һәм бина майҙандары тураһында мәғлүмәтте аныҡлауға бәйле 2015 йылдың 31 июленә тиклем капиталь ремонтҡа түләүҙәрҙе тотҡарлаған өсөн пеня һалмаҫҡа тигән ҡарар ҡабул иткәйне.

*ҺОРАУ - ЯУАП*



## ФАТИРҒА ТЕРКӘҮ ТӘРТИБЕ НИСЕК?

**5 йыл элек өләсәйем менән аҡсабыҙҙы ҡушып, фатир һатып алдыҡ. Икебеҙҙең милкебеҙҙә булған фатирҙа өләсәйем йәшәй, ә мин - икенсе ҡалала. Яңыраҡ өләсәйемдең фатирға апайымды ҡыҙы менән даими теркәүгә ҡуйыуын белдем. Шул уҡ ваҡытта апайымдың үҙенең ике фатиры бар. Уларҙы теркәүгә ҡуйыу өсөн өләсәйем минең ризалыҡты алырға тейеш инеме һәм мин апайымдарҙы теркәүҙән нисек төшөрә алам?**

- Фатирға теркәгәндә бөтөн милекселәрҙең дә ризалығын алыу-алмау тураһында законда аныҡ ҡына билдәләнмәгән. Шулай ҙа әлеге ситуациялағы кеүек бәхәс килеп тыуғанда, суд күпселек осраҡта ризалыҡтың булыуы мөһим, тигән фекерҙә яҡлай. Әгәр ҙә туғандарығыҙҙы теркәүҙән төшөүҙәрен һорап мөрәжәғәт итеүегеҙ ыңғай һөҙөмтә килтермәһә, быны суд ҡарарына ярашлы эшләргә мөмкин. Тик шуны оноторға ярамай - бындай эштәрҙең судҡа мөрәжәғәт итеү срогы бар. Ул 3 йыл. Был хоҡуҡ боҙолоу осрағын белгән ваҡыттан алып һанала. Әгәр ҙә судта яуап биреүселәр (ответчик) ошо ваҡыттың уҙып китеүенә баҫым яһаһа, үҙегеҙҙең был хаҡта күптән түгел генә белеүегеҙҙе иҫбатларға тура киләсәк. Шуныһы ла бар - фатирҙа теркәлһәләр ҙә туғандарығыҙ уны һатыу, бүләк итеү йәки мираҫҡа ҡалдырыу хоҡуғына эйә түгел. Бындай хоҡуҡ тик һеҙҙә һәм өләсәйегеҙҙә генә бар.

## БИЗНЕСТАН ӨЛӨШ СЫҒАМЫ?

**Ирем менән рәсми айырылышмаһаҡ та, бергә йәшәмәйбеҙ. Беҙҙең уртаҡ бизнесыбыҙ бар, ул иремдең исемендә. Рәсми айырылышҡанда бизнесты ла бүлеп алыуға дәғүә итә аламмы? Иремә килгәндә, ул бизнесты бүлеп биреүгә ҡырҡа ҡаршы.**

- Һеҙҙең осраҡта судҡа ике дәғүә (иск) бирергә кәрәк. Береһе - никахты тарҡатыу, икенсеһе - милекте бүлеү тураһында. Икенсе дәғүәгеҙҙә буленергә тейешле бар милекте, шул иҫәптән эшҡыуарлыҡты һәм банктағы вкладтарҙы ла күрһәтеп, һанап сығыу ҡамасаулamaҫ. Был мәсьәләне тиҙерәк хәл итеү яғын ҡарарға кәрәк, сөнки ирегеҙ бәхәсле бизнесты, үҙенең исемендә булыуынан файҙаланып, һатырға һәм аҡсаны үҙенә генә ҡалдырыуы ихтимал. Был осраҡта эшҡыуарлыҡтан һеҙгә лә өлөш тейергә тейешлеген иҫбат итеп, суд тупһаһын күпкә оҙағыраҡ тапарға тура киләсәк.

## АТАЛЫҠ ХОҠУҒЫНАН БАШ ТАРТЫП БУЛАМЫ?

**Улым балиғ булмаған ҡыҙынан баш тартырға уйлай. Ул быны нисек эшләй ала?**

- Рәсәй ҡануниәтендә ата-әсәлек хоҡуғынан үҙ теләгең менән баш тартыу ҡаралмаған. Ата-әсәлек бурыстарын үтәмәгән, йәғни балаларына тейешле тәрбиә бирмәгән, иҫерткес эсемлектәр ҡулланған, наркотиктар менән мауыҡҡан, балалары менән ауыҙы мәнәсәбәттә булған һәм башҡа ошондай әхләҡһыҙ ҡыланыштар күрһәткәндәрҙе ата-әсә хоҡуғынан мәхрүм итеү ҡаралған. Әгәр ҙә улығыҙ ҡыҙын тәрбиәләүҙә ҡатнашмаһа, уны матди йәһәттән тәъмин итмәһә, баланың әсәһе судҡа мөрәжәғәт итеп, уны был хоҡуҡтан мәхрүм итә ала.

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Ангина

❖ 1 балғалаҡ балға 1 балғалаҡ прополистың спирттағы төнәтмәһен ҡушып, йөҡлар алдынан ҙур булмаған порцияларға бүлеп, ашарға. Ауыҙға алғас, бер аҙ тоторға кәрәк. 10 көн шулай дауалангас, 1 аҙна ял итәһең дә, тағы 10 көн дауаланаһың.

❖ Яңы ғына һығылған лимон һутына 1 ҡалаҡ бал өҫтәп, 10 минут ауыҙҙа тотҡас, йоторға. Тулыһынса һауыҡҡансы дауаланырға.

❖ Яран гөлө майының составындаға фитонцидтар таныу тонғанда, йүткергәндә яҡшы ярҙам итә. Бының өсөн эфир майын еҫкәргә кәрәк. Үҫеп ултырған яран гөләнөң япраҡтарын өҙөп алып, ҡул менән иҙеп еҫкәһәң дә була.

❖ Эре тоҙҙо онға әйләнгәнсе онтап, шуның саңы менән тын алһаң да ярҙам итә.

❖ 3 балғалаҡ һуған ҡабығына ярты литр һыу ҡойоп, 3 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 5-6 тапҡыр тамаҡты сайҡатырға.

❖ Теш таҙартҡандан һуң ауыҙҙы бер тапҡыр сайҡатҡас, икенсе тапҡыр ауыҙ ҡыуышлығына һыу алып, тамаҡты сайҡарға кәрәк. Пастаның составындағы бактерияларға ҡаршы матдәләр тамаҡты ла дауалай.

❖ Бер семтем картуф сәскәһенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ул бүлмә температураһына тиклем һыуынгас, тамаҡты сайҡатырға. Тәжрибә күрһәтеүенсә, бер тапҡыр эшләгәндән һуң ангина юҡҡа сыға.

❖ 3 бөртөк боросто пластырға йәбештереп, баш бармаҡтың эске яғына - бөгөлгән урынынға йәбештерергә. Бер тәүлектән һуң ангина үтә.

❖ Ангина, ларингит, тонзиллит, фарингит мәлендә урта ҙурлыҡтағы сөгөлдөрҙө йомшарғансы бешереп, ошо һыуҙы һөҙөп, тамаҡты сайҡатыу өсөн ҡулланырға.

## Аденоидтар

❖ Әгәр ҙә баланың йод препараттарына аллергияһы юҡ икән, 1 өлөш "Йодинол"ға 1 өлөш шайтан таяғы майы өҫтәп, бер ай буйына төнгөлөккә танауға тамыҙырға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

*✓ Үҫер өсөн төп шарт - туған тел, сөнки әсә ҡарынында ҡан аша бар булған булмыш артабан әсә теле аша үҫеш ала.Ә туған телендә үҫеш ала алмай икән, баланың быуындан-быуынға күсә килгән һәләте тәрән йоҡоға тала.*



*ЙОЛАЛАРЫБЫҘ*



# ТОРНА КУЛЬТЫ

**Боронғо башҡорттарҙың торнаға табыныуы тураһындағы тәүге мәғлүмәттәр X быуатҡа ҡарай. 922 йылда Иҙел буйы Болғары иленең башлығы менән осрашырға китеп барған Бағдад хәлифе әл-Мөҡтәдир көньяҡ башҡорттары ерҙәрен үтә. Илселектең сәркәтибе Ибн Фаҙландың юл сәхифәләрендә шулай тиелә: "Уларҙың бер төркөмө торналарға табына".**

Сәйәхәтсе был феноменды аңлатыусы легенданы ла яҙып ала. Борондан башҡорттар бер көслө ырыу менән һуғыш алып барған. Шундай бер алыш мәлендә улар еңелә башлаған. Ошо ваҡытта дошмандарҙың артында торналар тауышы ишетелгән. Ҡоштарҙың тауышы уларҙы шул тиклем ҡурҡыта һәм артабан алыша алмай, дошман яуы еңелә. Шуға ла башҡорттар: "Торналар - беҙҙең раббылар, улар дошмандарыбыҙҙы тар-мар итте", - тиҙәр.

Боронғо башҡорттарҙың торналарҙы изгеләштереүен фольклористика һәм этнография мәғлүмәттәре лә раҫлай. Республиканың Үҙәк дәүләт тарих архивында табылған 1844 йылға ҡараған бер документта әйтелеүенсә, ҡайһы бер башҡорттар "Аллаға ышанмай һәм үҙенең бәйғәмбәрен белмәй, улар торнаға табына".

Бөрйән районында киң билдәле бер мифта ҡасандыр торна ҡош батшалығының төп ҡошо булыуы тураһында һөйләнелә. Торнаны йыл батшаһы тип тә әйтәләр. Ышаныуҙар буйынса, тап торна йылдың ниндәй булыуын билдәләй. Торна килгәс тә яҙ башлана, тиҙәр, шуға ҡарап яңы йылдың үҙенсәлектәре фаразлана. Ҡурған өлкәһенең Сафакүл районы һәм Ырымбур өлкәһе Красногвардейский районында йәшәгән башҡорттар уны үҙҙәренең изге ҡошо, тип йөрөтә. Торна - ожмахтан сыҡҡан ҡош, ти улар. Торна үҫәргәндәрҙең, бөрйәндәрҙең, ҡара-табындарҙың, ҡаңлыларҙың, ғәйнәләрҙең ырыу ҡошо.

Р. Кузеев иҫәпләүенсә, Ағиҙелдең түбәнге ағымындағы һәм төньяҡ башҡорттарының торнаны изгеләштереүе XIII - XIV быуаттарҙа Көнбайыш Башҡортостанда ҡаңлы һәм ғәйнәләрҙең боронғо башҡорт ырыуҙары төркөмдәре (бөрйән, үҫәргән) менән аралашыуы һөҙөмтәһендә тыуған булырға тейеш. Шул уҡ авторҙың материалдары буйынса, Иҙел-Урал өлкәһенә торна культын массагеттарҙың вариҫтары булған үҫәргәндәр алып килә.

Шул уҡ ваҡытта торналарға табыныу даирәһе үҙ эсенә күпкә ҙурыраҡ зонаны ала. Ф. Нәҙершина торналар тураһындағы мифтарҙы Кесе Азия, Ҡара диңгеҙ буйы, Кавказ, Һиндостан, Ҡытай халыҡтарында тапҡан. Корея, Япония, Океания, Австралия (Яңы Гвинеяла), Төньяҡ Африкала, Төньяҡ-Көнбайыш Европала, Төньяҡ, Үҙәк һәм Көньяҡ Америка халыҡтарында ла уның эҙҙәре һаҡлана. Халыҡ ижадында торна образы өҫкө донъя менән бәйле.

Башҡорттарҙың космогоник мифтарында Ҡош юлы көҙөн торналарҙың көньяҡҡа осоп киткән юлы булараҡ ҡабул ителә. Легенда буйынса, өлкән ҡоштар бала ҡоштар туптан айырылмаһын өсөн үҙенең ҡауырһынын сәсеп бара. Был ҡауырһындар шунда уҡ йондоҙҙарға әүерелә. Торна балалары был йондоҙло юл буйлап оса, һуңғараҡ уны "Ҡош юлы" тип атай башлайҙар. Фольклор өлгөләрендә тағы ла бер вариант һаҡланған: Ҡош юлы - ул һауала мәңге осоп йөрөгән торналар.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*АҠЫЛЛЫҒА - ИШАРА*

# ОЯҺЫНДА НИ КҮРҺӘ...



**"Бөгөнгө балалар шул тиклем ҡаты күңелле. Ҡайһы берәүҙәрендә кешене ҡыҙғаныу, йәлләү һымаҡ тойғо бөтөнләй юҡ. Береһе яңылыш төртөлһә йәки тейеп үтһә, һуғып, туҡмап, иҙгеләп ташларға әҙер генә торалар. Элегерәк тәнәфес ваҡытында педагогтарға бер аҙ тын алып, уҡытыусылар бүлмәһендә ял итеп алыу мөмкинлеге бар ине. Ә хәҙер балаларҙың үҙҙәрен генә класта ҡалдырыу бик ҡурҡыныс. Тәнәфес ваҡытында уларҙан күҙ яҙҙырмай, ҡарап ҡына ултырырға кәрәк. Саҡ ҡына иғтибар итмәһәң, бер-береһенең өҫтөнә менеп баралар. Ҡыҙҙарҙың да ҡулдары уйнап ҡына тора. Бер-береһенең маңлайҙарын ярып, күҙҙәрен күгәртеп ҡуймаҫтар тимә, әйтәгүр. Береһе әләгеп йығылһа, тартып торғоҙоу, ярҙам итеү ҡайҙа, киреһенсә, был хәлдән ҡыҙыҡ табып көләләр. Берәйһенең теше шешеп йәки берәй ере бинт менән бәйләнеп килһә, йәлләү, ҡыҙғаныу урынына, үсекләй-ирештерәләр, үпкәләтеп ҡуйыуҙан да ҡурҡыу юҡ, класташына ни тиклем ҡыйын, ауыр йәки уңайһыҙ булһа, уларға шул тиклем рәхәтерәк, ләззәтлерәк. Балаларҙың бер-береһенә теләктәшлек күрһәтә, ҡайғыһын уртаҡлаша белмәүенә ғәжәп итәм бөгөн. Ҡайҙан киләләр уларҙа был ҡаты күңеллелек?" - тип йәне әрнеп һөйләп торҙо бер көндө таныш уҡытыусым.**

Эйе, һуңғы ваҡытта балаларҙың, үҫмерҙәрҙең ҡанһыҙлығы, ҡаты күңеллелеге тураһында йыш ишетәбеҙ, күрәбеҙ. Киң мәғлүмәт сараларында ла был тема даими күтәрелә, шулай уҡ ҡыҙҙарҙың, йыйылып, әхирәттәрен туҡмауын, үҫмерҙәрҙең класташын кәмһетеүен, берәҙәк бесәй йәки эттәрҙе яҙалап үлтереүен телефонға төшөрөп, интернет селтәрҙәренә лә йыш һалалар. Уҡыусының мәктәп ҡарауылсыһын үлтереүе, үҫмерҙең кесе йәштәге ҡыҙ баланы көсләүе, шулай уҡ ярҙамға мохтаж, көсһөҙ, кеше көнлө оло йәштәгеләрҙе мыҫҡыллау, мәсхәрәләү ваҡиғаларын ишетеп, ысынлап та, сәстәр үрә торорлоҡ.

"Ҡайҙан килә һуң балаларға шул тиклем ҡанһыҙлыҡ?" тигән һорау тыуа иң беренсе. Күптәребеҙ, билдәле инде, телевидение, компьютер уйындары ғәйепле, тиер. Һуңғы ваҡытта тормошобоҙҙағы бөтә кире күренештәрҙә, бәләләрҙә интернетты ғәйепләргә ғәҙәтләнеп алдыҡ бит инде. Тик интернет ҡына ғәйеплеме икән бында? Минеңсә, күп нәмә ғаилә тәрбиәһенән килә. Татыу, ярҙамсыл, берҙәм ғаиләлә үҫкән баланың күңеле барыбер ҙә күберәк изге эштәргә тартылалыр. Үҙ мәнфәғәттәрен генә ҡайғыртҡан, сабыйы күңеленә төкөрөп ҡараған ҡаты күңелле атай-әсәйҙең балаһы ла ҡанһыҙ, мәрхәмәтһеҙ булып үҫәлер. Маньяк-үлтереүселәрҙең тормошон өйрәнгән белгес-ғалимдар ҙа шуны раҫлай бит: уларҙың бөтәһе лә тиерлек бала саҡта үҙ ғаиләһендә көсләүгә, ҡаты мөнәсәбәткә, кәмһетелеүгә дусар булған кешеләр.

Яңыраҡ супермаркетта шаһит булған ваҡиғаны миҫалға килтермәксемен. Касса янында дүрт йәштәр тирәһендәге ҡыҙ бала әсәһенә генә ишетерлек итеп нимәлер һатып алыуын үтенә. Йәш әсәй тәүҙә ишетмәмешкә һалышты, иғтибар итмәне, икенсе-өсөнсө тапҡыр үтенгәс, бөтәһе лә ишетерлек итеп һөрән һалды:

- Етәме һиңә, юҡмы? Һин нәмә, мин аҡса баҫып ултыра тип уйлайһыңмы? Өйгә генә ҡайтайыҡ, күрһәтермен әле һиңә! Тетмәкәйеңде тетермен! Иманыңды уҡытырмын!

Әсәһе теләгән әйберен алмағанғамы, әллә уның кеше алдында әрләүенә ғәрләндеме, ҡыҙсыҡ илай башланы. Сабырһыҙ әсәй сит кешеләр бар тип тә торманы, ҡыҙының ҡулынан тартып һелкетеп, елкәһенә сәпәп алды. Иманыңды ҡайтҡас уҡытырмын, тиһә лә, түҙмәне, магазиндан сыҡҡансы бер нисә тапҡыр төрткөләп өлгөрҙө. Шулай әсәле-ҡыҙлы ҡысҡырыша-илаша сығып киттеләр. Урамға сыҡҡас та тынысланманылар әле. Бында инде ҡыҙы яр һалды:

- Үҫкәс, үҙеңдең сәсеңдән һөйрәп йөрөтәсәкмен, өнөңдө тығасаҡмын, сәсең менән иҙән һеперәсәкмен!.. - ярһыған ҡыҙҙы әсәһе туҡтата, тынысландыра алмай, ҡосаҡларға, битенән үбергә маташа, асыуланып та ҡарай.

Уларҙың ҡысҡырышҡан тауышы, үҙҙәре күренмәһә лә, ҡолаҡта оҙаҡ сыңлап торғандай булды. Әгәр ҙә бындай хәл йыш ҡабатланһа, киләсәктә был ҡыҙ әсәһен сәсе менән иҙән йыуҙыртмаҫ тимә, билләһи. Ҡаты бәғерле балаларҙы бына шундай ата-әсәләр үҫтерә инде. Ояһында ни күрһә, осҡанында шул булыр, тигән әйтем бар халҡыбыҙҙа. Бик тапҡыр әйтелгән.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Аҡсаһы самалы булғас, ниңә балаһын магазинға алып инде икән һуң был әсә? 3-6 йәштәрҙә бала нимә күрә, шуға ҡыҙығыусан була бит инде ул. Унан һуң,магазиндар ҙа хәҙер оҫтарып алды бит: касса янындағы иң күренеп торған урынды балаларҙы ҡыҙыҡтырырлыҡ ваҡ-төйәк менән тултыралар. Уйынсығы ла, һағыҙы ла, кәнфит-һурғыстары ла - бөтәһе лә бар. Шуны белгән атай-әсәйҙәр кескәй балалары менән магазиндарға бөтөнләй йөрөмәҫкә тырыша. Дөрөҫ эшләйҙәрҙер, моғайын...**

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

*АСЫЛЫБЫҘ*

# ТУҒАН ТЕЛЕҢДӘ ҺӨЙЛӘШ!




**Уҡытыусылар менән йыш осрашам. Байтаҡ һорауҙарға яуап бирергә тырышам. Үҙ фекерҙәремде дөрөҫләр йәки нигеҙләр өсөн ғалимдарҙың хеҙмәттәрен аҡтарам. Шундай һорауҙарҙың береһен рус мәктәптәрендә, дәүләт теле булараҡ, башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытҡан уҡытыусы бирҙе: "Ни өсөн ғаиләһендә башҡортса һөйләшмәгән башҡорт балаһы туған телен рус балаларына ҡарағанда ауырыраҡ үҙләштерә?"**

- Кешенең бөтөн булмышы ҡан (ген) аша күсә, формалаша, үҫә. Ә үҫер өсөн төп шарт - туған тел, сөнки әсә ҡарынында ҡан аша бар булған булмыш артабан әсә теле аша үҫеш ала.Ә туған телендә үҫеш ала алмай икән, баланың быуындан-быуынға күсә килгән һәләте туған теле менән бергә тәрән йоҡоға тала, тәбиғи, донъяуи төшөнсәләрҙе аңлау, танып-белеү һәләте аптыранып-аҙашып ҡала. Ә эргәһендә ултырған рус балаһы донъяны үҙ туған телендә танып белә, төшөнсәләр зиһененә үҙ туған телендә һеңә, сөнки уның әсә ҡарынында ваҡытта уҡ бар ҡиммәттәр ҡанына әсә телендә һалынған һәм артабан ошо уҡ туған телендә үҫеш алған. Уға инде башҡорт телен һәм башҡа телдәрҙе өйрәнеү өсөн төшөнсәләрҙе танып белеү түгел, ә фәҡәт һүҙҙәрҙең тәржемәһе генә кәрәк була.

Хөрмәтле туғандар! Әйҙәгеҙ әле, үҙ-ара туған телебеҙҙә аралашайыҡ! Ни эшләп үҙ-ара нигеҙҙә рус телендә бара ул һөйләшеү? Русса яҡшы беләм, тип күкрәк һуғыуы был, үҙеңде башҡортса һөйләшеүселәрҙән өҫтөн ҡуйыуы? Ҡасанға тиклем былай дауам итер? Донъяла барған аңға тәьҫир итеү көрәшендә иң рухһыҙ милләт итеп күрһәтмәйек әле үҙебеҙҙе. Тағы бер тапҡыр ҡабатлауҙы урынлы һанайым: ғалимдар фекеренсә, 100 мең кеше үҙ-ара үҙ туған телендә һөйләшһә, ғаиләһендә аралашһа, ул милләт һаҡлана - Ер йөҙөнән милләт булараҡ юғалмай. Башҡортто милләт булараҡ һаҡлауға һәр беребеҙ өлөш индерәйек. Әйҙәгеҙ, беҙ, ошо маҡсат менән аралашыусылар, тотонайыҡ был изге эшкә! Үткәнебеҙ - риза, бөгөнгөбөҙ - өмөтлө, киләсәгебеҙ рәхмәтле булыр.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

✓ *Йолаға ярашлы, һәр бер аҫаба башҡорт дөйөм биләмәләгә үҙенең пай еренә теләгән бер күскенсене индерә алған. Ләкин бындай аҙымдан уның ырыуҙаштары зыян күргән.*



ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

**XVIII быуаттың башында, 1704 йылда ҡупҡан башҡорт ихтилалы тамамланғандан һуң, төбәктә үҙенсәлекле сәйәси хәл барлыҡҡа килә. Башҡорттар 1711 йылдан 1722 йылға тиклем Рәсәй подданныйлығынан сығып, тулы үҙаллылыҡ яулайҙар. Яһаҡ түләмәүҙән, Үҙәккә бойһонмауҙан тыш, уларҙың хатта бөтә институттары, ханы (башлығы) булған тулы мәғәнәләге дәүләт берләшмәһе, йә ҡаҙаҡтар, ҡарағалпаҡтар менән бергә союз төҙөү мөмкинлеге лә була. Ләкин улар ҡабаттан Рәсәй ҡанаты аҫтына ҡайтыуҙы һайлай. Уларҙы быға нимә этәрә һуң, ниндәй сәбәптәр үҙаллы дәүләт төҙөүгә ҡамасаулай? Тарих фәндәре докторы Булат Әхмәр улы АҘНАБАЕВтың ошо темаға арналған хеҙмәтенең дауамын тәҡдим итәбеҙ.**

# УН ИКЕ ЙЫЛЛЫҠ ҮҘАЛЛЫЛЫҠ



Көньяҡ һәм көньяҡ-көнбайыш башҡорттары Мәскәү менән конфликт килеп сыҡҡан осраҡта хөкүмәт көстәре барып етә алмаҫлыҡ урынға күсеп китә алған. Шуға күрә Нуғай һәм Ҡаҙан юлдары башҡорттарына ҡарата батша хөкүмәте күберәк дипломатик саралар ҡулланырға тырышҡан һәм башҡорттар менән ҡалмыҡтар араһындағы дошманлыҡты кире тергеҙеү юлдарын эҙләгән.

Ә Уса һәм Себер юлдары башҡорттарында ихтилалдарҙы баҫтырыу өсөн икенсе төрлө саралар ҡулланылған. Был юлдарҙағы күпселек башҡорттар ултыраҡ тормошта йәшәгәнлектән, уларҙың ҡайҙалыр күсеп китеү мөмкинлеге сикләнгән булған. XVII быуаттың урталарында Уса һәм Себер юлдары башҡорттары Өфө өйәҙе халҡының тик 30 процент тирәһен генә тәшкил итһә лә, властарға ҡаршы баш күтәреүҙәр был яҡтарҙа бигерәк тә ҡаты һәм оҙайлы булған. Ә Нуғай һәм Ҡаҙан юлдары башҡорттары һан яғынан да күберәк, матди йәһәттән дә һәйбәтерәк тәьмин ителеүгә ҡарамаҫтан, батша хөкүмәтенә ҡаршы пассив тактика алып барыуҙы хуп күргән. Рәсми мәғлүмәттәргә ярашлы, ихтилал ваҡытында ҡалмыҡтарға күсеп китеүсе Нуғай юлы башҡорттарының һаны Уса юлы башҡорттарының дөйөм халыҡ һанынан да күберәкте тәшкил иткән. Шулай итеп, асыҡ сик буйында йәшәүсе башҡорттарҙың төрлө власть үҙәктәре араһында сәйәси манёвр эшләү өсөн һәр ваҡыт юлдары асыҡ ҡалған.

Оҙайлы ихтилалдар, билдәле, яҡшы тәбиғи матди база, бигерәк тә аттар һанының күп булыуын талап иткән. Был йәһәттән төньяҡ һәм Урал арьяғы башҡорттары көньяҡ һәм көнбайыш күршеләренән күпкә ҡалышҡан. Мәҫәлән, Нуғай юлы башҡорттары малсылыҡ менән шөғөлләнеүселәр араһында иң байҙары иҫәпләнгән. Улар шулай уҡ солоҡсолоҡ алып барыу һәм һунарсылыҡ өсөн иң яҡшы ерҙәргә хужа булған.

XVIII быуаттың 50-се йылдар башында Өфө провинцияһының Себер улыстары буйлап йөрөгән мулла Батырша Алеев урман һәм ялан башҡорттары араһындағы низағты билдәләп үткән. Шул уҡ ваҡытта XVIII быуаттың башына тиклем урман һәм ялан башҡорттарының хужалыҡ-мәҙәни өлкәләге айырмалыҡтары бер ҡасан да асыҡ конфликт тыуҙырмаған. Сикте һәм үҙҙәренең аҫабалыҡ хоҡуғын һаҡлап ҡалыу, иҡтисади һәм сәйәси мәнфәғәттәрҙән уртаҡ булыуы башҡорттар араһында берҙәмлек һаҡлап ҡалыуға нигеҙ булған. Ләкин 1704-1711 йылдарҙағы ихтилалдан һуң ҡасҡынсыларға һәм күскенселәргә ҡарата булған мөнәсәбәттән төрлө булыуы башҡорттарҙың берҙәмлегенә тарҡалыу менән янаған.

Бер яҡтан, күскенселәрҙең артыуы башҡорт ерҙәрен яйлап баҫып алыуға килтергән. Йолаға ярашлы, һәр бер аҫаба башҡорт дөйөм биләмәләгә үҙенең пай еренә теләгән бер күскенсене индерә алған. Ләкин бындай аҙымдан уның ырыуҙаштары зыян күргән. Икенсе яҡтан, башҡорттар күскенселәрҙең килеүенән иҡтисади файҙала барлығын яҡшы аңлаған, сөнки улар башҡорт ерҙәре менән ҡулланған өсөн түләгәндәр. Ахыр сиктә, күскенселәр һанының артыуынан ҡайһы бер улыстар отһа, икенселәре - отолған. Айырыуса ерҙәре әҙ булған көнбайыш, төньяҡ һәм төньяҡ-көнсығыш башҡорттары ҙур зыян күргән.

Шулай итеп, күскенселәр һорауы буйынса башҡорттар араһында конфликт тыуыуы уларҙың тарҡалыуына алып барыуҫы хәүеф тыуҙырған. Ләкин башҡорт ырыуҙарының күпселеге күскенселәр проблемаһын хан властының сәйәси ысулдары менән хәл итеп булмаясағын аңлаған. Шулай уҡ улар Башҡорт ханлығын иғлан итеү батша хөкүмәте менән һуғышҡа алып киләсәген дә яҡшы төшөнгән. Ләкин ҡоралллы баш күтәреүҙәр ханлыҡ төҙөүҙең иң ауыр эҙемтәһе булмаған. Бында эш икенсөлә - Башҡорт ханлығы төҙөү һәр бер сыңғыҙиттең идара итеүе ырыуҙар иерархияһын төҙөүҙән башланасағы көн кеүек асыҡ булған. Ә башҡорттар был иерархия баҫҡысында буйһонған позицияны алырҙар ине. Ләкин башҡорт йәмғәттселеге ваҡиғаларҙың был рәүешле үҫешенә әҙер булмаған.

Башҡорттар өсөн бындай ситуация уникаль булғанмы һуң? Ете ырыу шәжәрәһендә әйтелеүенсә, башҡорттарҙың Иван IV-кә подданныйлыҡ анты биреү өсөн килеүенең нигеҙендә ырыуҙар араһында ерҙе бүлеү тураһындағы мәсьәлә берҙән-бер үтенес булған. Батша Нуғай һәм Себер юлдарына бойороу хаты ебәргән һәм ете ырыу халҡы шул хаттарға таянып һәм үҙ-ара аңлашып-килешеп ерҙәрҙе бүлеп алғандар. Ләкин был ҡарарға ҡарамайынса, бөрйәндәр һәм ҡыпсаҡтар араһында ер мәсьәләһе буйынса конфликт XIX быуат башына тиклем дауам иткән һәм тик Рәсәй подданныйлығы ҡабул иткәс кенә ике яҡ та ҡоралллы бәрелештәрҙән туҡтап, ер бүлеү мәсьәләһен судта хәл итергә тырыша башлаған.

Башҡорттарҙың үҙ иректәре менән Рәсәй подданныйлығын ҡабул итеү мотивтарын тикшергәндә, эске ҡаршылыҡтарҙың булыуын иҫәпкә алмайынса булмай. Ләкин этник берҙәмлектең тулылығын һаҡлап ҡалыу хәрби бойһондороуға ҡарағанда әһәмиәтлерәк булған.

XVII-XVIII быуаттарҙағы башҡорт йәмғиәтен өйрәнеү башҡорттарҙа горизонталь сәйәси бәйләнештәрҙең өҫтөн булыуын күрһәтә. Айырым киҫәктәрҙән торған автономиялы ҡабилә структураһын сағылдырған был сәйәси форма, асылда, дәүләт булмаған. Ләкин үҙәкләштереүҙең бушаҡ булыуына ҡарамаҫтан, был берләшмә башҡорттарҙы тышҡы янауҙарға ҡаршы торорлоҡ ҡына итеп тупламаған, ә барыһы өсөн дә берҙәм булған хоҡуҡи йолалар, мәҙәни ҡиммәттәр һәм сәйәси стратегиялар булдырыу һәм шуларҙы тотоу өсөн мөмкинлектәр тыуҙырған. Шул уҡ ваҡытта әлеге берләшмәнең үҙенсәлектәре ситтән туранан-тура идара итеү өсөн мөмкин булмаған ҡаршылыҡтар тыуҙырған. Шуға күрә Рәсәй власы XVIII быуаттың 30-сы йылдарына тиклем уҡ башҡорт йәмғиәте эштәренә административ рәүештә ҡыҫылыу өсөн һөҙөмтәле сараларға эйә булмаған.

**Булат АҘНАБАЕВ,**
**тарих фәндәре докторы.**
**(Аҙағы. Башы 31-32-се һандарҙа).**

## БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Йомғаҡлау

Һарыҡтар кеүек уҡ, кәзәләр ҙә башҡорт колхозсылары хужалығында һәр ерҙә осрай. Кәзә көтөүҙәре күпселек колхоздарҙа бар, ҡайһы берәүҙәр уларҙы үрсетмәй, әммә һарыҡ көтөүендә башлыҡ булып йөрөү өсөн 4-5 кәзә тота.

Бәғзе колхоздарҙа ябай, урындағы тоҡом кәзәләрен һәм метистарҙы, икенселәрендә метистарҙы һәм мамыҡ кәзәләрен, өсөнсөләрендә бары тик мамыҡ кәзәләрен (дон буйы тоҡомо) үрсетәләр. Ябай һәм мамыҡ кәзәләре йәйгеһен бергә көтөлә, ҡышын улар айырым тотола, сөнки мамыҡ кәзәләре хәстәрлек талап итә.

Ҡайһы бер колхоздарҙа кәзәләрҙе лә, һарыҡтарҙы ла һауалар, улар айырым көтөүҙә йөрөтөлә. Ваҡ мал һөтөн брынза эшләү өсөн файҙаланалар.

Хәҙерге ваҡытта барлыҡ башҡорт колхоздарында ла тиерлек рус-инглиз һәм белорус тоҡомло сусҡалар тотолған сусҡа фермалары бар. Нигеҙҙә сусҡалар күп үрсетелмәй, ә шәхси хужалыҡтарҙа улар бик һирәк. Бында Ислам диненең йоғонтоһо һиҙелә.

Һирәк урындарҙан тыш, барлыҡ башҡорт колхоздарында ла ҡош-ҡорт фермалары бар (**һүрәт**). Уларҙа тауыҡ һәм ҡаҙ үҫтерәләр (өйрәктәрҙе күргергә тура килмәне). Барлыҡ ҡош-ҡорт фермаларында ла ҡаҙҙар, күпселек осраҡта тауыҡтар ҡаҙ һәм тауыҡ бәпкәләрен баҫып сығара. Шулай уҡ тулыһынса инкубатор бәпкәләренән үҫтерелгән тауыҡ фермалары ла бар. Колхоз ҡошсолоғо, малсылыҡ кеүек үк, колхозсыларҙың шәхси хужалыҡтарында тауыҡ үҫтереүҙә лә сағылыш таба. Хәҙер башҡорттар бөтөн ерҙә лә эре һәм леггорна, йәки урындағы яҡшыртылған тоҡом тауыҡтарын үрсетә.



Башҡорттарҙың хужалығында борон-борондан ҙур роль уйнаған ҡортсолоҡ әле лә үҙенең әһәмиәтен юғалтмаған. Киреһенсә, ул бығаса башҡорттар бик һирәк кенә ҡортсолоҡ менән шөғөлләнгән көньяҡ-көнсығыш районтарға таралған. Хәҙерге башҡорт ҡортсолоғонда социалистик колхоз ҡортсолоғо менән айырым колхозсыларҙың ҡортсолоғо араһында һиҙелерлек айырма бар. Күпселек колхозсылар ҡортсолоҡ менән боронғоса шөғөлләнә. Тау-урманлы Башҡортостанда солоҡтар һаҡланған һәм улар колхоз урманында йәки лесхоздар ҡарамағында булған дәүләт урмандарында булыуға ҡарамаҫтан, һаман да айырым кешеләрҙең милке булып иҫәпләнә. Бынан тыш, күпселек башҡорттарҙың ҡорттары түмәр умарталарҙа тотола, ә колхоз умарталығында улар рам умарталарында йәшәй. Был элек тә башҡорттарҙың хәҙерге кеүек үк ҡорттарҙы үҙҙәренең ихатаһында йыл әйләнәһенә ҡышҡылыҡҡа солоҡ кеүек үләндәр, ботаҡтар, ҡабыҡ менән йылытылған түмәр умарталарҙа тотоуы менән аңлатыла. Башҡорт һары ҡорто крайҙың ҡырыҫ климат шарттарына яраҡлаштырылған һәм ошондай түмәр умарталарҙа еңел ҡышлай. Ҡорттарҙы рамлы умарталарҙа тотҡанда яҡшы ҡышлыу урыны - умарта баҙы төҙөү кәрәк. Был ҡайһы бер колхозсылар өсөн ауыр мәсьәлә.

*✓ Әгәр ерҙе һата башлаһаҡ, республиканы һатабыҙ, тигән һүҙ. Шуның өсөн, аҫабалыҡ - ул ил, халыҡтың дөйөм ере, республикабыҙ икәнен аңларға ваҡыт.*



# БАШҠОРТТО аҫаба хоҡуғынан айырып

**"Башҡорттоң ергә аҫаба хоҡуғы булған", тигәнде беҙ бөгөн үткән заман рәүешендә генә ҡулланабыҙ. Ҡасан барлыҡҡа килгән аҫабалыҡ? Ниңә ул хоҡуғыбыҙ тураһында бөгөнгө йәштәр "Был - минең хоҡуғым!" тип әйтерлек кимәлдә белмәй? Аҫабалығыбыҙҙы яңынан тергеҙеү юлдары бармы? Ошо һәм ошо юҫыҡтағы башҡа һорауҙарға яуап ишетеү маҡсатында редакциябыҙға аҫабалыҡ темаһын үҙ әҫәрҙәрендә, республика мәғлүмәт сараларында әленән-әле күтәргән яҙыусылар - БР-ҙың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Ғәлим Афзал улы ХИСАМОВ һәм оҙаҡ йылдар ауыл хужалығы өлкәһендә эшләгән билдәле яҙыусы, БР Яҙыусылар берлеге рәйесе урынбаҫары Спартак Мөжәүир улы ИЛЬЯСОВты саҡырҙыҡ.**

**Аҫабалыҡ тураһында һүҙ барған саҡта беҙ, бәлки, ҡайһы бер нәмәләрҙе аңлап та етмәҫбеҙ, шуға әңгәмәне лә ябай ғына "Аҫабалыҡ нимә ул?" тигән һорауҙан башлағы килә...**

**Ғ. Хисамов:** Халҡыбыҙ ерҙә тыуған, ергә ҡайта. Булмышыбыҙ, ҡаныбыҙ аҫабалыҡҡа, ергә бәйле. Башҡорттоң ергә бәйлелеге уның бөтә холҡонда, көнитмешендә, ынтылышында, үткәнендә, бөгөнгөһөндә сағыла. Шул йәһәттән ҡарағанда, Спартак Мөжәүир улы менән беҙ икебеҙ ҙә бер үк фекерҙә, әммә ике тарафта эшләйбеҙ. Мин аҫабаның боронғо, төптә ятҡан мәғәнәһен эҙләргә, тикшерергә тырышһам, ул бөгөнгө ер проблемаларын күтәрә. Бөгөнгө әңгәмәлә ер тураһындағы һүҙ ике юҫыҡта буласаҡ, шуны алдан билдәләп үтәйек, тим.

"Аҫаба" һүҙен боронғо иран теленән (беҙҙең күп кенә һүҙҙәр, өндәр , телдең бүтән яҡтары  боронғо иранға барып тоташа) бөгөнгөгә ауҙарып әйтһәк, "атай ере", атанан-балаға күсә килгән ер, шул ергә бәйле хоҡуҡ, йәшәү рәүеше тип аңларға кәрәк.

Башҡорттоң аҫабалығы һымаҡ хоҡуҡ бүтән бер генә халыҡта ла (Рәсәйҙә лә, хатта ер йөҙөнөң ҡалған ҡитғаларында ла) юҡ. Әйтәйек, хәҙерге Америка индеецтарында ла ергә бәйлелек көслө, әммә ул бәйләнеш башҡорттағы аҫабалыҡ кимәлендә түгел. Башҡорттағы аҫабалыҡ килешеү нигеҙендә, йәғни, дәүләт кимәлендә йәмғиәттең бер өлөшө булараҡ барлыҡҡа килгән, халыҡҡа күскән, уның йәшәү рәүеше, институттары булып уҡмашҡан. Шуға күрә, башҡортто ерҙән, аҫаба хоҡуғынан айырып ҡарау, тикшереү, характерын билдәләү мөмкин түгел.

**С. Ильясов:** Аҫабалыҡ - дәүләтселек билдәһе. Милләт аҫаба хоҡуғына эйә икән, тимәк, ул үҙ еренә ысын мәғәнәһендә хужа. Аҫабалыҡ - ерҙең хужаһы булыуҙың иң юғары дәрәжәһе, халыҡҡа үҙ ере менән файҙаланыуға иң тулы хоҡуҡ биргән билдә. Башҡорт ғүмер баҡый аҫаба. Ул Урал алдындағы Оло Иҙелдән алып, Байкүлдең аръяғына тиклемге ерҙәрҙә йәшәгән. Атап әйткәндә, ҡара ҡытайҙарҙың, наймандарҙың, ҡараиттарҙың, башҡа төрки ырыуҙарының борон йәшәгән ерҙәренән алып, Урал алдына - Иҙелгә ҡәҙәре - беҙҙең башҡорт халҡының аҫаба ерҙәре. Ул ерҙәрҙе беҙ бер кемдән дә алмағанбыҙ. Ул ерҙәр тарихи, тәбиғи еребеҙ. Юғиһә, тарихыбыҙға ямау өҫтәргә теләүселәр ҙә бар. Шундай яңылыш фекерҙәрҙең береһе - имеш, төрки халыҡтары, шул иҫәптән башҡорттар ҙа, көнсығыштан килгән, тигән фараз. Килмәгән! Беҙҙең төрки халыҡтар Оло Иҙел, Яйыҡ, Урал алдында, аръяғында, Ибер уйһыулыҡтарына ҡәҙәр Байкүл аръяғына таралған булған. Бында тәғлимәттең төбөнә төшөп ҡарарға кәрәк.

Һәр илдең халҡын солғаған үҙ тәғлимәте була. Оло тәғлимәт -  әлбиттә, Тәңрелек дине. Ислам, несториан формаһындағы христианлыҡ, буддизм, башҡа диндәр килгәнгә тиклем беҙҙең төп тәғлимәт Тәңрелек булған. Тәңрене ябайлаштырып әйтһәк, ул - Ҡояш. Халыҡтар Тәңрегә яҡыныраҡ йәшәргә, уға һыйынырға теләгән. Улар үҙҙәренсә: "Ҡояш көнсығыштан сыға, халыҡтарға нурын һибеп, донъя йөҙөн йылытып, үләнен үҫтереп, башҡа бөтөн байлыҡтарын биреп, яйлап аръяҡҡа - тау артына төшөп китә",- тип уйлаған. Тәңрегә табынған халыҡтар Ҡояшты көн дә ерҙе уйып, уның тишегенә төшөп китә, тип күҙ алдына килтергән, күрәһең. Шул халыҡтарҙың ошо хәҡиҡәткә бик ныҡ ышанған бер өлөшө Тәңренең артынан  уның сыҡҡан еренә - көнсығышҡа күсенгән. Әммә күп өлөшө төп ерендә - Уралда ҡалған. Күсеп киткән халыҡтар, Тымыҡ океанға етеп, Тәңре ерҙән түгел - һыуҙың аръяғынан сыға икән, тигән һығымтаға килгән. Шунан, тәғлимәттәренән төңөлөп, кире ҡайтҡан. Быға ла бик күп быуат кәрәк булған. Халыҡтарҙың күсенеүенә Тәңрегә яҡын килеү теләге этәргән. Ни өсөн беҙ был тарихты белмәйбеҙ? Сөнки беҙ яҙма динде - мең йыллыҡ тарихты ғына өҙөп-йолҡоп беләбеҙ. Ә кешелек миллион йыл йәшәгән. Аръяғы ҡайҙа? Ниңә ул яғы өйрәнелмәй? Сөнки анализлай, бәйләй белмәйбеҙ. Белгәндәре иһә, үҙ мәнфәғәтенә, сәйәсәтенә бәйләй.

Инде бирерәк киләйек: Ғәлим Афзал улы дөрөҫ әйтте - мин һуңғы осорҙағы аҫабалыҡты әйтәм -1917 йылға тиклем, ысынлап та, аҫабалыҡ тик башҡортта ғына күҙәтелгән. Урыҫтарҙың аҫабалығы нимәнән ғибәрәт? Синыфтарының бер өлөшө бик байып киткәс, батшаларынан: "Ана бит, башҡорттоң быуындан-быуынға килгән атама ере бар, һин беҙгә лә ер бир", - тип талап иткән. Батшалыҡ уларға дворянлыҡ тигән чин биргән. Уларҙа аҫабалыҡ дворянлыҡ нигеҙендә генә барлыҡҡа килгән. Әммә дворяндарҙа эшләгән ҡолдарҙың береһенең дә фамилияһы-исеме булмаған. Шуның өсөн дә: "Иван, не знающий родства", - тигән әйтем сыҡҡан. Урыҫтарҙа ҡушамат көслө. Дворянлыҡ бөткәс, күптәр ҡушаматтарын фамилия итеп алған. Воронин, Орлов, Лопатин, Собакин, Мышкин һәм башҡа бик күп фамилиялар барлыҡҡа килгән. Ә бына, Петров, Павлов ишеләре, байҙары - дворяндар. Улар - аҫаба, әммә тарихи аҫаба түгел. Уларға аҫабаны батшалары биргән. Башҡорттоң аҫабалығын урыҫ батшалығы бирмәгән. Ул башҡорттоң аҫабалығын таныған. Таныған өсөн беҙҙең менән килешеү төҙөгән.

Аҫаба хоҡуғы башҡортта меңәр йылдар дауамында килә, ә урыҫ дворяндарында бер нисә йөҙ йыл ғына. Башҡорттоң аҫабалығы  меңләп йыл әүәл йәшәгән ҡартатаһынан 20-се быуат башында йәшәгән вариҫтарына тиклем күсә килгән. Шулай ҙа Рәсәй ҡулы аҫтында ҡалғас, башҡорт иленең, халҡының социаль, иҡтисади, сәнәғәти үҫеше туҡтай. Башҡорттар аҫабалыҡ хоҡуғын бар тулылығында файҙалана алмай. Сөнки ерҙе ойошоп эшкәртеүҙе империя тыя. Бигерәк тә 1736 йылда башҡортҡа тимерлек тотоу үлем язаһына тарттырыу менән тыйылғас, ер эшкәртеү әҙәйә. Хатта туҡтап ҡала. Тимерселәр үлтерелә. Һөҙөмтәлә, милли сәнәғәт, тимәк, дәүләтселек нигеҙе ҡаҡшай. Башҡорт дәүләтселегенең нигеҙенә балта сабыла. Шуның өсөн бөтөн ер эшкәртелә лә алмаған. Ырыу-ҡәбилә ара ерҙе һатмаҫҡа, тигән оло теләк менән йәшәһә лә, аслыҡтан бөлгөнлөккә төшөрөлгән башҡорт ерен, күлдәрен һатырға мәжбүр була. Килмешәктәр бигерәк тә мәғдән иретә торған мейестәр тирәһендәге биләмәләрҙе алырға ынтыла.

Бөгөн дәүләт беҙгә аҫабалыҡты бирҙе кеүек, тик аҫабалыҡтың төп есеме булған ер ҡайҙа? Һәр кемдең ере бар, әммә уны самалап, бүлдереп алыу өсөн берәүҙең дә билдәһе һәм танытмаһы юҡ. Шуға күрә кешеләр үҙ ерен аныҡ ҡына белмәй ҙә. Межаланған ере булмағас, уны ни эшләтергә лә белмәй аптыраналар.  Эшкәртә лә, ҡуртымға бирә лә, һата ла, сәсә лә алмайҙар. Йәғни кеше ергә үҙен хужа итеп тоймай. Мәсьәләнең төбөнә төшөп әйтһәк, дәүләттең үҙ халҡын аҙыҡ-түлек менән тәьмин итерлек ҡеүәте шулай яйлап юҡҡа сыға бара. Халҡын аҙыҡ-түлек менән тәьмин итәм, тиһә, дәүләт бүленгән ерҙе ерҙең төп хужаһынан ҡуртымға алырға һәм дөйөм хужалыҡтар ойошторорға тейеш. Башҡорт һәм башҡа халыҡ та дәүләткә ер һатырға тейеш түгел. Һатылһа, ул дәүләттеке була. Халыҡ ерен дәүләткә ҡуртымға бирһен, дәүләт уға ҡуртым түләүе түләп торһон. Әгәр ерҙе һата башлаһаҡ, республиканы һатабыҙ, тигән һүҙ. Шуның өсөн, аҫабалыҡ - ул ил, халыҡтың дөйөм ере, республикабыҙ икәнен аңларға ваҡыт. Шуны аңлау киләсәктә Башҡортостан халҡының, Рәсәй халҡының аҙыҡ-түлек проблемаһын тулыһынса хәл итеүҙең бер юлы булыр ине. Сөнки уны хәл итә алмаһаң, дәүләтең булмай.

**Ғ.Хисамов:** Аҫабалыҡтың ни икәнлеген бер аҙ билдәләнек. Дөрөҫ әйтелде: аҫабалыҡты беҙҙең халыҡҡа берәү ҙә бирмәгән. Башҡорт аҫаба булып тыуған. "Башҡорт" менән "аҫаба" - икеһе бер. Әгәр ҙә инде башҡорттоң  ерен тартып алаһың икән, ул яртылаш тора ла ҡала. 1917 йылда башҡорттоң ерен тартып алыу ана шул яртылаш тороп ҡалдырыу булды инде ул. "Декрет о земле" тигән ҡанун -Рәсәй социалистик дәүләт ҡора башлағас барлыҡҡа килгән тәүге декреттарҙың береһе. Ул дворяндарҙың ғына түгел, башҡорттоң да, бүтән халыҡтарҙың помещиктарының да ерен тартып алды.

1917 йылда ошо декрет барлыҡҡа килгәндән һуң, беҙҙең йәш кенә егеттәр, юғары бе-


Башҡорттар баҫыуҙа. (XX быуат башы).



***Башҡорттоң аҫабалығын урыҫ батшалығы бирмәгән. Ул башҡорттоң аҫабалығын таныған. Таныған өсөн беҙҙең менән килешеү төҙөгән. Аҫаба хоҡуғы башҡортта меңәр йылдар дауамында килә, ә урыҫ дворяндарында бер нисә йөҙ йыл ғына. Башҡорттоң аҫабалығы  меңләп йыл әүәл йәшәгән ҡартатаһынан 20-се быуат башында йәшәгән вариҫтарына тиклем күсә килгән. Шулай ҙа Рәсәй ҡулы аҫтында ҡалғас, башҡорт иленең, халҡының социаль, иҡтисади, сәнәғәти үҫеше туҡтай. Башҡорттар аҫабалыҡ хоҡуғын бар тулылығында файҙалана алмай. Сөнки  ерҙе  ойошоп эшкәртеүҙе империя тыя. Бигерәк тә 1736 йылда башҡортҡа тимерлек тотоу үлем язаһына тарттырыу менән тыйылғас, ер эшкәртеү әҙәйә. Хатта туҡтап ҡала. Тимерселәр үлтерелә. Һөҙөмтәлә, милли сәнәғәт, тимәк, дәүләтселек нигеҙе ҡаҡшай.***

***✓ Ауыл кешеһе мал тотоп байығып китмәһен өсөн, уға зыян килтерер өсөн махсус эшләнгән аҙым был. Йәнәһе, ит комбинатында малды дөрөҫ итеп һуялар. Ниңә, меңәр йыл малсылыҡ менән шөғөлләнгән башҡорт малды һуя белмәйме ни?***



лемле, бына тигән егеттәр (әйтергә кәрәк, башҡорт хөкүмәтенең 80 проценты юғары белемле кешеләрҙән торған) Башҡортостан дәүләтен ойоштора. Тәүге аҙымы - ерҙе элекке аҫабаларға кире ҡайтарыу була. Шуға күрә, һәр башҡорт өсөн был дәүләт, уның хөкүмәте шул тиклем яҡын, ҡәҙерле була. Үҙенең хөкүмәте өсөн бер генә халыҡ та шул тиклем йәнтәслим һуғышмай. Сөнки ул хөкүмәт халҡының йәшәйеше өсөн тырыша. Ун-

лем артып киткән... Ер мәсьәләһе шулай һаман да хәл ителмәгән көйө ҡала. Сөнки закон сығарыу органдарында халыҡтың ергә хужа булырға тейешлеген аңлаған әҙәмдәр бик аҙ.

**Ғ.Хисамов:** Тағы бер мәсьәлә: ерҙе межалап алып, уға юридик йәһәттән хужа булған сүрәттә лә, уны бит эшкәртергә кәрәк. Ер файҙаланылмай ятһа, берәүгә лә файҙа килтермәй. Икенсе яғы ла бар: зыян да килтермәй ул. Әммә




*Башҡорт ырыуҙары ерҙәре (XVII-XVIII быуаттар)*

Ҡайһы ит комбинатында, беҙҙекеләр кеүек, малды быуынбыуынына ғына айырып, һөйәген онтамайынса ғына бүлгеләп һуя белеүсе бар икән?

Рәсәй территорияһы Ер шарындағы ҡоро ерҙең алтынан бер өлөшөн алып тора. Шул тиклем ҙур дәүләт. Күпме ер унда, күпме урман-тауҙар, башҡалары... Ләкин ул ерҙәр нисек файҙаланыла? Боронғо башҡорт ере булған Ырымбур далаһына сығып ҡара әле: унда хәҙер күберәк билсән, ваҡ урман үҫә. Республика территорияһында ла бихисап бындай урындар. Йәғни, ер кешене ашатмай. Сөнки ерҙе эшкәртеүсе лә юҡ, ашарға теләүсеһе лә юҡ. Ашарға теләүселәр ҡалаларҙа сүп-сар контейнерҙарында ҡаҙына... Ҡыҙғаныска ҡаршы, һөйләнгәндәрҙең бөтәһе лә ана шул аҫабалыҡҡа бәйле. Аҫабалыҡты юҡҡа сығарыуҙың бер һөҙөмтәһе, эҙемтәһе былар.

**С.Ильясов:** Совет осоронда икмәк мәсьәләһе бик һәйбәт хәл ителде. Беҙ, мәҫәлән, ауыл хужалығында эшләп йөрөгәндә йыйылыш, кәңәшмәләргә район үҙәге Учалыға бара торғайныҡ. Йыш ҡына күрелә торғайны: сүп-сар контейнер-

ерҙәренең ниндәйҙер бер өлөшө бирелде. Ә ауылда йәшәмәгән аҫабаға нимә ҡалды? Уның бер нәмәһе лә юҡ. Бөгөн ҡалаларҙа башҡорттоң яртыһынан күберәге йәшәй. Ә бит улар ҙа аҫаба. Уларҙы аҫабалыҡтан берәү ҙә мәхрүм итмәгән һәм улар үҙҙәре лә был хоҡуҡтан баш тартмаған. Шулай икән, ҡалала көн иткән аҫабаға ла боронғо хоҡуғын ҡайтарып бирергә кәрәк. Рәсәй Федерацияһы Конституцияһында яҙылған хоҡуҡ бит был. Йәғни, ауылдамы, ҡаламы, бүтән ерҙә йәшәйме аҫаба, уның аҫабалыҡҡа бәйле хоҡуҡтары һәр ваҡыт һаҡланырға тейеш. Был һүҙҙәрҙе мин йә әңгәмәләшем Спартак Ильясов уйлап сығарманыҡ. Был закон дәрәжәһенә күтәрелеп, 19-сы быуат аҙағында батша Рәсәйенең хоҡуҡтар актына яҙылған. Дәүләт бит граждандарҙы буйһондороп тота ғына торған аппарат түгел, ул граждандар шул дәүләттә яҡшы йәшәһен өсөн һәр төрлө шарттар тыуҙырырға тейеш. Дәүләттең беренсе бурысы ошо, тик шунан һуң ғына - әҙәмде ҡурҡытып буйһондороусы.

# ЕРҘӘН ҺӘМ...

## ҡарау мөмкин түгел

дай хөкүмәт бер ваҡытта ла башҡа бер ерҙә лә булғаны юҡ, булмаясаҡ та. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, үҙен социалистик дәүләт тип атаған Рәсәй хөкүмәте был юлы ла башҡорттарҙы алдай, ерҙе тағы тартып ала. Инде 70 йыл үтте. 1991, 1992 йылдар етте. 1991 йылда ҡабул ителгән Рәсәй Конституцияһында: "СССР ваҡытындағы бөтә ҡанундар, акттар юҡҡа сығарыла. Уға тиклемгеләре аяҡҡа баҫтырыла, үҙ хоҡуҡтарын кире ала", - тип яҙылған. Йәғни, башҡорттоң аҫабалығы, тартып алынған ерҙәре кире ҡайтарыла, тигән һүҙ был. Аҫабалыҡ юридик йәһәттән ошо рәүешле кире ҡайтарылды, хәҙер уны һәр кем үҙенең аҫаба хоҡуғын үҙенә ҡайтарырға тейеш. Уны һәр кеше айырым, йә булмаһа, төркөм-төркөм - ауыл-ауыл, ырыу-ырыу эшләргә мөмкин. Аҫаба хоҡуғы борон-борондан ауылдыҡы, улыстыҡы, ырыуҙыҡы булған. Бына ошо нигеҙлектә хоҡуҡтарыбыҙҙы тулыһынса кире ҡайтарырға беҙҙең юридик хоҡуғыбыҙ бар, шуны эшләргә кәрәк.

**С.Ильясов:** Юридик хоҡуғыбыҙ бар, дөрөҫ, әммә ысынбарлыҡта был хоҡуғыбыҙҙы тормошҡа ашырыу юлында кәртәләр ҙә бихисап. Йә миңә тәғәйен ерҙе бүлеп биреүҙе ауыл советы сессияһы, йә район советы ҡарамаған, йә Өфө рөхсәт итмәгән, йә межа һалынмаған, йә был эштәрҙе башҡарыуҙың хаҡы шул тик-

файҙа килтермәй икән, зыян килтерһен, тип көҫәгән көстәр ҙә бар йәмғиәтебеҙҙә. Әгәр ҙә һинең ерең бар икән, һиңә аҙым һайын "Һин ер хужаһы!" тип тылҡыясаҡтар һәм һинән ул ерҙе файҙаға эшләттермәҫ өсөн ҡырҡ төрлө ҡаршылыҡ уйлап сығарасаҡтар. Бер миҫал килтерәм. Беҙҙең БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай шундай закон сығарҙы: үҫтергән малыңды һатыр өсөн уны

ҙарының эсе тулы ап-аҡ икмәк! Мин: "Аллаһы Тәғәлә ҡала халҡына бер күрһәтһен ине икмәк юҡлыҡты", - тип уйлай торғайным. Ысынлап та, хәҙер шул көнгә ҡалып барабыҙ түгелме? Рәсәйҙең үҙендә бойҙай үҫтергән баҫыуҙар бик аҙ ҡалып бара бит. Гитлер менән һуғыш сығып киткәс, бөтөн аҙыҡ-түлек, еңел сәнәғәт тауарҙары менән Сталин төҙөгән колхоздар тәьмин иткән. Хәҙер ни булыр? Бик ҡурҡыныс, иҫ китмәле ҡурҡыныс хәлдәбеҙ. Әммә



***Аҫабалар Рәсәй дәүләте эсендә өсөнсө йәмғиәт ҡоролошон кисерә: феодализм, социализм һәм капитализм. Теләһә ниндәй ҡоролошта ла был дәүләт аҫабаларҙың мәнфәғәттәрен яҡлауҙы үҙенең бурысы итеп һанаманы. Батша заманында аҫаба хоҡуғы, аҫаба ере кеүек үк, ҡыҫырыҡланғандан-ҡыҫырыҡланды. Башҡорт ырыуҙары Рәсәй составына ингәндә һәр аҫаба өлөшөндә кәм тигәндә 50 дисәтинә тирәһе ер булһа, 1914 йылда 7,5 гектар самаһы ҡала. Социализм осоронда аҫабалыҡ тулыһынса юҡҡа сығарыла. Капитализм дәүерендә Төп законда аҫабалыҡтың кире ҡайтарылыу ихтималлығы танылды. Ҡабатлап әйтәм, ихтималлыҡ танылды ғына, был аҫабалыҡты кире ҡайтарыуға юл асылды тигәнде аңлатмай әле. Уны ҡайтарыу өсөн күп тырышлыҡ талап ителә.***

бары тик ит комбинатында йә башҡа махсус урынға алып барып һуйҙыртырға тейешһең. Ауыл кешеһе мал тотоп байығып китмәһен өсөн, уға зыян килтерер өсөн махсус эшләнгән аҙым тип аңларға кәрәк быны. Ауыл хужалығын юҡҡа сығарыуҙың бик һәйбәт ысулы. Йәнәһе, ит комбинатында малды дөрөҫ итеп һуялар. Ниңә, меңәр йыл буйына малсылыҡ менән шөғөлләнгән башҡорт малды һуя белмәйме ни?

аңыбыҙ менән шуны аңларға тырышмайбыҙ.

**▸ Халыҡты ерһеҙ итеүҙең, ерҙә эшләтеүҙән төңөлдөрөүҙең эҙемтәләре ҡот осҡос икәнен күрһәттегеҙ. Ә шулай ҙа ошо аңыбыҙ менән аңлап етмәгән ауыр хәлдән сығыу юлдары бармы һуң?**

**Ғ.Хисамов:** Әле беҙ күбеһенсә ауылда йәшәгән аҫабалар тураһында һүҙ йөрөтәбеҙ. Эйе, уларға ҡағыҙҙа булһа ла пай

**С.Ильясов:** Көрсөктән сығыуҙың тағы бер еп-еңел юлы бар: Конституцияға ярашлы федераль мөнәсәбәттәр барлыҡҡа килтерергә кәрәк. Республикалар Федераль үҙәккә үҙҙәренең дәүләтселек хоҡуҡтарының ниндәйҙер өлөшөн, әйтәйек, оборона, халыҡ-ара мөнәсәбәттәр, атом, космос, океания кеүек мәсьәләләрҙе тапшырып, ҡалғандарын үҙе хәл итеп йәшәргә тейеш. Ә бөгөн? Бөгөн барыһы ла тик

үҙәктә хәл ителә. Үҙәктең рөхсәте булмаһа, хатта сөскөрә лә алмайһың. Әлеге көрсөктән сығыу өсөн ысын федерализм өсөн көрәшергә кәрәк. Дәүләт структураларында ысын федерализм булһын. Йөҙ һум эшләп, уның 85 һумын тартып алһалар, дәүләт үҫешмәй. Емерелә.

**▸ Ошо бөтә булған ваҡиғаларҙан беҙҙең халҡыбыҙҙың бөгөнгө быуыны ниндәй һабаҡ алырға тейеш икән?**

**Ғ.Хисамов:** Аҫабалар Рәсәй дәүләте эсендә өсөнсө йәмғиәт ҡоролошон кисерә: феодализм, социализм һәм капитализм. Теләһә ниндәй ҡоролошта ла был дәүләт аҫабаларҙың мәнфәғәттәрен яҡлауҙы үҙенең бурысы итеп һанаманы. Батша заманында аҫаба хоҡуғы, аҫаба ере кеүек үк, ҡыҫырыҡланғандан-ҡыҫырыҡланды. Башҡорт ырыуҙары Рәсәй составына ингәндә һәр аҫаба өлөшөндә кәм тигәндә 50 дисәтинә (дисәтинә - гектарға яҡын) тирәһе ер булһа, 1914 йылда 7,5 гектар самаһы ҡала. Социализм осоронда аҫабалыҡ тулыһынса юҡҡа сығарыла. Капитализм дәүерендә Төп законда аҫабалыҡтың кире ҡайтарылыу ихтималлығы танылды. Ҡабатлап әйтәм, ихтималлыҡ танылды ғына, был аҫабалыҡты кире ҡайтарыуға юл асылды тигәнде аңлатмай әле. Уны ҡайтарыу өсөн күп тырышлыҡ талап ителә. Сөнки бөгөнгө дәүләт, 100-200 йыл элекке һымаҡ уҡ, аҫабаның яҡшы тормошо өсөн ҡыл да ҡыбырҙатасаҡ түгел. Шуға күрә аҫабаларға үҙ хоҡуҡтарын аяҡҡа баҫтырыр өсөн тик үҙҙәренә генә көс түгергә ҡала. Йырҙа йырланғанса, биләндә биштән быуаһың да, тешеңде ҡыҫаһың да, әйҙә, алға. Тик берҙәм булып, юл башлаусыларҙы тыңлап, алға ынтылырға кәрәк.

**С.Ильясов:** Был һорауға яуап биреүе бик ауыр. Һабаҡ бер быуын кешеләренә генә бирелә, икенсе быуынға күсмәй ҙә ҡуя. Мәҫәлән, беҙ совет дәүләте биргән һабаҡҡа ышанып йәшәп килдек... Бөгөн иһә дәүләттең маҡсатлы тәғлимәте юҡ. Тәғлимәт булып етешһен өсөн һәр идея бөтөн халыҡты солғарға тейеш. Халыҡты солғамаһа, тәғлимәттең көсө лә, кәрәге лә булмай. Нисек кенә булмаһын, бөгөнгө быуын үҙ башы менән уйлаһын, ата-бабаларға бирелгән һабаҡтарҙан һығымталар яһаһын, тием.

**ЙОМҒАҠЛАП...**

**Бөгөнгө һөйләшеүҙә беҙ киләсәккә өмөт уятырлыҡ фекерҙәр ишеттек. Аҡһаҡал ҡунаҡтарыбыҙҙың тос кәңәштәре, бәлки, йыйындарҙа уртаҡ фекерҙәрҙән һөҙөп алынып, уртаға сығарыла торған ҡарарҙарға бәрәбәрҙер. Улар буйынса эш планы, ҙурҙан ҡупҡанда, резолюция ҡабул итергә лә булалыр. Дуға, көйәнтә бөккәндә, һынмаһын өсөн ағасын эҫе һыуға тығып, "бешереп" бөккән һымаҡ, был мәсьәләлә лә ололар аҡылына һәм законға таянып эш итеү кәрәктер.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**әңгәмәләште.**

**Думбыра - башҡорттарҙа, ҡырғыҙҙарҙа, ҡаҙаҡтарҙа, тываларҙа, алтайҙарҙа, шулай уҡ башҡа төрки халыҡтарында киң таралыу алған ҡыллы музыка ҡоралы. Башҡорт думбыраһының төҙөлөшөнә, "муйын"ының (грифының) оҙонлоғона ҡағылышлы төрлө фекерҙәр йөшәй. Был музыка ҡоралын халкыбыҙ ҡасан файҙалана башлағандыр, уныһы ҡараңғы, әммә, XVII-XVIII быуаттарҙа, халыкты ихтилалдарға өндәйҙәр, тигән һылтау менән сәсәндәрҙе эҙәрлекләү сәйәсәте үткәрелеү мәлендә батша власы тарафынан сәсәндәр ҙә, уларҙың думбыралары ла юҡ ителгән. Шуға ла боронғо думбыралар бөгөн һаҡланмаған. 1980 йылдарҙа билдәле халыҡ оҫтаһы Вәкил Шөғәйепов, һаҡланып ҡалған тарихи мәғлүмәттәрҙе өйрәнеп, башҡорт думбыраһын ҡайтанан тергеҙеү эшен башлап ебәрә. Уның тәжрибәһенә таянып, Өфө дәүләт сәнғәт институтында думбыра эшләү оҫтаханаһы асыла. Яйлап думбыралы уйнау традицияһы яңы һулыш ала. Сәнғәт институтында халыҡ музыка ҡоралдары кластарында белем алған, шул иҫәптән думбырала уйнарға өйрәнгән йәш музыканттар барлыҡҡа килә. Думбыраны күберәк етештереү зарурлығы тыуа. Вәкил Шөғәйепов өлгөләрен ҡулланып, үҙенең тәүге думбыраһын эшләп ҡарап, яйлап башҡорт думбыраһының тышҡы төҙөлөшөнә, яңғырашына үҙ өҫтәмәләрен индереү кимәленә еткән ҡунағыбыҙ - республика, Рәсәй һәм халыҡ-ара конкурстар лауреаты, ҡурайсы, думбырасы, өҙләүсе, композитор, думбыра эшләү оҫтаһы Илһам БАЙБУЛДИН менән әңгәмәләшәбеҙ бөгөн.**

# ДУМБЫРА СЫҢЫ...

## тарихтан ауаз бирә

**➔ Республикала һеҙҙе күптәр композитор ҙа, думбыра эшләүсе оҫта ла тип белә. Думбыра эшләүгә тотоноуығыҙға нимә, йәки кем сәбәпсе булды?**

- Минең Өфө дәүләт сәнғәт институтында уҡыған йылдарым республикабыҙҙа ҡурайҙа, айырыуса думбырала уйнау традицияһы сәскә атҡан дәүергә тура килде. Мин Ришат Рәхимовтың ҡурайсылар класында белем алдым. Думбыраға килгәндә, ул музыкаль белем биреү учреждениеларындағы программаға 90-сы йылдарҙа ғына индерелә башланы. Аңлашылалыр, тәүге осорҙа уйын ҡоралдарына ҡытлыҡ ҙур ине. Ләкин барыбер уйнағы килә. Минең ағас эшенә дәрт электән үк бар ине. Гитаралар эшләп ҡарағаным да булды. Уҡыуҙы тамамлағас, "Ә нинә думбыраны үҙемә эшләп ҡарамаҫҡа?" тип уйлап алдым да, Вәкил ағай Шөғәйеповтыҡынан күсереп, ҡарама ағасы киҫәген уйып, өңөп, беренсе тапҡыр боронғоса формала думбыра эшләнем. Һуңынан тәжрибә туплай-туплай, интернеттан ҡарап, ҡайһы бер ҡаҙаҡ оҫталары менән аралашып, уларҙың эш ысулдарын өйрәнеп, күңелемә ятышлы ғына думбыралар эшләй башланым. Хәҙер думбыраларҙың тауышы өҫтөндә эш алып барам. Думбыра ул думбыра һымаҡ тауыш сығарырға тейеш. Ысын думбыраның ҡылдарын да, хатта ҡыл баҫмаларын да сүстән (мин әле балыҡ ҡармаҡлау өсөн ҡулланылған сүсте ҡулланам) яһарға тырышам. Хәҙер күп кенә төрки халыҡтары оҫталары думбыра ҡылын ошо ысул менән эшләй - ҡармаҡ сүсе ҡуя. Ә музыка мәктәптәре өсөн әҙерләнгән думбыраларҙы иһә, тимер баҫмалар менән эшләйҙәр. Нисек кенә маҡтама - тимерҙең тауышы барыбер тимерсә сыға инде ул. Ә нейлон сүс беҙҙең боронғо башҡорт моңона, ҡурайға ла ятышлы көй килтереп сығарырға ярҙам итә.

**➔ Думбыра эшләү шөғөлөгөҙгә музыкаль белемегеҙ нисек ярҙам итә?**

- Музыкант булыу минә бик уңайлы, әлбиттә. Думбыраны эшләй торғас, ул ҡоралда үҙем дә арыу ғына һуплай башланым. Эш барышында бүтән оҫталар менән дә кәңәшләшергә, уларҙың фекеренә ҡолаҡ һалырға тырышам. Заказ биргән кешенең теләген дә иҫәпкә алмай булмай беҙҙең эштә. Әлеге ваҡытта думбыраны тауыш яғынан да, форма яғынан да тағы ла яҡшыртыу өҫтөндә эш алып барам, тигәйнем инде. Форма тигәндәй, тышҡы төҙөлөшө буйынса боронғоса - овал формаһында улар. Алтайҙарҙың, ҡаҙаҡтарҙың думбыраһы ла ошо формала. Беҙ, башҡорттар, әллә ҡайҙа йәшәмәйбеҙ - ошо халыҡтар менән аралашып йәшәйбеҙ. Беҙҙең дә думбыра шундай булған ул, тим мин. Бында икеләнеүҙәргә урын да юҡ. Сөнки быуаттар буйына эшләнеп килгән музыка ҡоралы һәр осорҙа ниндәйҙер камиллашыу үткән. Камиллашыу үтеп, ошондай форманы алған. Думбыра һаман да үҙгәрә. Күптәр хәҙер элеккесә ағасты өңөп эшләмәй, ә йәбештереп эшләй. Бында заманса электр ҡоралдар ныҡ ярҙам итә. Шулай ҙа боронғоса итеп эшләүсе оҫталар ҙа бар. Ҡайһы бер думбыраларҙы мин дә боронғоса өңөп эшләйем. Варианттар төрлө-төрлө: осҡағанын һайлап, йәнең теләгәнен эшләтергә мөмкин. Балаларға - бәләкәй "муйын"лыһын тәҡдим итәм. Әйткәндәй, минең думбыраларҙың грифтары оҙон. Стандарт, тип, ҡыҫҡа грифлы думбыраны ла күп эшләйҙәр былай. Әммә был юҫыҡта минең үҙ фекерем бар. Егет кешегә, ҡыҫҡа грифлы ҡорал тотоп торғансы, оҙон "муйын"лыһын тотоуы нығыраҡ килешә, минеңсә. Ул матурыраҡ та, мәртәбәлерәк тә. Институтта ла был турала әйткәнем булды. Оҙон грифка өҫтөнлөк биреүемдең тағы бер етди сәбәбе бар. Бынығы - техник сәбәп. Ҡыҫҡа "муйын"лы думбараларҙа, ғәҙәттә, медиатор (һуғыу өсөн эшләнгән махсус әйбер) менән уйнайҙар. Бының менән килешеүе ауыр. Сөнки медиатор менән уйнағандың яңғырашы, бармаҡ менән уйнағанға ҡарағанда, башҡаса. Бөтөн төрки халыҡтарында ла думбыраны бармаҡ менән һуғып уйнайҙар.

Музыкаль ҡоралдар эшләгәс, уларҙа уйнай белеү ҙә талап ителә. Ундан артыҡ музыка ҡоралында уйнайымдыр, моғайын. Ҡурай, думбыра, ҡумыҙ, ҡылҡумыҙ, баян, фортепиано, гитара, мандолина, дөңгөр, барабан, бас-гитара... Һәр бер яңы музыка ҡоралында тиҙ генә өйрәнеп алам. Компьютерҙа музыкаға аранжировкалар эшләйем. Институтты тамамлаған осорҙа, ниндәй һөнәр эйәһе булырға, тигән һорау тыуғас, ике юл сатында ҡалыуымды аңланым. Береһе - аранжировка менән шөғөләнеү булһа, икенсеһе - думбыра эшләү. Думбыраға күңел нығыраҡ тартты. Шулай итеп, күпселек ваҡытым хәҙер концерт залдарында йә тауыш яҙҙырыу студияһында түгел, ә оҫтаханамда уҙа. Музыкант булғас, уйнарға ла, ҡайһы бер фестивалдәргә сығырға ла тура килә.

**➔ Һеҙ музыкаль төркөмдәр менән дә сығыш яһайһығыҙ, ахыры?**

- Өҙләүсе, ҡурайҙа, думбырала, ҡылҡумыҙҙа уйнаусы көслө музыканттар менән "Ирәмәл" тигән төркөмгә ойошоп, сығыш яһайбыҙ. Рәйес Низаметдинов менән берлектә -"Сал Урал", район ҡурайсылары менән - "Мағаш", тағы бер төркөм музыканттар менән "Санай" төркөмөндә сығыш яһайбыҙ. "Санай" менән Рәсәйҙең күп өлкәләрендә, Төркиәлә булдыҡ. Хәҙерге ваҡытта думбырала башҡортса уйнау ысулын асыҡ сағыллдырған яҙмалар эшләйбеҙ. Маҡсатыбыҙ - ошо моңдо халыҡҡа еткереү. Әле Өфө дәүләт сәнғәт академияһында



Илдар Шакиров исемле бик шәп думбырасы егет уҡып йөрөй, уның менән думбырала, шулай уҡ ҡалған музыка ҡоралдарында яҙмалар эшләп, бәлки, ҡайһы бер концерттарҙа ла сығыш яһарбыҙ, тигән ниәт бар. Илдар - Силәбе башҡорто, Минйәр ҡалаһынан.

**➔ Хәҙерге глобалләшеү осоронда беҙҙең милли музыка ҡоралдарыбыҙға, милли моңобоҙға ҡурҡыныс янамай, тип әйтеп буламы?**

- Әлбиттә, хатта ҙур ышаныс менән әйтеп була. Мәҫәлән, беҙҙең ҡурай, думбыра менән ҡайҙа ғына барып сығыш яһаһаң да, бөтөн халыҡтың иҫе китә. Беҙҙең боронғолоҡто күреп, боронғо музыканан килгән энергетиканы тойоп, кеше беҙҙе таный. Беҙҙең милли йөҙөбөҙ тап ошо халыҡ көйҙәрендә сағыла ла инде. Әгәр уны беҙ башҡаларға, киләһе быуынға еткерә алһаҡ, юғалып ҡалмаҫбыҙ. Әгәр инде заман шауҡымына эйәреп китһәк... Хәйер, заман шауҡымдары ла үҙ яйы менән яуай бара, әлбиттә. Ләкин ул беҙгә конкурент түгел. Ул шауҡымдар бит ҡурай һымаҡ, халыҡ көйө һымаҡ оҙаҡ йәшәй алмай. Шуға, тап ошо боронғо көйҙәребеҙ беҙҙең башҡортлоҡто киләсәккә илтә, тимәксемен.

**➔ Музыканың ниндәй ыңғай тәьсирен билдәләр инегеҙ? Классик музыка тыңлаған балалар дәрестәрен һәйбәтерәк әҙерләй, тигән фекер бар ул барлығын. Бының дөрөҫлөгөнә ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла була, әлбиттә, шулай ҙа башҡорт милли музыкаһының берәй тәьсирен тойғанығыҙ бармы?**

- Мин үҙем дә Сәйетбабала, Красноусолда музыка дәрестәре алып барам. Кем сәхнәгә сығып, ҡурайҙа уйнай, бейей, башҡорт сәнғәтенә яҡын йөрөй - шул бала рухлы, халыҡҡа файҙа килтерерҙәй булып үҫә. Ундайҙар сит-ят йоғонтоға ла бирелә һалып бармай. Сөнки сәнғәттә үҙенсәлекле вибрация бар. Ә ул кешене бер йолоп алдымы - ебәрмәй, үҙ солғанышында тота. Тәбиғи тауышты ишеткән, уның солғанышында йәшәгән кеше тәбиғи гармония менән йәшәй. Шуға, минең уйлауымса, сәнғәткә яҡын балалар барыбер тәрбиәлерәк була, тормошта үҙ урынын еңелерәк таба. Әлбиттә, кемдәр бейеү, ҡурай түңәрәктәренә йөрөй, шулар спортта ла, башҡа фәндәрҙә лә алдыра. Ул балалар бөтөн түңәрәктәргә лә өлгөрөргә тырыша. Ә кем сәнғәткә әллә ни ылыҡмай - кеше менән һөйләшкәндә лә оялсан була.

**➔ Музыкалағы ритмды тойоу кешегә тормошон көйләргә ярҙам итәме? Шиғыр яҙыр өсөн дә ритмды тойорға кәрәк бит...**

- Әлбиттә, мин дә ҡайһы берҙә ҡурай өсөн көйҙәр яҙам. Һүҙҙәр кәрәкһә, уларын да үҙем яҙып һалам. "Һы... Тырышһаң, был да килеп сыға икән", тип аптырап ҡуйған саҡтар ҙа булды. Әлбиттә, ижад эшенә ваҡыт та, талапсанлыҡ та кәрәк. Ул ғына ла түгел, музыкант бармаҡтарын өйрәткән кеүек, рифмаларҙы



ла тәҙәү, ҡалыплашып, шиғыр ҡойоуҙы ла үҫтерергә була. Рәйес Низаметдинов та бер тапҡыр: "Урал батыр" эпосын ятлаһаң, рифмалар үҙенән -үҙе тел осона килә", - тине. Сәсәндәр әйтешкән саҡта бер-береһенә рифмалы, аллитерациялы һүҙҙе шулай әйткәндер. Гел генә шиғыр уҡыһаң, мейе шәберәк эшләй һәм төрлө рифмалар һалына башлай бит. Шиғырҙы ни тиклем күберәк уҡыйһың, рифмалар һинә шул тиклем нығыраҡ һеңә. Һөҙөмтәлә, уның нисек яһалыуын аңлайһың. Музыкала ла шулай. Бер тауыш сыҡһа, гармония буйынса икенсе тауыш нисек булырға тейешлеген алдан белеп, тойоп тораһың. Гармонияны тойоу ана шул ритмды тойоуҙан да килә. Кешенең ниндәйҙер тойомлау һәләте бар икән, ул кеше музыкант та, шағир ҙа, башҡа шундай ижади ҡараш талап иткән һөнәр эйәһе лә булып китә ала, сөнки ул ерҙең ниндәйҙер икенсе мәғлүмәт яланына тоташа.

Бер мистик китап уҡығайным. Унда шамандар тураһында телгә алына. Бер шаман уға шиғыр уҡығандарын тыңларға ярата икән. Унан: "Нинә шиғыр тыңларға яратаһың?" - тип һорауҙарына, ул: "Шағирҙар саҡ ҡына икенсе киңлектә йөрөй, ритмды тоя, ритм менән, үҙе лә аңламайынса, икенсе энергетик яландан мәғлүмәт ала", - тип яуап бирә. Алтайҙа, Ҡалмыҡстанда эпос һөйләүсе-

***✓ Бер ниндәй глобалләшеү ҙә беҙҙең эпостарыбыҙҙы, халҡыбыҙҙың көйҙәрен бөтөрә алмаҫ. Донъяла икешәр октава ярымлыҡ көйлө башҡа бер ниндәй ҙә халыҡ юҡ. Беҙҙең йырҙарҙы хатта итальяндар йырлай...***

ләр менән һөйләшкәндә бер алтайлы: "Мин һөйләгәндә эпоста барған ваҡиғаларҙы күҙ алдымдан үткәрәм", - тигәйне. "Урал батыр" эпосын һөйләгәндә лә сәсәндәр боронғо мәғлүмәт яланындағы мәғлүмәтте тойоп, боронғо ғилемгә эйә булғандыр, тип уйлайым. Боронғо белем юғалып ҡалмаған - ниндәйҙер мәғлүмәт яланында тороп ҡалған. Уны хәҙерге кеше аса алһа, шағир, сәсән булып китергә мөмкин. Шул яҡтан да глобалләшеү беҙгә ҡурҡыныс түгел. Мин әле телгә алған кешеләр булған, бар һәм буласаҡ. 90-сы йылдарҙа ла, совет осоро үткәс, ниндәй күтәрелеш китте - барыһы ла боронғоға төшә башланы. Шуға ла мин, беҙгә глобалләшеү янамайҙыр, тип уйлайым. Ниндәйҙер кимәлдә, ул, бәлки, булыр ҙа, әммә барыбер боронғолоҡҡа кире ҡайтасаҡбыҙ. Бөтөн кешене лә бер ҡалыпҡа һалып булмай ул. Сит илдең сәйәсәте, йәштәр ни тиклем аңһыҙыраҡ, бер мәҙәниәтле, улар өсөн был шул тиклем ҡулайлы, тигән принципҡа ҡоролған. Был аҡса эшләү өсөн кәрәк уларға. Ләкин донъяла шағирҙар, сәсәндәр, үҙенең артынан әйҙәүсе кешеләр барыбер тыуып тора. Боронғолоғо булған халыҡ юғалып ҡалмаясаҡ. Бер ниндәй глобалләшеү ҙә беҙҙең эпостарыбыҙҙы, халҡыбыҙҙың көйҙәрен бөтөрә алмаҫ. Донъяла икешәр октава ярымлыҡ көйлө башҡа бер ниндәй ҙә халыҡ юҡ. Беҙҙең йырҙарҙы хатта итальяндар йырлай... Италия кешеләре үҙҙәренең көйҙәре менән ғорурлана, әммә башҡорт халыҡ көйҙәренә, Абдулла Солтанов ағайҙың йырҙарына уларҙың бөтөнләй һуштары китә. Буранбайҙы йырлар өсөн шундай диапазонлы тауыш кәрәк - ул бер октавалы ғына йыр түгел. Шул хәтлем аһәңле көйҙәр, йырҙар ижад иткән халыҡ барыбер йәшәйәсәк.

**➔ Халыҡ йырҙарының авторҙары билдәһеҙ, әммә улар ҡасандыр билдәле булған, йәшәгән бит инде. Ә хәҙер халыҡ йыры кимәленә етерлек йырҙар ижад итеүсе композиторҙарыбыҙ бармы?**

- Был турала ла уйланғаным булды. Ҡурайҙа ныҡ ҡына шөғөлләнгән бер осорҙа үҙемдән-үҙем халыҡ көйҙәренә тартым көйҙәр килтереп сығара башланым. Минең "Аласабыр", "Байбулды көйҙәре" һымаҡ бер-нисә көйҙө ҡурайсылар халыҡ көйө һымаҡ итеп уйнап йөрөй. Йәштәр ул көйҙәрҙең авторы барлығын бөтөнләй белмәй, халыҡ көйө, ти ҙә ҡуя. Ҡурайсылар араһында сәсәнлек тип әйтәйекме, композиторлыҡмы - ул күренеш бар. Композиторҙар һәр быуында бар. Әле генә бер апай миңә боронғо стиль менән яҙылған "Күк дүнән" исемле йырҙы йырлап ишеттерҙе. Тыңлап тороуға, боронғо йыр һымаҡ. Ә йыр - композиторҙыҡы. Шуға, юҡ тиһәң дә, бар улар - киң таралыу ғына тапмаған.

**ЙОМҒАҠЛАП...**

**Һүҙ ахырында, халҡыбыҙ моңон һаҡлай алырбыҙмы, тигән һорауға үҙенсә яуап эҙләгән бер шиғыр юлдары иҫкә төштө.**

*Һаҡларбыҙмы хазинаны? -*
*Башта һорау төйөлә.*
*Аҫыл халҡым иҫән булһа,*
*Мәңге тынмаҫ көйө лә...*

**Тағы. Ҡауын тәмен уны бер тапҡыр ҙа тәмләп ҡарамаған кешегә, нисек кенә тырышһаң да, һүҙ менән аңлатыуы мөмкин түгел. Шуның һымаҡ, башҡорт көйө, башҡорт моңо, тигән төшөнсәне гәзит биттәрендә күпме генә яҙһаң да, бер ишетмәй тороп, күңелгә, йөрәккә индереү мөмкин түгелдер. Шуға, тыңлайыҡсы көйҙәребеҙҙе. Ҡурайҙы, думбыраны, дөңгөрҙө, ятағанды, ҡыл-ҡумыҙҙы, ҡумыҙҙы, өҙләүҙе тыңлайыҡ.**

**Иҙел РӘХИМОВ**
**әңгәмәләште.**

*РУХИӘТЕБЕҘ АСЫЛЫ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТ КЕЙЕМДӘРЕН...

## Ишембайға барып күрегеҙ!

**XVIII-XIX быуаттарға ҡараған "Башҡорт һылыуҡайы"ның 4 образы һәм ҡашмау кейгән, йәғни, кейәүҙә булған ҡатын-ҡыҙҙарҙың 3 кейем өлгөһө "Киске Өфө" гәзитендә (21-се, 23-се һандарҙа) баҫылғайны инде. Бөгөн беҙ гәзит уҡыусыларға 3 боронғо ҡатын-ҡыҙ образын, һуңғараҡ 4 төрлө йәштә кейелә торған костюмды, башҡорт аҡһөйәктәренең 2-3 легендар, хатта алтын кейемдәрен тәҡдим итербеҙ. Алдан уҡ әйтеүебеҙсә, был кейемдәр тарихи ысынбарлыҡҡа тап килә, тип раҫлай алмайбыҙ, уларҙы беҙ әле һаман тулыландырабыҙ.**

2500 йыл элек йәмғиәт менән ҡатын-ҡыҙҙар идара иткән. Уларҙың биҙәүестәре лә бай һәм матур булырға тейеш булған. Иҫ киткес ҡиммәтле металл - баҡырҙы ир-егеттәр үҙҙәренең юлбашсыһына биргән. Археологияла был биҙәнеү гарнитуры "Ҡара Абыҙ мәҙәниәте портупеяһы" (портупея - хәрби кейемдең бер өлөшө, төрлө киңлектәге һәм оҙонлоҡтағы ҡайыштан ғибәрәт. Уны билдә ҡорал йөрөтөү өсөн ҡулланалар - **Ред.**) тигән атама менән билдәле (**фото**). Был мәҙәниәт яҡынса 800 йыл йәшәгән.

2000 йыл элек ир-аттар технологик үҫеш һөҙөмтәһендә ныҒыраҡ тимерҙән әйберҙәр эшләргә өйрәнгән. Был тимер ҡылыс, һөңгө өсөн генә ҡулланылмаған, унан ятраҡан ҡатындарына биҙәүестәр ҙә яһағандар. Беҙ һеҙгә ырыу башлығы ҡатынының биҙәнеү әйберҙәрен тәҡдим итәбеҙ (**фото**). Уның кейеме нисек булғаны билдәле түгел, әммә музейҙа күп кенә аҫылмалы бронза әйберҙәр күп, тиҙҙән был кейемдең реконструкцияһына тотонасаҡбыҙ. Әммә бер предмет - бронзанан (баҡыр менән ҡурғаш иретмәһе) һәм тимерҙән яһалған ҡайыш ҡаптырмаһы барыһын да хайран ҡалдыра. Археологтар донъяла башҡа бер ерҙә лә быңдай ҡаптырма осратҡаны юҡ. Фәндә ул "Пьяный Бор мәҙәни-тарихи йәмғиәте портупеяһы" булараҡ билдәле.

Алтын буға һыны Иҙел буйы төрөктәренең баш ҡалаһында символ булып иҫәпләнгән. Буға халыҡтың мул тормошта йәшәүен символлаштырған. Был символ борондан килгән һәм Вавилон ваҡытынан билдәле булған. Шулай уҡ грек ритоны (хайуандың мөгөҙө формаһындағы балсыҡ һауыт - **Ред.**) йәки муллыҡ мөгөҙө билдәле. Уның өҫкө яғы мотлаҡ буға башы формаһында булған. Алтын һын монгол яуы мәлендә юҡҡа сыҡҡан. Уны һаман да эҙләйҙәр. Башҡорттар был бай ҡала менән иҡтисади һәм мәҙәни бәйләнештә булғанға күрә, Мәләүез ҡалаһы эргәһендә табылған һын аптыратмай ҙа (**фото**). Ул - муллыҡ мөгөҙөнөң өҫкө өлөшө. Борон башҡорттарҙа яҙын көтөү тәүге тапҡыр ҡырға сыҡҡанда башҡарылған бер йола булған: тирмәнең бауҙарын ергә түңәрәктәр яһап һалып сыҡҡандар. Абруйлы бер ҡатын ҡулына бала йәки бәрәс алып, һамаҡлап, ошо лабиринттан үткән. Был малдың ишәйеүенә, балалар тыуыуына, ырыуҙың артабан да сәскә атасағына бағышланған. Йола Ислам дине ҡабул иткәнгә тиклемге осорҙан һаҡланған. Интернетта ошондай сюжет та табылды, ундағы ҡатын башына конус формаһындағы бейек башлыҡ кейгән. Башлыҡты бер бөтөн итеүсе осо ғына юҡ, шуға ла баяғы буға башы уны тамамлап тороусы деталь булып сыҡты (**фото**). Эш әле тамамланмаған, әммә был тылсымсы образы бик матур килеп сыҡты, ахыры. Һуҡма ҡоралына һуғып, ул яуызлыҡты ҡурҡыта, йырҙары менән Хоҙай бәрәкәтен йәлеп итә. Уға бер ҡағылһаң да, бәхет һәм муллыҡ килә. Һәр хәлдә, боронғолар быға бик ышанған.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Ишембай милли мәҙәниәттәр үҙәгенең "Юрматы" Йәмәғәт этнография музейы тураһындағы мәғлүмәттәр "Киске Өфө" гәзитендә баҫылғас, төрлө һорауҙар менән мөрәжәғәт итеүселәр йышайҙы. Шуларҙың ҡайһы берҙәренә яуап биргем килә. Музей - йәмәғәт ойошмаһы. Уны бер кем дә финансламай, уның хеҙмәткәрҙәре лә, махсус бинаһы ла юҡ. Ул күсмә музей форматында эшләй. Экспонаттарҙы ҡарау - бушлай. Тик музейҙы үҙенә саҡырған төбәк барлыҡ сығымдарҙы үҙ өҫтөнә алырға тейеш. Волонтерҙарҙың күбеһе Ишембайҙың 2-се башҡорт гимназияһы һәм 15-се мәктәп уҡыусылары, тап улар ижади идеяларҙың авторы ла.**

**Владимир БЕССАРЕНКО,**
**"Юрматы" Йәмәғәт этнография**
**музейы хеҙмәткәре.**
**(Дауамы. Башы 21-се, 23-сө һандарҙа).**



*Муллыҡ мөгөҙөнөң өҫкө өлөшө.*



*Бронза быуат. Ҡара абыҙ мәҙәни йәмғиәте. Модель : В. Камалова.*



*Иртә тимер быуат. Пьяный Бор мәҙәни-тарихи йәмғиәте. Модель: В. Камалова.*



*Йола башҡарыусы ҡатын. Модель: Е. Солдатова.*

ИНТЕРНЕТТАН



# АУЫРТЫУҘЫ...
## көлөү дауалай

■ Көлөү - ғүмерҙе оҙайтып ҡына ҡалмай, ауыртыуҙы ла баҫа икән. Ғалимдар асыҡлауынса, кеше көлгәндә эндорфиндар - тәҙәлөшө буйынса опиаттарға оҡшаған үҙенсәлекле химик берләшмәләр бүленеп сыға. Был матдәләрҙе икенсе төрлө "шатлыҡ гормоны" тип тә йөрөтәләр. Физик күнекмәләр мәлендә лә ошо уҡ яҡшы кәйеф гормондары бүленә. Ауыртыу - организм өсөн ауыр көсөргәнеш, шуға ла көлөү ауыртыу синдромы мәлендә алыштырғыһыҙ ярҙамсы булып сыға. Оксфорд университеты ғалимдары билдәләүенсә, көлөү эндорфиндар бүленеп сығыуҙы әүҙемләштереп, ауырытыуҙы баҫа ала. Тик быныһ өсөн көлөү ихлас булырға тейеш. Тикшенереүҙәрҙә ҡатнашыусыларҙың бер төркөмөнә - комедиялар, икенсеһенә йәнлектәр, тәбиғәт, хаҡындағы фәнни фильмдар, гольф уйыны буйынса инструкциялар күрһәткәндәр. Кемдәр комедия ҡараған, улар ауыртыуҙы бөтөнләй тиерлек тоймаған. Шуға ла көлөү - ауыртыуҙы баҫа торған тәбиғи сара, ти ғалимдар.

■ Кешенең тән массаһы индексы физик әүҙемлек, ҡулланылған калориялар иҫәбе кеүек факторҙарҙан тыш, уның дингеҙ кимәленән ниндәй бейеклектә йәшәүе лә йоғонто яһай. Был күрһәткес ни тиклем юғары, кешенең артыҡ ауырлыҡ йыйыу хәүефе лә түбәнерәк. Мэриленд университеты ғалимы Джеймс Восс Колорадо штатында йәшәүсе 400 мең кешене тикшергәндән һуң шундай һығымтаға килгән. Ғалимдар билдәләүенсә, был феномендың сәбәбе булып кешенең буйы, аппетиты, тәүлегенә нисә калория яндырыуы өсөн яуап биреүсе гормон тора.

■ Фунготерапия - медицинаның бәшмәктәрҙең дауалау үҙенсәлектәрен һәм уларҙың ауырыу кешегә нисек тәьҫир итеүен өйрәнеүсе йүнәлеше шулай атала. Был атама латин һүҙенән килеп сыҡҡан һәм "бәшмәк" тип тәржемә ителә. Бәшмәктәр ярҙамында ауырыуҙарҙы борондан дауалайҙар. Хатта билдәле дауалаусы Ву Син төҙөгән махсус трактат та бар. Ул унда Япония менән Ҡытай территорияһында үҫкән бәшмәк төрҙәрен һүрәтләй. Ву Син фекеренсә, бәшмәктәр үләндәргә ҡарағанда ла шифалыраҡ. Мәҫәлән, шиитаке тигән бәшмәкте ул бәшмәк женьшены тип атай. Медицина белгестәре фекеренсә, был бәшмәк яман шеште лә дауалай. Бәшмәктәр хәтерҙе нығыта, уларҙа фосфор, нервы системаһын нығытыусы В төркөмө витаминдары күп.

■ Күпме генә күнекмәләр яһама, мускулдарҙы йәш килеш һаҡлап булмай, тип белдерә Лафборо университеты профессоры Джэми Тиммонс. Уның фекере буйынса, даими күнекмәләр кешегә мускулдарҙың көсһөҙләнеү процесын туҡтатырға мөмкинлек бирмәй, сөнки быныц сәбәбе физик әүҙемлек етешмәүҙә түгел. Тикшереүҙәрҙә ҡатнашыусыларҙың 25 процентына физик күнекмәләр бөтөнләй тәьҫир итмәүе асыҡланған. Ғалим әйтеүенсә, ҡайһы берәүҙәргә күберәк йоҡлау һәм дөрөҫ туҡланып, артыҡ калорияларҙы йыймау мускулдарҙы формала тотоуҙың иң ябай һәм дөрөҫ юлы булып ҡала.

■ Теге йәки был ауырыуҙан үҙ белдеге менән дарыу һайлағанда кеше иң тәүҙә препараттың төҫөнә һәм исеменә иғтибар итә икән. Һиндостан ғалимдары әйтеүенсә, кешеләр бигерәк тә ҡыҙыл һәм алһыу таблеткаларҙы һатып алырға тырыша. Тикшереүҙәрҙә ҡатнашыусыларҙың 14 проценты алһыу таблеткаларҙы ҡыҙылдарына ҡарағанда татлыраҡ, тип тапҡан. Һары төҫтәге дарыуҙар - тоҙло, ә ҡыҙғылт һарылары әсерәк тойолған.

ХӘТЕРКИТАП

# СӘМӘРӘ



**Ай аҙағында ауылыбыҙға Байым директоры Хәкимйән ағай килеп төштө. Район мәғариф бүлеге уға Сәйетбаттал башланғыс мәктәбе уҡыу йылын нисек башлап ебәреүен белешергә ҡушҡан икән. Хәкимйән ағай дәресемә инде, уға ҡыҫҡа ғына баһа бирҙе. Ҡулымды ҡыҫып, "афарин" тигән һүҙ әйтте. Бүлмәләребеҙҙең бөхтәлегенә, ихатабыҙҙың төҙөклөгөнә һоҡланыуын йәшереп торманы. Лапаҫ аҫтына ингәс, теҙеп һалынған утынға ҡарап, бер килке һүҙһеҙ торҙо. Башын сайҡап бер аҙ торҙо ла: "Былай ҙа ҡупшылап өйөлгән утынды күргән юҡ ине әле", - тип һөйләнә-һөйләнә яңынан ихатаға сыҡты.**

Мәктәп эштәрен бөтөрөүебеҙгә Сәмәрә апай килеп етте. "Хәкимйән ағай, әйҙәгеҙ, Самат ҡусты менән сәйгә инеп сығығыҙ", - тип, беҙҙе өйөнә алып ҡайтып китте. Беҙ ҡаршылашып тормаһыҡ, сөнки төшкө аш мәле еткәйне. Сәмәрә апайҙың йорто оләсәйемдең өйө менән мәктәп араһының ҡап уртаһында урынлашҡан булып сыҡты. Бейек нигеҙгә ҡоролған йорт беҙҙе яҡты тәҙрәләре менән тәбриклəп ҡаршы алды. Ҡыйыҡлы ҡапҡа аша таҙа итеп һепәрелгән ихатаға индек. Ҡаршыбыҙҙағы матур итеп өйөлгән утынға иғтибар иттек. Уны кем теҙеп сыҡҡанды мин белә инем инде.

Солан аша үтеп, ҙур ғына бүлмәгә килеп индек. Һул стенаға терәтеп ҡуйылған өҫтәл өҫтөнә ашамлыҡ теҙелгәйне. Унан арыраҡ ҙур ғына урындыҡ күренде. Өҫтөнә ҡулдан һуғылған ҡыҙыл-йәшел һыҙатлы балаҫ йәйелгәйне. Шул урындыкта аҡ күлдәк өҫтөнә ҡуйы күк төҫтәге пинжәк кейгән ағай ултыра. Хәкимйән ағай, уға эйелә биреберәк, оло хөрмәт менән ҡулын ҡыҫты. Ағайҙар бер-береһе менән күптән таныш икәнен мин шунда уҡ аңланым. "Ағайың быйыл 95 йыл инде атлай алмай ултыра. Барып иҫәнлек-һаулыҡ һораш", - тип шыбырланы миңә Сәмәрә апай.

Байымдың директоры урындыҡ эргәһенән китеү менән уның урынына мин барып бастым. Сәмәрә апайҙың тормош иптәше, йылмайып, миңә ҡулдарын һуҙҙы - мине күреүенә ул ысын күңелдән шат ине. Мин уның аҡһыл көрән төҫтәге түңәрәк йөҙөнә, ап-аҡ итеп йыуылған күлдәгенә иғтибар иттем. Ағай кейгән пинжәктең уң яғаһына Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены беркетелгәйне. Тышҡы кейеменә, холоҡ-фиғеленә ҡарап, ағайҙың эскерһеҙ, саф кеше булыуын шунда уҡ аңлап алдым. Осрашыуыбыҙҙың тәүге мәленән алып аҙағынаса уның йөҙөнән оялсанлыраҡ йылмайыу өҙөлмәне.

Ҡайтҡас, оләсәйемдән һорашып, шуны белдем: Сәмәрә апайҙың ире замаһында атаҡлы тракторсы булған икән. Эшенә намыҫ менән ҡарағанлыҡтан, техника менән һаҡсыл эш иткәнлектән, уның даны Баймаҡ районына ғына түгел, бөтә Башҡортостанға таралған булған. Бынан дүрт йыл элек, ҡышҡы селлә мәлендә, тракторы боҙолоп, ул кеше-фәлән йөрөмәгән урман юлында яңғыҙ тороп ҡала. Сылбырлы трактор, ҡорһағы менән ҡарға терәлеп, хәрәкәтһеҙ ҡатып ҡалғас, тимер аттың хужаһы тәрән уйға сума. Ни эшләргә: йәйәү ҡайтып, ярҙам һорарғамы, әллә ошонда йүнәтеп ҡарарғамы эшлектән сыҡҡан техниканы? Боҙолған урындың ҡайҙа икәненә шунда уҡ төшөнә тәжрибәле механизатор: ул сылбырлы тәгәрмәстәр араһында, аҫта, булырға тейеш. Ҡулына көрәк алып, кәрәкле урынды таҙарта. Шунан үҙе эшләгән өңгә инеп, тракторҙы йүнәтергә тотона. Тирләп-бешеп көрәк менән ҡар ташлағандан һуң, туң ергә ятып эшләргә тура килә уға. Именаман Ҡуяндарға ҡайтып етә ул, ләкин тәндә ҡаты ауырып китә. Һөҙөмтәлә ҡаүҙәһенең аҫҡы өлөшө хәрәкәтһеҙ ҡатып ҡала.

Хәкимйән ағайҙың эргәһенә, һый тулы өҫтәл янына, барып ултырҙым. Шул саҡ таҡта менән бүлеп алынған аш-һыу бүлмәһенән Сәмәрә апайҙың өлкән ҡыҙы килеп сыҡты. Ҡулына кескәй генә ашъяулыҡ тотҡайны ул. Уны атаһының алдына йәйҙе лә лә кире аш бүлмәһенә инеп китте. Шунан, ҡулына аш һалынған тәрилкә тотоп, бәләкәй ҡыҙ килеп сыҡты. Ҡайһы яҡҡа атларға белмәйенсә, бер аҙға туҡтап ҡалды. әсәһенә һораулы ҡараш ташланы. Сәмәрә апай һүҙһеҙ генә, "эйе" тигәнде аңлатып, башын һелкте. Ҡыҙы аңланы: тәүге тәрилкәне атаһының алдына алып барып ултыртты. Беҙгә лә сират килеп етте: тәүҙә Хәкимйән ағайҙың алдына аш ҡуйылды. Шунан мин дә ашлы булдым.

Өҫтәлдәге һыйҙың мул булыуына, һәр ризыктың нәзәкәтле итеп әҙерләнеүенә иғтибар иткәйнем инде. Нимә генә юҡ ине алдыбыҙҙа! Иң уртаға эре күҙәнәкле күпереп бешкән икмәк ҡуйылғайны. Уның уң яғына ҡыҙған майҙа бешерелгән өс мөйөшлө ваҡ ҡына бәлештәр теҙелеп киткәйне. Һул яҡта шул уҡ ысул менән әҙерләнгән оҙонса бәлештәр урын алғайны. "Уңдағы бәлештәр картуф менән, ә һулдағылары йөмортҡа һәм йәшел һуған менән, - тине Сәмәрә апай. - Күңелегеҙ ниндәйен теләй, шуныһын ашағыҙ". Аптыраткан шул булды: бәлештәрҙең ҙурлығы ла, тышҡы күренеше лә бер иш ине, әйтерһең, уларҙы ниндәйҙер машина ҡалыпҡа һалып эшләгән. Тағы шуныһы - бөтәһе лә гәрәбә кеүек аҡһыл-һарғылт төҫкә инеп бешкәйне. Янып-көйгән бер генә бәлеш тә юҡ ине улар араһында.

Эре күҙәнәкле икмәктән арыраҡ өҫдүрт төрҙә ҡаймаҡ һалынған касалар теҙеп ултыртылғайны. Ҡара ҡараҫаттан, бөлдөргәндән, еләктән һәм ҡурай еләгенән эшләнгән ине улар. Беләм, эш күп саҡта хужабикәләр еләкте таҙалап тормай - ҡабығы менән бергә һауытҡа һала ла, шәкәр менән бутап, утҡа ҡуя. Алдыбыҙға ҡуйылған ҡаймаҡ иһә күңел биреп таҙаланған еләктәрҙән әҙерләнгәйне.

Һоҡландырған, уйландырған күп нәмәгә шаһит булдым мин был ғаиләлә. Ҡул йыуғыс эргәһенә эленгән ап-аҡ таҫтамалды алһам да, сигеп биҙәлгән пәрҙәләргә иғтибар итһәм дә - бөтәһендә лә сафлыҡ, камиллыҡ, мәғәнәһен белеп ойошторолған тормош сағылып тороуын күрҙем. Ҡыҙҙарҙың еңел хәрәкәттәрендә лә, бер-береһе менән йылмайып һөйләшеүҙәрендә лә, әсәләре менән күҙ ҡарашы ярҙамында аралашыуҙарында ла - бөтәһендә лә өлгөлө ғаиләләргә хас сифаттарҙы күреп, үҙемә фәһем алып ултырғайным. Киләсәктә ғаилә ҡорорға тура килһә, тормошто нисек ойоштороrға тигән һорау тыумаясағын мин тап шул мәлдә аңланым. Йыйыштырыусы булып эшләгән Сәмәрә апайҙан өлгө алырға тейешмен, тигән фекергә килдем мин шул саҡта.

Ошоға тиклем бәйән иткәндәремдән сығып, гәзит уҡыусылар үҙҙәре өсөн һығымта яһағандарҙыр, тигән өмөттәмен. әммә ошо ғаиләгә ҡағылышлы бөйөк хәҡиҡәт әле әйтеп бирелмәне. Урындыҡтың өҫтө менән сикләнгән майҙанда ике йоҙроғона таяныһ хәрәкәт иткән ирҙе йортоноң батшаһы кеүек хөрмәтләгән ҡатында тәрән аҡыл булыуын билдәләп китмәһәм, үҙ бурысымды үтәмәгән булыр инем мин. Беҙҙе, ҡунаҡтарын, хөрмәт итеп ултырһа ла, Сәмәрә апай иң тәүҙә иренең ихтыяждарын үтәне бит. Сәй һаған самауыры артынан һөрәнләп ултырманы, ә хәләл ефетенең эргәһенә барып, ишетелерishетелмәҫ тауыш менән аңғәмәләште уның менән. Ризыктың иң яҡшыһын да тәүҙә Сәмәрә апай ире янына алып барып ултыртты. Ике сынаяҡҡа сәй яһарға тура килһә, тәүҙә иренекенә яһаны, шунан һуң ғына ҡалғандарҙыҡын хәстәрләне. ә ҡыҙҙары, ә ҡыҙҙары ниндәй оло хөрмәтләү күрһәтте зәғиф аталарына! Берәүһе уның эргәһенән китеүгә, икенсеһе килеп баҫты шул уҡ урынға. Аталарының сәй эсеп бөтөүен өнһөҙ генә көтөп торҙо ҡыҙҙар - буш сынаяҡты шунда уҡ йүгертеп әсәләренә килтерҙе. Йорттоң, ғаиләнең төп хужаһы ул ине - урындыҡ өҫтөнән үҙ көсө менән төшөргә лә хәле булмаған шул зәғиф ир.

Бөгөн, һүрәтләп кителгән ваҡиғаларға илле йыл тулып килгәндә, халҡыбыҙҙың мөсһөҙләнеүенең бер сәбәбен мин шунда күрәм - ата кешегә хөрмәт юҡ ғаиләлә. Балаларына өмөтләнгән булып, ҡатындар йыш ҡына ирҙәрен ғаиләнән һөрөп тә сығара. Йә иһә күп ата үҙ батшалығында түбәнселектә йәшәргә мәжбүр ителә. Ҡыҙ-тәкә ҡиәфәтенә кереп, ирҙәрен мыҫҡыл итеп йәшәгән ҡатындарға шундай кәңәш бирер инем: үрнәк алығыҙ Сәмәрә апайҙан, үрнәк алығыҙ!

Әйтә алмайым, ошо атаҡлы ғаиләнең тормошо артабан нисек дауам иткәндер. Тәрбиәле ҡыҙҙарҙың яҙмышы уларҙы ҡайҙарға алып киткәндер, уға хәбәрҙар түгелмен. Ҡуяндарға өс ай ҙа эшләп өлгөрмәнем, хәрби хеҙмәткә алдылар мине. Унан ҡайттым да Силәбегә уҡырға киттем. Аҙаҡ ғаилә тормошом башланып китте - баш күтәреп, тирәйүнгә күҙ һалырға ла форсат булманы. Шунан Өфөгә күсеп китергә тура килде. Бөгөн барып һорашыр инем, Ҡуяндар ауылы урынында ҡола ялан ғына йәйрәп ята. Бер нисә йыл элек быны үҙ күҙҙәрем менән күреп ҡайттым. Юлай дуҫым менән юҡҡа сыҡҡан ауылдың урамы аша өнһөҙ генә үттек. Әсебейек тауының башына менеп, тыуған яҡтарыбыҙға, Яғалса яҡтарына, ҡарап торҙоҡ. Шунан, Саҡмағош йылғаһы буйына төшөп, тәнгәләккә ошо урында туҡтарға булдыҡ. Кис еткәс, ҙур булмаған усаҡ яҡтыһында оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултырҙыҡ. Ауыл да юҡ, мәктәп тә юҡ, Сәмәрә апай ҙа юҡ, минең тәүге уҡыусыларым да юҡ - бөтәһе лә тарих төпкөләндә эҙ ҡалдырмай, бөтөнләйгә юғалғандай тойолдо миңә шул кистә.

Ысынында иһә, улай килеп сыҡманы - мин уларға бөгөн икенсе ғүмер бирҙем. Уны юйып ташлау мөмкин түгел, сөнки ул һыуға түгел, ә ташҡа яҙылды.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ.**
**(Аҙағы. Башы 31-се һанда).**

*✓ Йәшен һуғыуҙа ирҙәрҙең үҙҙәрен уйһыҙ-һаҡһыҙ, алабарман тотоуҙары ғәйепле. Шуның яҙаһын алалар ҙа инде, ти ул. Ҡатын-ҡыҙ йәшендән ҡурҡа һәм ышыҡ берәй урынға йәшенә һала йә өйөнә йүгерә.*



КИТАБЕННАС




# АҢЫҢДЫ УЯТ,

## йәки "Бәйғәмбәр" китабы тураһында

**"Беҙгә енәйәт һәм яза тураһында һөйлә", тип мөрәжәғәт иткән судья...**

"Рух-аңығыҙ, елгә эйәргән уйынсыҡтай, һеҙҙе ташлап сығып киткән саҡта, ҡурсалаусыһыҙ янғыҙ ҡалып, башҡаларға ҡаршы яуызлыҡ ҡылаһығыҙ, шуның менән үҙегеҙгә зыян килтерәһегеҙ. Ундай саҡта бәхетлеләр генә инә торған ишек яңынан асылһын өсөн, бар сабырлығығыҙҙы туплап, түҙемлек менән көтөргә ҡала. Һеҙҙең "Мин"егеҙҙең гүзәл өлөшө океан кеүек икһеҙ-сикһеҙ, ул бер ваҡытта ла бысранмай. Ләкин матур "Мин"егеҙ һеҙҙә янғыҙ йәшәмәй, ҡара көстәр аңығыҙҙы томалай. Иң саф Кешегә мөрәжәғәт итәм: енәйәт нимә икәнен һәм уға ниндәй яза тейешен һеҙҙең матур яғығыҙ ҙа, ҡара яғығыҙ ҙа белмәй, тик саф һаҡланған өлөшө генә белә. Яңғыҙ япраҡ бөтөн ағастың өнһөҙ ризалығынан тыш һарғаймағандай, һеҙ эстән генә һүҙһеҙ ризалыҡ бирмәһәгеҙ, эргәгеҙҙәге кеше насарлыҡ эшләмәҫ ине. Әгәр ҙә берегеҙ әләгеп йығылһа, ул артта килгәндәр ҡолаһаһын өсөн йығыла. Ләкин ул алдағыларҙың шул ташты юлдан алмауҙары арҡаһында йығыла. Ишетеүе ауыр булһа ла, әйтәм: үҙенә ҡул һалғандар, үҙ-үҙен үлтергәнe өсөн яуаплылыҡтан азат түгел, талаған да таланыуы өсөн ғәйепһеҙ түгел. Эйе, ғәйепле күп осраҡта ғәйепһеҙҙең ҡорбаны була, хөкөм ителгән ғәйепһеҙҙәр өсөн дә ғазап сигә. Аяғында баҫып торған да, йығылған да - икеһе лә аҡ менән ҡара араһында аҙашҡан бер үк кеше. Ғибәҙәтхананың иң юғарылағы ташы уның нигеҙендәге таштан саҡ ҡына ла юғары түгел.

**"Беҙгә һыҙланыу тураһында аңлат", тигән бер ҡатын...**

"Аңығыҙ кинәйгән һайын ул элекке ҡоршауын онтай. Шул саҡ һыҙланыу тойғоһо кисерәһегеҙ, - тигән Бәйғәмбәр. - Емеш эсендәге орлоҡ ҡояшты күрер өсөн һөйәген онтарға тейеш - шуның кеүек аң үҫеше лә һыҙланыуҙар аша килә. Әгәр ҙә күңелегеҙ мөғжизәләргә ғәжәпләнеүҙән туктамаһа, һыҙланыуға иҫегеҙ ҙә китмәҫ ине, уны шатлыҡ кеүек күрер инегеҙ. Һыҙланыуҙарығыҙҙың күбеһен үҙегеҙ һайлап алғанһығыҙ. Һыҙланыу - ул "Мин"егеҙҙең ауырыған өлөшөн дауалаусы әсе дарыу. Шуға күрә күңел табибығыҙҙа ышанығыҙ ҙа, уның дарыуын шым ғына тыңлаусан ҡулланығыҙ".

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ әҙерләнә.**
**(Дауамы бар).**

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

# ЙӘШЕНДӘН НИСЕК ҺАҠЛАНЫРҒА?

**Ғалимдар ҡатын-ҡыҙға ҡарағанда йышыраҡ ир-егетте йәшен һуғыуҙың серен аңлаған.**

Ошо йылдың 27 июлендә Рәсәйҙә быға тиклем күрелмәгән тропик көс менән ябырылған ҡойма ямғыр ваҡытында өс кешене йәшен һуҡҡан. Ирҙәрҙең береһе - Мәскәүҙән, икенсеһе - Брянскиҙан. Шул уҡ көндә Мәскәүҙә тағы бер ҡатын йәшендән һуғыла. Ирҙәрҙең икеһе лә һәләк була, ә ҡатын кеше иҫән ҡала.

Страховкалау компанияһы алып барған донъя статистикаһы ла бындай күренештәрҙе теркәп бара. Уларҙың мәғлүмәттәренә ярашлы, йәшен һуғыуҙан һәләк булғандарҙың 80 проценты - ир-егет. Һауа "кәнсәләре"ндә ни өсөн уларға асыу һаҡлайҙар икән һуң? Мистикаға тартым бер аңлатма йәшәй-йәшәүен: көслө заттар тестостерон - ир енесе гормондары арҡаһында йәшен уғына йышыраҡ эләгә. Ләкин был молекулаларҙың ниндәй тартыу көсө барлығы билдәһеҙ. Әйткәндәй, гормондар гипотезаһы авторҙары раҫлауынса, кешеләр араһынан йәшен тестостероны көслөрәктәрҙе һайлай икән.

АҠШ Милли һауа торошо хеҙмәте тикшеренеүсеһе Джон Дженсениус бындай мистиканы инҡар итә. Уның фекеренсә, йәшен һуғыуҙа ирҙәрҙең үҙҙәрен уйһыҙ-һаҡһыҙ, алабарман тотоуҙары ғәйепле. Шуның яҙаһын алалар ҙа инде, ти ул. Ҡатын-ҡыҙ йәшендән ҡурҡа һәм ышыҡ берәй урынға йәшенә һала йә өйөнә йүгерә. Ә ирҙәр тәбиғәт стихияһының ҡотороноуына бик иҫе китмәй. Дженсениус үҙе анализлаған бер фажиғәле хәлде миҫал итеп килтерә: Луизиананан бер ир йәшен ваҡытында ла гольф уйнауын дауам итә, ә был ваҡыт Көньяҡ Калифорниялағы уның ише уйынға бирелгән тағы ла биш ир бейсбол



һуғыуҙан туктай алмай. Һөҙөмтәлә бөтәһе лә бер үк көндә һәләк була.

Ә рәсәйҙәр һуң? Улар ҙа йәшен мәлендә үҙ-үҙенде тотоу ҡағиҙәләрен һанға һуҡмай. Мәскәүҙә бер ир йәшен ваҡытында ағас төбөндә телефонынан һөйләшеп торған. Брянскиҙа йәшендән һуғылған ир йылға ярында балыҡ ҡармаҡлап ултырған. Йәшен ҡеүәте шул тиклем көслө була: балыҡсының ҡармағы күмергә әйләнә хатта.

**Йәшендән һаҡланыуҙың ете юлы:**

**1.** Ағас төбөндә тормағыҙ - йәшен йышыраҡ бейек объекттарҙы һайлай. Ағас оҙонлоғонан ике тапҡырҙан да ашыуыраҡ араға китеп тороу хәйерлерәк. Ергә эләккәндән һуң йәшен тарала башлай. Һуғылған ерҙән арыраҡ киткән һайын, уның көсөргәнеше кәмей бара, ә ток импульсы аҙымлау көсөргәнешен килтереп тыуҙыра. Аяҡтарҙы киңерәк айырып баҫҡанда, уның тәьҫир көсө тағы ла ныҒыраҡ була. Тап ошо аҙымлау көсөргәнеше арҡаһында кешегә ҡарағанда мал-тыуар йышыраҡ ҡазалана, сөнки һыйыр йә аттың алғы һәм арҡы тояҡтары аралығы ҙурыраҡ була. Йыш ҡына йәшен һыбайлыны һуға. Ҡағиҙә булараҡ, кеше иҫән ҡала, ә ат үлә.

**2.** Асыҡ яланда булһағыҙ, сүгәләп ултырығыҙ ҙа эмбрион позаһы алығыҙ, аяҡтар - бергә. Йәки (көлмәгеҙ!) һыңар аяҡҡа ғына баҫып тороғоҙ (аҙымлау көсөргәнеше хәүефен иҫләгеҙ). Металл әйберҙәргә ҡағылмағыҙ. Кеҫәгеҙҙәге асҡыс, ваҡ аҡса һәм башҡа тимер әйберҙәрҙе бернисә метр алыҫлыҡҡа һалып тороғоҙ. Йәшен һуға ҡалһа, тимер әйберҙәр тәндең яныуына өҫтәмә сәбәп кенә буласағын онотмағыҙ.

**3.** Зонт аҫтында тормағыҙ, ҡулығыҙға ҡармаҡтар, тырма, көрәк, һәнәк, шампур, мылтыҡ алмағыҙ. Бөтә был әйберҙәр асыҡ ерҙә торған үҙ эйәһен үҙенә күрә бер йәшен ҡайтарғысҡа әүерелдерә һәм йәшен һөйрәйәсәк.

**4.** Йәшенле ямғыр үтеүен машина йә автобуста көтөп ултырырға мөмкин, сөнки уларҙың тимер корпусы һаҡлағыс экран булдырып, ғалимдар әйтмешләй, "Фарадей ситлеге"булдыра. Уның эсенә йәшен үтеп инмәй, ә ергә "ағып" төшә.

**5.** Өйҙә булһағыҙ, электр һәм газ приборҙарын һүндерегеҙ. Тәҙрәнән ҡарамағыҙ. Мейескә лә, каминға ла ут яҡмағыҙ - йәшен уғына эҫе һауа енелерәк бирелә. Шунлыҡтан, тәбиғәттә шашлыҡ ҡыҙҙырыусыларға мангал янында булырға ярамай. Юғиһә, ризығын ямғырҙан ҡотҡармаҡсы булып, үҙҙәре күмергә әйләнгән осраҡтар ҙа юҡ түгел.

**6.** Лазер указка менән шаярып, йәшенле болотто яҡтырта күрмәгеҙ, уның нуры ла йәшен һөйрәй.

**7.** Кеҫә телефонығыҙҙы һүндерегеҙ: ул ебәргән һәм ҡабул иткән радиотулҡындар йәшен хасил булыуға сәбәп итеүе бар. Әйткәндәй, һуңғы ваҡытта атмосфера электрланыуының ҡеүәте артыуы, тармаҡланыуы һәм разрядтар йышлығына мобиль телефон станцияларының күбәйеүе лә тәьҫир итә.

УҢЫШ ҠАҘАН



# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

## Эгоизмдың бәҫе

**Уҡымышлы эгоизм зарурлығы**

Мин быларҙы нимәгә һөйләйем? Һеҙ нимәнең ысынлап та ҡәҙерле икәнен һәм нимәнең маҡсатығыҙға - бәхетле тормошҡа яҡынайтырға тейешлеген белергә, йәғни бәхетле булыу фактын ҡабул итеп, бының өсөн ахырынаса эшләргә һәм һис ниндәй ғәйеп тойғоһо кисермәҫкә әҙер булырға тейешһегеҙ. Тимәк, үҙегеҙҙе уратып алған өйөр фекерен кире ҡағаһығыҙ һәм схема буйынса эшләүҙән, ғәйеп тойғоғоҙҙо эксплуатацияләган ялған инаныуҙарҙан баш тартаһығыҙ. Яҙыусы һәм тәрән фекер эйәһе Ян Перси бер ваҡыт шундай ҡыҙыҡлы һорау күтәргән: ни өсөн күптәрҙең был тормошта маҡсаты юҡ? Унынса, улар маҡсат ҡуйырға ла ояла, сөнки уның эгоизм сағылышы булыуына инана. Әммә һеҙ шуны аңлағыҙ: маҡсатығыҙ бик ныҡ эгоистик булырға тейеш! Ян әйтеүенсә: "Шәхси маҡсатығыҙға ынтылыш - үҙегеҙ өсөн эшләй алғандың иң яҡшыһы, шул уҡ ваҡытта ул башҡаларға хеҙмәт итеүҙең иң яҡшы ысулы. Проблема бары тик шунда ғына: кешеләр үҙҙәренең маҡсатына табан бармайынса, башҡаларға хеҙмәт итергә тейешбеҙ, тип уйлай. Әммә тап ошо фекер уларҙың күңелен ҡорота һәм тормоштарын боҙа ла инде. Мәҫәлән, маҡсатығыҙға табан бармайынса өйһөҙгә ярҙам иттегеҙ икән, ти, үҙегеҙҙе кемдер файҙаланған буш һауыт кеүек хис итәсәкһегеҙ. Әгәр шундай уҡ ярҙамды ул тормошоғоҙҙағы маҡсатығыҙға яуап биргән өсөн эшләһәгеҙ, ул энергия булып, күп тапҡырҙар артып кире ҡайтыр".

Артығыҙға боролоп ҡарағыҙ - бөгөнгө тормошта кеше ярҙамһыҙ, ҡул итеп әүәләнгән роботҡа оҡшаш; күпселек бары тик системаның өнһөҙ генә күнел төшөнкөлөгөндә йәшәүсе винтигы ғына. Беҙ уртасалыҡ, боҙоҡлоҡ йә ҡурҡыу, тағы ла тәрәнгәрәк күҙ һалһаҡ, тағы ла әллә күпме нәмәләр менән уратып алынғанбыҙ. Иғтибар итһәгеҙ, һеҙ дөрөҫлөктө әйтеү өсөн урынынан ҡалҡынған Билл Косбиҙың, гравитация ҡанундарын һанға һуҡмаған Майкл Джорданды, Мысыр пирамидаларын, "Алтын ҡапҡа" күперен, болоттар араһынан күренмәгән бейек йорттар төҙөгән кешеләрҙең бөйөклөгөн, ҡаһарманлығын күрерһегеҙ. Пуччиниҙың операһын ишетә, Хемингуэйҙың китаптарын уҡый, Принцтың ижады менән һоҡлана алырһығыҙ; бәхетһеҙ осраҡтан һуң фалиж һуҡҡан йәш спортсының, яман шеш менән көрәшеүселәрҙең, балаларын янғыҙ тәрбиәләгән әсәләрҙең ныҡлы рух алдында әйтеп булмаҫлыҡ хистәр кисерерһегеҙ.

Һеҙ кеше рухының бөйөклөгөн тойорһоғоҙ һәм кешенең күп нәмәгә хәленән килә икәнлеген аңларһығыҙ. Кеше асылы менән көсһөҙ һәм яҡлауһыҙ түгел, ул был халәткә үҙенең аңын тыңлауҙан туҡтағас килә.

Үҙегеҙҙең бөйөк эштәр атҡарырға һәләтле икәнлегегеҙҙе тойорһоғоҙ. Тәүәккәл, ҡыйыу һәм уйлап табыусан була алырһығыҙ, сәләмәт, бәхетле, бай тормош менән йәшәрһегеҙ. Һәм был тормошто тағы ла яҡшыртырһығыҙ. Әгәр тормошоғоҙҙа маҡсат булһа, һеҙ бөтөн нәмәне тормошҡа ашыра, ул ғына ла түгел, артығын эшләй аласаҡһығыҙ.

Әммә тормошта тағы ла бер мөһим элемент - фәлсәфә бар. Уның менән артабан танышырбыҙ.

**Рэнди ГЕЙДЖ.**



## 10 АВГУСТА
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.30, 15.20 "Мужское/Женское" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Дом с лилиями". Мелодраматический сериал. 17-я и 18-я серии (12+).
23.35 "Викинги". Исторический сериал. 1-я и 2-я серии (18+).
01.25, 03.05 "Холодные сердца". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.
03.05 "Мисс Март". Худ. фильм (18+).

### РОССИЯ 1

05.00, 09.15 "Утро России".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал. "Практикантка" (12+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Вы заказывали убийство". Сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Полицейский участок". 1-я и 2-я серии. Детективный сериал (12+).
22.55 "Чужое гнездо". 51-я и 52-я серии. Мелодраматический сериал (12+).
00.50 "Гардемарины, вперед!" Сериал.
02.35 "Прости меня, мама". Сериал (12+).
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан.**
**07.05 "Сәләм" (12+).**
**10.00, 13.30, 18.30, 22.30 Новости недели (на башк. яз.) (0+).**
**10.30 "Фанташ" (0+).**
**10.45 "Книга сказок" (0+).**
**11.00 "Надо знать" (6+).**
**11.15 "Замандаш" (6+).**
**11.30 Новости недели.**
**12.15 "Весело живем" (12+).**
**12.30 "Автограф" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.45 "Ермоловы". Сериал (16+).**
**14.45 "Бауырһаҡ" (0+).**
**15.00 "Ғәләмәт донья" (0+).**
**15.15 "Преград.net" (0+).**
**15.30 "Гора новостей" (0+).**
**15.45 "Птица счастья". Сериал (12+).**
**16.30 "Хазина" (6+).**
**17.15 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**17.30, 21.30 Новости.**
**17.45 "Большой чемодан" (6+).**
**19.00 "Телецентр".**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости спорта.**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**23.00 "Банда Келли". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Любишь, не любишь?" (12+).**

## 11 АВГУСТА
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10, 04.30 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.30 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Дом с лилиями". Мелодраматический сериал (12+).
14.30, 15.20 "Мужское/Женское" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Дом с лилиями". 19-я и 20-я серии (16+).
23.35 "Викинги". 3-я и 4-я серии (18+).
01.30, 03.05 "Муха-2". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00 "Утро России".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Заказчик". Сериал (12+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Вы заказывали убийство". Сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Полицейский участок". 3-я и 4-я серии (16+).
22.55 "Чужое гнездо". 53-я и 54-я серии (12+).
00.50 "Гардемарины, вперед!" Приключенческий сериал.
02.30 "Прости меня, мама". Сериал (12+).
03.30 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### БСТ

**07.00 "Гимн Республики Башкортостан".**
**07.05 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Приключения Танчика" (0+).**
**10.30 "Зеркальце" (0+).**
**10.45 "Перекличка" (0+).**
**11.00 "Надо знать" (6+).**
**11.15 "Замандаш" (6+).**
**11.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Врачи" (12+).**
**12.30 "Башҡорттар" (6+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.45 "Ермоловы". Сериал (16+).**
**14.45 "Шәп арба" (0+).**
**15.00 "Семәр" (0+).**
**15.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**15.30 "Гора новостей" (0+).**
**15.45 "Птица счастья". Сериал (12+).**
**16.30 "Орнамент" (0+).**
**16.45 "Дорога к храму" (0+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.45 "Большой чемодан" (6+).**
**19.00 "Близнецы". Сериал (16+).**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости. Тема дня.**
**21.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "Новый парень моей мамы". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Райса + Файзи" (12+).**

## 12 АВГУСТА
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.35 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Дом с лилиями". Мелодраматический сериал (16+).
14.30, 15.20 "Мужское/Женское" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Дом с лилиями". 21-я и 22-я серии (16+).
23.35 "Викинги". 5-я и 6-я серии (16+).
01.25, 03.05 "Где угодно, только не здесь". Комедия (16+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 09.15 "Утро России".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал. "Заказчик" (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Вы заказывали убийство". Детективный сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Полицейский участок". 5-я и 6-я серии (16+).
22.55 "Чужое гнездо". 55-57 серии (12+).
01.45 "Гардемарины, вперед!" Сериал.
03.10 "Прости меня, мама". Сериал (12+).
04.10 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Гимн Республики Башкортостан.**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Приключения Танчика" (0+).**
**10.30 "Книга сказок" (0+).**
**10.45 "Борсаҡ" (0+).**
**11.00 "Надо знать" (6+).**
**11.15 "Замандаш" (6+).**
**11.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Врачи" (12+).**
**12.30 "Тәмле" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.45 "Ермоловы". Сериал (16+).**
**14.45 "Бауырһаҡ" (0+).**
**15.00 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**15.15 "Физра. Спортблог спецкора" (0+).**
**15.30 "Гора новостей" (6+).**
**15.45 "Птица счастья". Сериал (12+).**
**16.30 "Орнамент" (0+).**
**16.45 "Здоровое решение" (12+).**
**17.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**17.45 "Большой чемодан" (6+).**
**18.50 Хоккей. Товарищеский матч. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Торос" (Нефтекамск).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Белый олеандр". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Похищение стариков" (12+).**

## 13 АВГУСТА
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами) (16+).
12.20 "Дом с лилиями". Сериал (16+).
14.30, 15.20 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Дом с лилиями". 23-я и 24-я, заключительные, серии (16+).
23.35 "Викинги". 7-8-я серии (15+).
01.20 "Суровое испытание".
03.00 Новости.
03.05 "Суровое испытание".
03.45 "Модный приговор" (16+).

### РОССИЯ 1

05.00 "Утро России".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
11.00, 14.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Вы заказывали убийство". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Полицейский участок". 7-8-я серии. Мелодраматический сериал (12+).
22.55 "Чужое гнездо". 58-60-я, заключительная, серии (12+).
01.45 "Гардемарины, вперед!"
03.25 "Прости меня, мама" (12+).
04.25 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан.**
**07.05"Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Приключения Танчика" (0+).**
**10.30 "Дети-герои" (0+).**
**10.45 "Цирк в 13 метров" (0+).**
**11.00 "Надо знать" (6+).**
**11.15 "Замандаш" (6+).**
**11.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Врачи" (12+).**
**12.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.45 "Ермоловы" (16+).**
**14.45 "Фанташ" (0+).**
**15.00 "Семәр" (0+).**
**15.15 "Ғәләмәт донья" (0+).**
**15.30 "Гора новостей" (0+).**
**15.45 "Млечный путь" (12+).**
**16.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**17.45 "Большой чемодан" (6+).**
**19.00 "Близнецы". Сериал (16+).**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости. Тема дня.**
**21.00 "Наука 102" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "ФК "Уфа" - наша команда!" (6+).**
**23.30 "Время желаний" (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.45 "Любви все возрасты покорны" (12+).**

## 14 АВГУСТА
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00, 15.00 Новости (с субтитрами) (16+).
12.20 "Дом с лилиями". Сериал (16+).
14.30, 15.20 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Поле чудес" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Три аккорда". Музыкальное шоу (16+).
23.30 "Викинги". 9-10-я, заключительная, серии (15+).
01.15 "27 свадеб" (16+).
03.15 "Модный приговор" (16+).

### РОССИЯ 1

05.00 "Утро России".
09.00 "Хрустальный соловей".
10.00 "О самом главном".
11.00, 14.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Вы заказывали убийство". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Измайловский парк". Юмористический концерт (12+).
22.55 "Вальс-бостон". Мелодрама (12+).
00.50 "Живой звук".
02.50 "Горячая десятка" (12+).
03.55 "Смерш против Абвера. Операция "Следопыт" (12+).
04.55 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан.**
**07.05"Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Приключения Танчика" (0+).**
**10.30 "Городок АЮЯ" (0+).**
**10.45 "Ал да гөл".**
**11.00 "Надо знать" (6+).**
**11.15 "Замандаш" (6+).**
**11.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Врачи" (12+).**
**12.30, 21.00 "Автограф" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.45 "Ермоловы" (16+).**
**14.45 "Байтус" (6+).**
**15.00 "Сулпылар" (0+).**
**15.15 "Тамыр на фестивале "Включайся!" (0+).**
**15.30 "Каникулы Нестрогого режима" (0+).**
**15.45 "Задорный пляс" (0+).**
**16.30 "Орнамент" (0+).**
**16.45 "ФК "Уфа" - наша команда!" (6+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.45 "Позывной "Барс" (12+).**
**18.00 "Йома" (0+).**
**19.00 "Близнецы". Сериал (16+).**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости. Тема дня (на башк. яз.).**
**22.00 "Аль-Фатиха" (6+).**
**23.00 "Воздушный маршал" (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Башкирская свадьба" (12+).**

## 15 АВГУСТА
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

04.40 "Евдокия".
06.00 Новости.
06.50 "Дурная кровь". Худ. фильм.
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Олег Табаков. "Смотрю на мир влюбленными глазами" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.10 "Личная жизнь следователя Савельева". Сериал (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Личная жизнь следователя Савельева" (16+).
17.30 "Угадай мелодию" (12+).
18.00 Новости (с субтитрами).
18.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
19.15 "ДОстояние РЕспублики: Валерий Леонтьев".
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.00 "КВН". Премьер-лига (16+).
00.30 "Цой - "Кино" (12+).
01.25 "Люди Икс: последняя битва" (16+).
03.20 "Парни не плачут" (18+).
05.20 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.40 "Мы из джаза". Худ. фильм (16+).
07.30 "Сельское утро".
08.00 "Вести".
08.10 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Военная программа" Александра Сладкова.
08.50 "Планета собак".
09.25 "Субботник".
10.05 "Качество жизни".
11.00 "Вести".
11.10 "Вести-Башкортостан".
11.20 "Кулинарная звезда" (12+).
12.20 "Белая ворона" (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Белая ворона". Продолжение сериала (16+).
16.05 "Субботний вечер".
17.55 "Любовь из пробирки". Мелодрама.
20.00 "Вести".
20.35 "Когда его совсем не ждешь". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
00.25 "Мой белый и пушистый". Худ. фильм (12+).
02.30 "Веришь, не веришь". Худ. фильм (16+).
04.05 "Николай Вавилов. Накормивший человечество".
05.05 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан.**
**07.05, 22.30 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.15 "Каспер: школа страха" (0+).**
**09.30 "Здоровое решение" (12+).**
**10.00 "КЛИО" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "Аль-Фатиха" (6+).**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**12.30, 21.30 Новости.**
**12.45 "Наука 102" (12+).**
**13.15 "Позывной "Барс" (12+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байыҡ" представляет…" (6+).**
**16.45 "Хазина" (6+).**
**17.15 "Последнее море Чингисхана" (12+).**
**19.00 "Башҡорттар" (6+).**
**19.30 "История признания" (0+).**
**19.45 "Уимблдон" (12+).**
**22.00 "Как закалялась бронза" (6+).**
**23.00 "Башҡорт йыры" представляет…" (12+).**
**23.45 "Внутри Льюина Дэвиса". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 "Не ломайте крылья" (12+).**

## 16 АВГУСТА
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Дурная кровь". Худ. фильм (16+).
08.10 "Армейский магазин" (16+).
08.40 "Смешарики. ПИН-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Непутевые заметки" (12+).
10.40 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 "Идеальный ремонт".
13.05 "Папа напрокат". Комедия (12+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15ю10 "Романовы". Док. фильм (12+).
17.15 "Голосящий КиВиН". Музыкальный фестиваль (16+).
19.50 "Аффтар жжот" (16+).
21.00 "Время".
21.45 "Заложница". Боевик (16+).
23.25 "Танцуй!" (16+).
01.10 "День, когда земля остановилась". Фантастика (16+).
03.05 "Можешь не стучать" (16+).

### РОССИЯ 1

06.30 "Отпуск за свой счет" (12+).
09.10 "Смехопанорама Евгения Петросяна".
09.40 "Утренняя почта".
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.25 "Родители". Сериал (12+).
12.20 "Только ты". Мелодрама (16+).
14.00 "Вести".
14.10 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.
16.15 "Переезд". Драматический сериал (12+).
20.00 "Вести".
21.00 "Переезд". Продолжение сериала (12+).
00.50 "Мы поженимся. В крайнем случае, созвонимся!" Мелодрама (16+).
02.40 "Планета собак".
03.15 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (12+).**
**07.05 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Йома" (0+).**
**08.30 "Автомобиль, скрипка и собака Клякса" (0+).**
**10.00 "Физра. Спортблог спецкора" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Бауырһаҡ" (0+).**
**10.45 "Фанташ" (0+).**
**11.00 "Ал да гөл" (0+).**
**11.15 "Байтус" (0+).**
**11.30 "Сулпылар" (0+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**15.30 "Живой родник" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.30 "Замандаш" (6+).**
**16.45 "Наливные яблоки" (12+).**
**19.00 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**19.15 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (0+).**
**19.30 "История признания" (0+).**
**19.45 "Полезные новости" (12+).**
**20.00 "Любимое дело" (12+).**
**20.15 "Рыцари неба" (6+).**
**20.45 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Байыҡ" представляет…" (6+).**
**23.15 "Вечер.com" (12+).**
**24.00 "Свидание с джазом" (12+).**
**00.30 "Осенний марафон" (12+).**
**02.00 "Анфиса" (12+).**
**04.30 "Open.air". Симфоническая ночь (12+).**

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# БАШҠОРТ БИОЛОГТАРЫ




**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА төҙөнө.**

**31-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Амбар. **Әхтәмов**. **Мортазин.** Ғәлиәм. ТСТ. Ылаҡ. Нарком. Ошве. Перельман. Айыт. Норд. Шрек. Имашев. Абрам. Әйлән. Ағас. Алма. Рота. Иҫәп. Аҙау.

**Вертикаль буйынса:** Турпыша. Метеорҙар. Даулашма. Әхәт. **Ғайсин**. Алыу. Мэтьюз. Кәсер. Онн. Олпа. Ныҡыш. Лифт. Риони. Арпа. Ғәйнетдинов. Алаша. Ирек. **Мәхмүтов**.

*СӘЛӘМӘТ БУЛ!*

## АЛМАЛЫ ЭСЕМЛЕК

Был эсемлекте көн дауамында сәй, кофе һәм төрлө һуттар урынына эсергә була. Уны эшләү өсөн өс алманы ваҡлап турарға (йәшел алма яҡшыраҡ булыр), өҫтөнә бер литр ҡайнар һыу ҡойорға һәм ун минут талғын утта ҡайнатырға. Ҡайнатманы ярты сәғәт төнәтеп, үҙегеҙгә оҡшаған тиклем бал һәм имбир һалып бутап, йылы көйөнсә эсергә кәрәк. Был эсемлек организмдың тонусын яҡшыртыуҙан тыш, сәләмәтлекте лә нығыта. Сөнки алма бешкән һыу бөтә организмға яҡшы тәьҫир итә, шешенеүҙе бөтөрә, ә имбир аш һеңдереүҙе һәм ҡан әйләнешен яҡшырта.

## ШЕШЕНЕҮҘЕ НИСЕК БӨТӨРӨРГӘ?

Кискә табан аяҡтарығыҙ шешеп, яраҡан туфлигеҙҙе кейеп сығыуы ауырға тура килһә, йәки иртәнсәк көҙгөгә ҡарап, шешенгән битегеҙҙе күреп аптырашта ҡалһағыҙ, ошо кәңәште ҡулланып ҡарағыҙ. Шешенеүҙе бөтөрөү өсөн 5 ҡалаҡ етен орлоғона бер литр һыу ҡойоп, ун минут дауамында талғын утта ҡайнатырға кәрәк. Ҡайнатманы бер көн ҡараңғы урынға ҡуйып төнәткәндән һуң ҡуллана башларға мөмкин. Был төнәтмәне көн дауамында ярты стакан күләмендә 2-2,5 сәғәт һайын эсергә кәрәк, тәмләтеү өсөн саҡ ҡына һут ҡушырға була. Бер-нисә көн эсендә шешенеүегеҙ бөтөр.

## БЫУЫНДАРЫҢ ҺЫҘЛАЙМЫ?

● Һырғанаҡтың яңы йыйылған емештәрен бутҡаға әйләнгәнсе бешекләргә һәм эҫе көйөнсә генә туҡымаға һалып, ауыртҡан урынға ҡапларға кәрәк.

● Һырғанаҡ япраҡтарын кәстрүлгә һалып (күп кәрәкмәй), өҫтөнә япраҡтарҙы саҡ ҡына ҡапларлыҡ итеп һыу ҡойорға һәм утҡа ҡуйырға. Һыу ҡайнап сыҡҡас, утты кәметергә һәм ун минуттан һүндерергә. Япраҡтарҙы һөҙөп алырға һәм ҡайнатманы бүлмә температураһына тиклем һыуытырға. Йоҡлар алдынан һыҙланған быуындарҙы ыуырға.

● Бер ҡалаҡ һырғанаҡтан эшләнгән майҙы талғын утта йылытып, 1/2 ҡалаҡ бодяга ҡушып, яҡшылап бутарға. Йоҡлар алдынан быуындарға һөртөргә һәм йөн туҡыма менән ҡаплап, бәйләп ҡуйырға. Әгәр ҙә көн дауамында өйҙә торһағыҙ, иртәнсәктән алып дауаланырға мөмкин.

● 350 грамм аҡ майҙы иретергә һәм 350 грамм һырғанаҡ майы ҡушып, яҡшылап бутарға кәрәк. Май һыуынғандан һуң уға 10 грамм камфара һалырға һәм һауыты менән бер көнгә йылы урынға ҡуйырға. Һыҙлаған урынды көн дә йоҡлар алдынан шуның менән майларға кәрәк.

● 60 грамм камфараны 10 мл 95 процентлы спиртҡа һалып бутарға, 50 грамм һырғанаҡ тамыры онтағын, 3 йомортҡа ағын һәм бер ҡалаҡ һырғанаҡ ҡушырға. Ҡушылмаларҙы миксер ярҙамында яҡшылап бутарға һәм йоҡлар алдынан һыҙлаған быуындарҙы ыуырға.

**Сәриә ҒАРИПОВА әҙерләне.**

*БАҠСА*

# ЙОД ҺӘМ ЗЕЛЁНКА ЯРҘАМЫ

**Һәр баҡсасы үҙе үҫтергән йәшелсәнең таҙа булыуын теләп, ағыулы химикаттар ҡулланмай, халыҡ сараларына өҫтөнлөк бирә. Ысынлап та, был сараларҙың күбеһе файҙалы. Әммә баҡсасылар ҡул аҫтында булған йод һәм зелёнка ҡыярҙың ҡайһы бер ауырыуҙарын бөтөрөргә һәм уңдырышлылығын арттырырға ярҙам итә икәнен белеп тә бөтмәйҙер әле.**

Баҡтиһәң, зелёнка составындағы баҡыр матдәһе үҫемлектәрҙе төрлө микробтарҙан һаҡлау өсөн файҙалы икән. Зелёнканы ҡулланыу ҡыярҙың төҫөнә тәьҫир итмәй, шуныһы ла мөһим.

● Ҡыяр үҫентеләренең һабағы серегән осраҡта уңышты йыйып алғандан һуң бер биҙрә һыуға 10 тамсы зелёнка тамыҙып һибергә кәрәк. Был иретмәне йәшелсә "ауырый" башламаҫ элек, алдараҡ һибергә лә була. Шулай уҡ үҫемлектәргә 10 литр һыуға 10 мл йод нисбәтендә эшләнгән һыу һиптереү ҙә файҙалы. Тағы ла ҡыярҙы был ауырыуҙан һаҡлау өсөн уның һабағын ерҙән алып, ун сантиметр тирәһе бейеклектә 1:2 нисбәтендә йод йә зелёнка һалынған һыу менән буярға була. Ике ҡулланыуҙан уҡ яҡшы һөҙөмтә бирә. Был ысул бигерәк тә вертикаль рәүештә үҫкән ҡыяр үҫентеләрен сереүҙән һаҡлай.

● Онло ысыҡ ауырыуынан ҡыяр үҫентеләре һарғайып һулый башлай. Был ауырыуҙан янған бесән төнәтмәһе ярҙам итер. Уны эшләү өсөн ҙур булмаған мискәнең яртыһына тиклем янған бесәнде һалып, өҫтөнә сығарғансы һыу ҡойоп, 2-3 көн төнәтеп, һөҙөп алырға. Төнәтмәне һипкәндән һуң бер аҙна туҡталып торорға, шунан тағы ла һибергә кәрәк. Өс тапҡыр ҡулланғандан һуң ҡыяр үҫентеләренең онло ысыҡ ауырыуы бөтә.

Ә бына ялған онло ысыҡ ауырыуын бер биҙрә һыуға 10 мл зелёнка, 2 литр эремсек һыуы (һөт ҡулланырға ла була), 50 грамм мочевина һалып эшләнгән иҙмә ярҙамында бөтөрөргә була. Ҡыяр үҫентеләрен ошо рәүешле миҙгелгә өс тапҡыр эшкәртергә тәҡдим ителә: тәүҙә ҡыяр сәскә ата башлаған осорҙа, һуңынан бер аҙна аша.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1436 һижри йыл.*

| Август (Шәүүәл - Зөлкағиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 10 (25) дүшәмбе | 4:13 | 5:43 | 13:30 | 19:28 | 20:58 | 22:28 |
| 11 (26) шишәмбе | 4:15 | 5:45 | 13:30 | 19:26 | 20:56 | 22:26 |
| 12 (27) шаршамбы | 4:16 | 5:46 | 13:30 | 19:23 | 20:53 | 22:23 |
| 13 (28) кесе йома | 4:18 | 5:48 | 13:30 | 19:21 | 20:51 | 22:21 |
| 14 (29) йома | 4:20 | 5:50 | 13:30 | 19:19 | 20:49 | 22:19 |
| 15 (30) шәмбе | 4:22 | 5:52 | 13:30 | 19:17 | 20:47 | 22:17 |
| 16 (1) йәкшәмбе | 4:24 | 5:54 | 13:30 | 19:15 | 20:45 | 22:15 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

МӘҘӘНИӘТ, СӘНҒӘТ, СПОРТ...

## РЕЖИССЕР ЕҢЕҮЕ



Башҡорт режиссеры Айҙар Зарипов Рәсәйҙең Мәҙәниәт министрлығы ҡарамағындағы йәш режиссерҙарға ярҙам итеү буйынса ойошторолған конкурстың 20 еңеүсеһе исемлегенә инде. Уның "Мөхәббәт һәм гамма" (Ҡырмыҫҡа иләүе) спектакле иң яҡшыларҙың береһе тип табылды. Спектакль киләһе миҙгелдә Салауат дәүләт башҡорт драма театры сәхнәһендә ҡуйыласаҡ.

Конкурста ҡатнашыу өсөн бөтәһе 55 ғариза тапшырылған. Тауыш биргәндә бәйгелә беренсе тапҡыр ҡатнашыусы, балалар өсөн спектаклдәр ҡуйыусы йәш режиссерҙарға, шулай уҡ төбәк һәм бәләкәй ҡалаларҙың театрҙарында күрһәтелгән сәхнә әҫәрҙәренә өҫтөнлөк бирелгән. Айҙар Зарипов - актер, режиссер, заманса драматургия һәм режиссура буйынса республика семинар-лабораторияһында ҡатнашыусы. "Мөхәббәт һәм гамма" пьесаһын йәш драматург Дамир Йософов яҙған.

## ТӘЖРИБӘ ЛӘ, АРАЛАШЫУ ҘА...



Төркиәнең Аҡһарай ҡалаһында ТӨРКСОЙ-ҙың XVIII пленэрында ҡатнашыусыларҙың күргәҙмәһе асылды, быйыл унда 18 илдән ижадсылар йыйылды. Ике аҙна дауамында төрки илдәре һәм төбәктәренән килгән 21 рәссам төрлө жанрҙа һәм стилдә 100-ҙән ашыу рәсем төшөрҙө. Күргәҙмә ҡала халҡында һәм матбуғат вәкилдәрендә ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы.

Әзербайжан, Төркиә, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Төркмәнстан, Төньяҡ Кипр, Болгария, Германия һәм башҡа илдәрҙең сәнғәт әһелдәре менән бер рәттән пленэрҙа башҡорт рәссамы Рәлиф Әхмәтшин да ҡатнашты. Төрки донъяһы рәссамдарының сираттағы осрашыуын ТӨРКСОЙ Аҡһарай хакимиәте менән берлектә ойошторҙо. Күргәҙмәне асыу тантанаһында Аҡһарай мэры Халюк Шахин Яҙғы ҡатнашты. Ул экспозиция менән ентекле рәүештә танышты һәм пленэрҙа ҡатнашыусы һәр кемде сәләмләне.

"Бына 18 йыл инде рәссамдарҙың осрашыуы ТӨРКСОЙ-ҙың саралар календарында мөһим урын биләй. Ошо осрашыуҙарҙың ижади мөхите мәҙәниәттәрҙе байытыуға булышлыҡ итә. Бында яҙылған картиналар ТӨРКСОЙ-ҙың коллекцияһын тулыландыра, ул үҙ сиратында донъяның байтаҡ илдәрендә күрһәтелә, кешеләрҙе төрки халыҡтарының мәҙәниәте менән таныштыра", - тип билдәләне ТӨРКСОЙ-ҙың генераль секретары Дүсән Касеинов.

"Һәр пленэр - оло тәжрибә һәм аралашыу. Был ижади, профессиональ яҡтан даирәне киңәйтә. Ошо ике аҙна минең өсөн бик файҙалы булды", - тип тәьҫораттары менән уртаҡлашты Рәлиф Әхмәтшин.

## РӘСӘЙҘӘ ИҢ БЕЙЕГЕ



Өфөлә тыл эшсәндәренә арналған һәйкәл асыла. Рәсәйҙә иң бейеге булған һәйкәл баш ҡаланың Еңеү паркында урынлаштырыласаҡ. Стеланың бейеклеге - һигеҙ метр, ә скульптура төркөмө 5,5 метрҙан ашыу тәшкил итә.

Архитекторҙар уйлауынса, был нефтсе, игенсе, ҡорос иретеүсе, туҡыусы, эшсе, станок артында торған үсмер һәм уның олатаһының бронза һындары буласаҡ. Һуғыш йылдарындағы бар ауырлыҡтар уларҙың иңенә төшкән. Артҡы планда Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Башҡортостан фронтҡа оҙатҡан продукция - авиация двигателдәре, ҡорос, нефть, аҙыҡ-түлек төшөрөлгән барельеф буласаҡ. Хәҙерге ваҡытта Химки ҡалаһы оҫтаханаһында тыл эшсәндәренең һындары ҡойола, һәйкәл ҡуйыласаҡ урында нигеҙ һалына һәм биләмә төҙөкләндерелә. Объектты тапшырыуға ике ай самаһы ҡалған. Төҙөүселәр эштәрҙе сентябрь уртаһына тамамларға ниәтләй. Орджоникидзе районы хакимиәтендә белдереүҙәренсә, проекттың авторы - Рәсәйҙең Рәссамдар союзы рәйесе Андрей Ковальчук. Һәйкәл ҡуйыу идеяһын Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы тәҡдим иткән.

## КҮРГӘҘМӘГӘ САҠЫРЫУ

Өфөнөң "Болоттар" заманса сәнғәт үҙәгендә Сулпан Билалованың "Таш йыйыусылар" тип аталған шәхси күргәҙмәһе асылды. Сулпан Билалова - билдәле башҡорт рәссамы, хәҙер Мәскәүҙә йәшәй. Рәсәйҙең Рәссамдар союзы ағзаһы, Шәйехзада Бабич исемендәге дәүләт республика йәштәр премияһы лауреаты.

"Беҙ барыбыҙ ҙа тәбиғәт балалары, таштар иһә беҙҙе ғүмер буйына оҙатып йөрөй, - ти рәссам. - Күргәҙмәнең исеменә тәрән мәғәнә һалынған: минең өсөн таштар йыйыу мәле етте, был эштәрҙең барыһы ла ошо коллекцияға тупланыуы осраҡлы түгел".

Өфөләге күргәҙмәгә ҡуйылған эштәрҙең яртыһы Башҡортостанда төшөрөлгән. Автор гүзәл бала саҡ донъяһын һүрәтләй. Улар араһында "Иҫке ҡоҙоҡ", "Таш йыйыусы", "Әсәй бишеге" - "Атай бишеге", "Кояш аҫтындағы батшалыҡ", "Тауыҡ", "Дегәнәк" картиналары бар. Баш ҡала тамашасыһына тәүге тапҡыр тәҡдим ителгән был рәсемдәр музыка, әҙәбиәт, тәбиғәт күренештәренән алынған тәьҫораттарға бағышланған. Күргәҙмәне асыуҙа рәссамдар, сәнғәт белгестәре, шулай уҡ Норвегиялағы арт-галерея директоры Юстинус Ван Нистелрой ҡатнашты. Ул картиналарҙы Голландиянан Башҡортостанға килтереүҙе ойошторорға ярҙам иткән. Сулпан Билалованың күргәҙмәһе 31 августҡа тиклем дауам итә.

## РАЙОНДАРҒА СЫҒАЙЫҠ...

Башҡорт Википедияһы ағзалары оно интернет-ресурс ирекмәндәренең коммерцияға ҡарамаған йәмәғәт ойошмаһын булдырырға ниәтләй. Үткән йыйылышта улар шундай ҡарар ҡабул итте.

Ултырышта апрель айында Өфөлә уҙғарылған Вики-Һабантуйға йомғаҡ яһалды, шулай уҡ ирекмәндәр хәрәкәтен әүҙем алып барыу һәм уларҙың эшмәкәрлегенең һөҙөмтәлелеген арттырыу буйынса яңы бурыстар билдәләнде. "Вики-проекттар Башҡортостан хаҡында белемде популярлаштырыу, төбәктең ыңғай имиджын булдырыу өсөн ҙур әһәмиәткә эйә. Шуға күрә Башҡорт Википедияһы өсөн мәҡәләләр яҙыуға үҙ өлөшөн индерергә һәләтле кешеләрҙе йәлеп итеү мөһим", - тине Рөстәм Нуриев, йыйылыусылар алдында сығыш яһап. Ирекмәндәр Гүзәл Ситдиҡова, Зөфәр Сәлихов, Тимур Ғимранов, Денис Зианбәтов Башҡорт Википедияһын артабан үҫтереү буйынса тәҡдимдәрен индерҙе. 2015-2016 йылдарҙың көҙгө-ҡышҡы осорона анығ саралар планын төҙөргә хәл ителде. Унда райондарҙа күсмә семинарҙар, оҫталыҡ кластары үткәреү, фәнни, белем биреү, мәҙәниәт һәм йәмәғәт ойошмалары менән тығыҙ бәйләнештә эшләү тураһында пункттар буласаҡ. Шулай уҡ ирекмәндәрҙең коммерцияға ҡарамаған ойошмаһын булдырыу тураһында фекер яңғыраны.

## ЕҢЕҮҘӘР КӨТӘБЕҘ

Яңыртылған "Нефтсе" стадионының матбуғат үҙәгендә Рәсәй футбол Премьер-лигаһы кимәлендә тәүге тапҡыр матбуғат конференцияһы уҙҙы. Рәсәй футбол Премьер-лигаһы комиссияһы һәм Башҡортостан полицияһы ошо 15 мең көйәрмәнгә иҫәпләнгән аренала уйындар уҙғарырға рөхсәт бирҙе.

Матбуғат конференцияһында "Өфө" футбол клубы президенты Марат Мәһәҙиев һәм клубтың генераль директоры Шамил Ғәзизов ҡатнашты. Киң мәғлүмәт саралары менән осрашыу "Өфө" футбол клубы һәм Рәсәйҙең чемпионы - Санкт-Петербургтың "Зенит"ы араһында буласаҡ матчҡа арналды. Санкт-Петербург фанаттары өсөн 1200-ҙән ашыу билет бүленгән. Марат Мәһәҙиев һүҙҙәренсә, ниндәйҙер ҙур тантана үткәреү ҡаралмаған, шулай ҙа милли колорит буласаҡ. Стадионда көйәрмәндәр өсөн туҡланыу урыны асыласаҡ. Кунаҡтарҙы ла иҡтибарһыҙ ҡалдырмағандар - уларҙың яғында ялан кухняһы эшләйәсәк. Марат Мәһәҙиев матчҡа йәмәғәт транспортында килергә саҡырҙы, сөнки автомобиль ҡуйыу урындары сикләнгән. Уйынды "Наш футбол" каналы (НТВ) күрһәтәсәк, тип билдәләнде.

Барыһы ла ҙур спорт байрамын көтә. Йәкшәмбе, 9 августа, баш ҡала ваҡыты буйынса киске сәғәт 6-ла "Өфө" командаһының "Зенит"ты еңәсәгенә өмөтләнергә ҡала.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ТАШТАН...

### йүкә һуйылмай

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Ерҙе яралтҡас, Хоҙай уның өҫтөн йәшеллек менән ҡаплай. Йәшеллек донъяһында камиллыҡ булдырғансы, байтаҡ көс һалырға тура килә Аллаһыға. Ләкин үҫемлектәр донъяһында ла барыһы ла бер көйлө генә бармай. Бына бер заман унда башҡаларҙан айырылып торорға теләгән, үҙен башҡаларҙан өҫтөн тотҡан бер үлән баш ҡалҡыта. Тәүҙә ул бик нык итеп буйға үҫә. Һуңынан нәҙек һабаҡтары ер өҫтөндә тереүһеҙ тора алһын өсөн ҡалыная һәм тупаҫлана башлай. Нескә генә япраҡтары бындай тупаҫ һабаҡта йәмһеҙ күренгәс, үлән уларҙы ла ҙурайта һәм ҡалынайта. Оҙон, итле япраҡтар үләнде уратып урынлаша һәм уның аҫтында күләгә барлыҡҡа килтерә. Үләндең яңы сығып килгән шытымдары был күләгә аҫтында үҫеп китә алмай, һәләк була. Үлән үҙ шытымдарын үлтереү менән генә туҡтамай, йәнәшендәге башҡа төр үләндәргә һөжүм итә башлай. Уларға нисектер зыян килтереү өсөн үҙ тәнендә энәләр барлыҡҡа килтерә. Үләндең башҡаларға һөжүме арттҡан һайын, энәләре лә оҙоная һәм ҡатылана. Үҙ-үҙен яратыу, башҡаларға нәфрәт менән тулышҡан һайын үлән ағыулыға әйләнә.**

**Һәр яҙ һайын башҡалар менән бергә был үлән дә сәскә ата. Уның сағыу һәм матур сәскәләре алыҫтан күренеп тора. Ләкин был матурлыҡ менән бераү ҙә һоҡланмай, хатта уға бөжәктәр ҙә яҡынламай. Әлеге матур сәскәләре лә башҡа үләндәргә ҡарағанда тиҙерәк һарғая. Берҙәнбер көндө үлән шулай бераүгә лә кәрәкмәйенсә йәшәгәнен аңлап ҡала һәм Хоҙайға: "Мине тәүге хәлемә ҡайтар, зинһар. Мин башҡаларға кәрәк булырға теләйем", - тип үтенә. Хоҙай уға шулай ти:"Йән эйәһенең үҙлеге теләгәндә хатта Хоҙай ҙа үҙгәртергә теләмәй. Һинең үҙлегең башҡаларҙан өҫтөн булыуҙы, айырылып тороуҙы теләгәйне, һин айырылып торалһың да. Хәҙер инде һин ғүмереңдең ахырына тиклем ошондай рәүештә йәшәп, башҡаларҙы үҙеңдән ытырғандырып торасаҡһын. Үҙең теләп алған үҙлегең менән ҡәнәғәт бул, сөнки был - һинең асылың. Башҡаларға зыян итмәҫкә һәм үҙ йөҙөң менән йәшеллектең йәмен ебәрмәҫкә теләһәң, берҙәнбер ысулың - һинең Ер йөҙөнән бөтөнләй юҡҡа сығыуың..."**

**"Үҙең юҡҡа сыҡ! - тип ҡоторонол китҡән ағыулы үлән. - Мин әле йәшәйәсәкмен! Башҡаларға файҙалы була алмаһам, зыянлы булып йәшәйәсәкмен! Мин барыһын да үҙемдә танырға мәжбүр итәсәкмен!" Шунан үлән ҡоторол үҫә башлай, бар яланды баҫып ала. Уның тирәһендәге файҙалы үләндәр юҡҡа сыға. Йәшеллектең уның алдында көсһөҙ икәнен күреп, мин бар тәбиғәт менән идара итә алам, тигән уй нығынғандан-нығына. Әммә шул ваҡытта... кеше барлыҡҡа килә. Салғыһын алып, бер нимәгә лә яраҡһыҙ үләнде сабып, уны аяҡтары аҫтына тұшәп, тапап уҙа. Кеше көсөнә ҡаршы тора алмаҫын аңлаған үлән яр буйҙарына, урмандарға ҡаса һәм үҙенең өҫтөнлөгөн иҫбат итергә теләп, хәүефһеҙ урындарҙа тағы ла ҡоторол үҫеүгә дауам итә. Ләкин барыбер бераүгә лә кәрәкмәгән сүп булып ҡала...**

**Кеше лә шулай. Тәүҙә ул барыһынан да өҫтөн булырға ынтыла, шунан мөртәткә әйләнә. Яҙмыш һайлап, әсе тәҡдиргә юлығыуың да бар шул..."**


"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү танытҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририят:**
Лэйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Азамат ӘБҮТАЛИПОВ,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 7 август 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары –
**50665, 50673**

Тиражы - 4717
Заказ 3598